РУССКО-БАШКИРСКИЙ

# СЛОВАРЬ

## ПЕДАГОГИЧЕСКИХ И ПСИХОЛОГИЧЕСКИХ ТЕРМИНОВ

УРЫҪСА-БАШҠОРТСА

## ПЕДАГОГИКА ҺӘМ ПСИХОЛОГИЯ ТЕРМИНДАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

КИТАП

# РУССКО-БАШКИРСКИЙ СЛОВАРЬ ПЕДАГОГИЧЕСКИХ И ПСИХОЛОГИЧЕСКИХ ТЕРМИНОВ

# УРЫҪСА-БАШҠОРТСА ПЕДАГОГИКА ҺӘМ ПСИХОЛОГИЯ ТЕРМИНДАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

Н. Ф. СУФЬЯНОВА

# Русско-башкирский словарь педагогических и психологических терминов

*Одобрено Терминологической службой Комиссии при Кабинете Министров Республики Башкортостан по реализации Закона «О языках народов Республики Башкортостан»*

КИТАП

УФА • 2002

Н. Ф. СУФЬЯНОВА

# УРЫҪСА-БАШҠОРТСА ПЕДАГОГИКА ҺӘМ ПСИХОЛОГИЯ ТЕРМИНДАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

*Башҡортостан Республикаһы*
*Министрҙар Кабинеты ҡарамағындағы*
*«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары*
*телдәре тураһында»ғы*
*Башҡортостан Республикаһы Законын бойомға*
*ашырыу буйынса Комиссияның*
*Терминология хеҙмәте тарафынан хупланды*

КИТАП

ӨФӨ • 2002

УДК 371. 13(03)
ББК 81.2 Баш-4+74+88
С 84

Рецензенты: *доктор педагогических наук, профессор В. И. Баймурзина, доктор филологических наук, профессор М. Х. Ахтямов*

Русская часть терминов для перевода подготовлена специалистами педагогических и психологических наук *Ф. С. Исхаковой и Р. С. Рахматуллиной*

**Суфьянова Н. Ф.**

С 84 Русско-башкирский словарь педагогических и психологических терминов.— Уфа: «Китап», 2002. — 112 с.
ISBN 5-295-03018-0

«Русско-башкирский словарь педагогических и психологических терминов» составлен впервые. Русским и заимствованным терминам найдены наиболее точные соответствия в башкирском языке. Словарь предназначен для учащихся средне-специальных и высших учебных заведений соответствующего профиля, учителей, переводчиков и др.

УДК 371. 13(03)
ББК 81.2 Баш-4+74+88

ПЯ—2002
ISBN 5-295-03018-0

© Н. Ф. Суфьянова, 2002

## БАШ ҺҮҘ

Башҡорт теле Башҡортостан Республикаһында дәүләт теле итеп ҡабул ителгәс, уның ҡулланыу даирәһе лә киңәйә. Мәктәптәрҙә, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнеү, башҡорт балаларына башҡа предметтарҙы ла башҡортса үҙләштереү мөмкинлеге асыла. Ошондай оло маҡсаттар, ынтылыштар менән йәшәү беҙҙең алға ҙур проблемалар ҙа ҡуя: һәр фән өлкәһендә башҡортса ғилми терминология кәрәк. Күп фәндәр буйынса сит телдән урыҫ теле аша ингән ғилми терминдар ҡабул ителгән. Шуға күрә һуңғы ваҡытта һәр фән өлкәһендә ике телле урыҫса-башҡортса терминологик һүҙлектәр төҙөүгә ҙур иғтибар бирелә. Тәҡдим ителгән «Урыҫса-башҡортса педагогика һәм психология терминдары һүҙлеге» лә беренсе тапҡыр төҙөлә. Тәүге төҙөлгән һүҙлек булғанға күрә, урыҫ телендәге терминдарҙың тиңдәшен, йәғни башҡорт телендә уға тура килгән терминдарҙы, алыу менән генә сикләнмәйенсә, һәр терминға аңлатмалар бирелде.

Был аңлатмалар тәржемәнән һуң йәйә эсендә бирелде: **ЭГОЙСТ** үҙемсе *(үҙен, үҙ мәнфәғәтен бөтәһенән өҫтөн ҡуйған кеше).*

Урыҫ телендәге терминдарға мөмкин тиклем башҡортса һүҙ бирергә тырыштыҡ, мәҫәлән: **УПРЯ́МСТВО** үҙһүҙлелек; **ЧЕСТОЛЮ́БИЕ** данһөйөүсәнлек; **ВДОХНОВЕ́НИЕ** илһам, дәрт; **ВЕ́РА** ышаныс; **ВОЗРАСТНА́Я ПСИХОЛО́ГИЯ** йәш осорҙары психологияһы һ.б.

Һүҙлектә ҡайһы бер терминдарға башҡортса яңы тәржемәләр, йәғни башҡорт терминдары, тәҡдим ителә. Әгәр белгестәр оҡшатһа, улар телгә инеп китерҙәр тигән өмөт бар. Мәҫәлән:

**БЕСПРИЗО́РНОСТЬ** бағыуһыҙлыҡ
**ИНТУИ́ЦИЯ** һиҙем, һиҙемләү
**ПО́ЛЕ** *(психологияла)* урата, уратылыш
**ВЛЕЧЕ́НИЕ** мауыҡ (күңелдәге көслө теләк)
**РАЗДА́ТОЧНЫЙ МАТЕРИА́Л** таратма материал
**РЕГРЕ́ССИЯ ПОВЕДЕ́НИЯ** бала холҡона ҡайтыу
**РЕДУКЦИОНИ́ЗМ** яҙлыҡтырыу
**ЭКСТРАВЕРТИ́РОВАННОСТЬ** илгәҙәклек, алсаҡлыҡ
**ФАСИЛИТА́ЦИЯ СОЦИА́ЛЬНАЯ** көнәркәш, (сәмле) дәрт, сәмләнеү
**ТОЛЕРА́НТНОСТЬ** түҙемлек, сабырлыҡ
**ТЕ́СТЫ ДОСТИЖЕ́НИЙ** һөҙөмтә тестары
**ТЕ́СТЫ ИНТЕЛЛЕ́КТА** аҡыл тестары

**ТЕ́СТЫ КРЕАТИ́ВНОСТИ** һәләт тестары

**ТЕ́СТЫ КРИТЕРИА́ЛЬНО-ОРИЕНТИ́РОВАННЫЕ** кимәл тестары

**ТЕ́СТЫ ЛИ́ЧНОСТНЫЕ** шәхсиәт тестары

**ТЕ́СТЫ ПРОЕКТИ́ВНЫЕ** һүрәтләү тестары һ.б.

Урыҫ телендәге күп мәғәнәле терминдың һәр мәғәнәһенә башҡорт телендә һүҙҙәр табылғанда, ул мәғәнәләр нөктәле цифрҙар менән айырып бирелде, мәҫәлән: **РИСК** 1. хәүеф, хәтәр *(һөҙөмтәһе билдәһеҙ, уңышһыҙ, кире нәтижә килеп сығыу мөмкинлеге булған шомло эшмәкәрлек)*; 2. тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ *(эш итеүҙә мөмкин булған ике варианттың береһен нәтижәһе икеле йәки насар һөҙөмтә биреү ихтималлығына ҡарамай һайлау).*

**УБЕЖДЕ́НИЕ** 1. ышаныу, инаныу *(шәхестең ниндәйҙер эш-маҡсатты күңелгә ярашлы, мөһим, әһәмиәтле тип һанаған аңлы ынтылышы. Күңелдә ныҡ тамырланған ҡараш)*; 2. (метод) ышандырыу *(тәрбиәләнеүселәрҙе уҡыу йә башҡа файҙалы йәмәғәт эшмәкәрлегенә ылыҡтырыу йәки насар эш-ҡылыҡтан ситләштереү маҡсатында уларҙың аңына тәьҫир итеүсе педагогик тәрбиә алымы).*

Ә инде бер генә һүҙ бер нисә мәғәнәне аңлатһа, йәйә эсендәге аңлатмала мәғәнәләр айырып күрһәтелде. Мәҫәлән:

**ДИСКУ́ССИЯ** дискуссия, бәхәс (1) *дөйөм эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән төркөмдә ҡарар ҡабул итеү процесын тиҙләтеү маҡсатында ойошторолған алым;* 2) *уҡыу процесын тиҙләтеү һәм һөҙөмтәлелекте күтәреү өсөн уҡыусыларҙы әүҙемләштереү маҡсатында ҡулланылған уҡытыу алымы; 3) махсус төркөмдә субъекттың ҡарашына, йүнәлешенә йоғонто яһау өсөн ойошторолған психотерапия алымы.)*

Урыҫ телендәге терминға һүҙмә-һүҙ тәржемә табылмаһа, ул һүҙбәйләнеш менән бирелде: **ВОСПРИЯ́ТИЕ** ҡабул итеү; **ДЕПРЕ́ССИЯ** күңел төшөнкөлөгө; **ЗАДА́ТКИ** һәләт билдәләре һ.б.

Әгәр бер һүҙ генә терминды тулыһынса асып бөтөрмәгәндәй булһа, башҡорт телендә йөрөгән синонимдар күрһәтелде. Был киләсәктә ошо синонимдарҙың терминға тура килгәнен, уны тулыраҡ асҡанын терминлаштырыу йәки контекст буйынса яҡыныраҡ булғанын һайлап алыу мөмкинлеген тыуҙырыр тип ышанабыҙ. Мәҫәлән: **ИНДИВИ́Д** индивид, шәхес, зат; **ДУХО́ВНОСТЬ** рухилыҡ, рухиәт; **ВЛЕЧЕ́НИЕ** ынтылыш, мауыҡ; **НА́ВЫК** күнекмә, таһыл, оҫол һ.б.

Урыҫ теленән ингән терминдарҙың тәржемә итеп булмағандары башҡорт теленең грамматик формаларында алынды, мәҫәлән: **АВТОРИТА́РНОСТЬ** авторитарлыҡ, **ИНДИВИДУА́ЛЬНОСТЬ** индивидуаллек, **КОНСПЕКТИ́РОВАНИЕ** конспектлау, **КОРРЕЛЯЦИО́ННЫЙ АНАЛИЗ** корреляцион анализ. Әлбиттә, күп интернациональ терминдарҙы башҡортсаға тәржемә итеп булманы, шул көйө ҡалды-

рылды, был киләсәк эше тип ҡарарға кәрәк, мәҫәлән: мутизм, бихевиори́зм, апперце́пция, абу́лия, гешта́льт һ.б. Бындай терминдарҙың ҡайһылары башҡорт теленә шул килеш инеп киткән һәм бер ниндәй аңлатмаһыҙ аңлашылып тора: анке́та, аттеста́ция, зачёт, конце́пция, диссерта́ция һ.б.

Тәржемә итеүе ауыр булһа ла, ҡайһы бер терминдар эргәһенә, аңлатманан сығып, башҡортса вариант бирелде, бәлки киләсәктә был һүҙҙәр белгестәр тарафынан термин булараҡ ҡабул ителер:

КОНФО́РМНОСТЬ конформлыҡ, күндәмлек
ДИСКУ́ССИЯ дискуссия, бәхәс
ГИПО́ТЕЗА гипотеза, (фәнни) фараз
АНАЛО́ГИЯ аналогия, оҡшашлыҡ
АДАПТА́ЦИЯ адаптация, яраҡлашыу һ. б.

Педагогика һәм психологияның күп күренештәре анатомия, физиология төшөнсәләренә нигеҙләнә, нервы эшмәкәрлеге менән, фәлсәфә һәм социология фәндәре менән бәйле. Шуға күрә уларҙың уртаҡ терминдары бик күп. Был һүҙлектә бындай терминдарҙың педагогика һәм психология өлкәһендә ҡулланылған мәғәнәләре бирелә.

«Урыҫса-башҡортса педагогика һәм психология терминдары һүҙлеге» уҡытыусылар, тәрбиәселәр һәм педагогия институттарында, колледждарында уҡыусылар өсөн кәрәкле ҡулланма булыр тип ышанабыҙ.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР:

| | |
|---|---|
| ингл. | — инглиз (һүҙе) |
| гр. | — грек (һүҙе) |
| итал. | — итальян (һүҙе) |
| лат. | — латин (һүҙе) |
| нем. | — немец (һүҙе) |
| фр. | — француз (һүҙе) |
| һ. б. | — һәм башҡалар |
| мәҫ. | — мәҫәлән |

## ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ

1. Ахияров К. Ш., Амиров А. Ф. Краткий словарь педагогических и социально-психологических понятий. Уфа, 1994.

2. Башҡорт теленең һүҙлеге: 2 томда, М., 1993.

3. Башҡортса-русса һүҙлек. М., 1996.

4. Большая Советская Энциклопедия. М., 1969—1978.

5. Горохов В., Касимов А., Хангильдин В. Русча-татарча психология һәм педагогика терминнары сүзлеге. Казан, 1960.

6. Педагогическая энциклопедия: В 4 т. М., 1964—1968.

7. Платонов К. К. Краткий словарь системы психологических понятий. М.: Высшая школа, 1984.

8. Психологический словарь /Под ред. В. В. Давыдова, А. В. Запорожца, Б.В. Ломова и др. М.: Педагогика, 1983.

9. Психология: Словарь / Под ред. А. В. Петровского, М. Г. Ярошевского. М.: Политиздат, 1990.

10. Российская педагогическая энциклопедия: В 2 т. / Под ред. В. В. Давыдова. М., 1993.

11. Ханбиков Я., Ханбикова Ш. Русча-татарча педагогика һәм психология терминнары сүзлеге. Казан, 1985.

# А

**АБСТРА́КЦИЯ** [лат. *abstractio* — айырып алып ҡарау] абстракция *(фекерләүҙең төп операцияларының береһе. Өйрәнелгән объекттың ниндәйҙер сифаттарын билдәләү өсөн, ҡайһы бер айырым үҙенсәлектәренән ситләшеп, уларҙан айырып алып ҡарай).*

**АБУ́ЛИЯ** [гр. *a* — кире киҫәксә, *bule* — ихтыяр көсө] абулия, ихтыярһыҙлыҡ *(эшмәкәрлекте психик көйләүҙең норманан тайпылып зарарланыуы. Кеше үҙенең ниндәйҙер эште башҡарырға тейешлеген аңлаһа ла, уның был эште эшләргә ынтылмауында, ҡарар ҡабул итергә һәм эште башҡарырға һәләтһеҙ булыуында күренә).*

**АВТОДИДА́КТИКА** автодидактика *(шәхестең дөйөм профессиональ белем алыу барышында, өйрәнеү объектына өҫтөнлөклө әһәмиәт биреп, үҙ аллы уҡыу процесы. Автодидактиканың характерлы сифаты булып кешенең мөмкинлектәрен көсәйтеү технологияһын үҙләштереү тора: тиҙ уҡыу, тиҙ хәтерҙә ҡалдырыу* һ.б.).

**АВТОМАТИЗИ́РОВАННАЯ ОБУЧА́ЮЩАЯ СИСТЕ́МА (АОС)** автоматлаштырылған уҡытыу системаһы *(уҡытыуҙы индивидуалләштереүгә йүнәлтелгән, ЭВМ базаһында программа һәм ойоштороу менән тәьмин ителгән техник, уҡытыу-методик, лингвистик комплекс).*

**АВТОРИТА́РНОЕ ВОСПИТА́НИЕ** авторитар тәрбиә *(тәрбиәләнеүсенең тәрбиәсе ихтыярына буйһоноуын күҙ уңында тотҡан тәрбиә концепцияһы).*

**АВТОРИТА́РНОСТЬ** [лат. *autoritas* — абруй, буйһондороу көсө] авторитарлыҡ *(шәхестең үҙ ихтыярына, тәьҫиренә тирә-йүндәгеләрҙе мөмкин тиклем нығыраҡ буйһондороуға ынтылған социаль-психологик һыҙаты).*

**АВТОРИТЕ́Т** [лат. *autoritas* — абруй, буйһондороу көсө] абруй, дәрәжә *(1)индивидтың тотҡан урынына, дәрәжәһенә, вазифаһына нигеҙләнгән танылыҡ; 2) бергә эшләү шарт-*

*тарында индивидтың белеменә, әхлаҡи сифатына, тормош тәжрибәһенә нигеҙләнгән йоғонтоһо. Абруй эйәләренең етәкселек итеүҙәге, яуаплы ҡарар ҡабул итеүҙәге хоҡуғын таныу. Халыҡ алдында яуланған ихтирам).*

**АВТОРСКАЯ ШКОЛА** **автор мәктәбе** *(эшмәкәрлеге автор йәки авторҙар коллективы тарафынан эшләнгән алдынғы психологик һәм педагогик концепцияға нигеҙләнгән уҡыу-тәрбиә учреждениеһы).*

**АГРЕССИЯ** [лат. *aggredi* — һөжүм итеү, ташланыу] **агрессия, баҫҡынсылыҡ, яу** *(икенсе кешегә, кешеләр төркөмөнә физик һәм психологик зыян, ҡаза эшләүгә, юҡ итеүгә йүнәлтелгән индивидуаль йәки коллектив ынтылыш).*

**АДАПТАЦИЯ** [лат. *adapto* — яраҡлашыу] **адаптация, яраҡлашыу** *(организм төҙөлөшөнөң, функцияларының, уның ағза һәм күҙәнәктәренең билдәле бер шарттарға яраҡлашыуы).*

**АКСЕЛЕРАЦИЯ** [лат. *acceleratio* — тиҙләтеү, тиҙләнеш] **акселерация** *(балаларҙың, үсмерҙәрҙең физик үсешендә, физиологик яҡтан өлгөрөүендә күҙәтелгән тиҙләнеш: уларҙың ауырлыҡтары, кәүҙә ҙурлығы ғәҙәттәгенән артыҡ, енси өлгөрөү ҙә иртәрәк була).*

**АКТИВНОСТЬ ЛИЧНОСТИ** **шәхес әүҙемлеге** *(кешенең ижадында, маҡсатлы эштәрендә, аралашыуында сағылыш алған рухи һәм матди байлыҡтарҙы үҙләштереү нигеҙендә ижтимағи әһәмиәтле үҙгәрештәр булдырыу һәләте. Үҙенсәлекле һыҙаты — кешенең тормоштағы идея принципиаллеге, үҙ ҡараштарын тотороҡло, эҙмә-эҙлекле яҡлауы, һүҙенең һәм эшенең берлеге сағылған әүҙем позициялы булыуы).*

**АКТУАЛИЗАЦИЯ** [лат. *actualis* — эшмәкәр] **актуалләштереү** *(үҙләштерелгән материалды файҙаланыу маҡсатында оҙайлы һәм ҡыҫҡа ваҡытлы хәтерҙән табып иҫләү, хәтерләү йәки яңынан асыу эше).*

**АКЦЕНТУАЦИЯ ХАРАКТЕРА** [лат. *accentus* — баҫым] **характер акцентуацияһы** *(К. Леонгард тарафынан индерелгән төшөнсә. Айырым характер һыҙаттарының һәм уларҙың ҡушылмаһының саманан тыш асыҡ кәүҙәләнеше. Иң һуңғы дәрәжәлә психопатия менән сикләнә. Төрлө классификациялар нигеҙендә (К. Леонгард, П.Б. Ганнушкин һ. б.) характер акцентуацияһы түбәндәге төп типтарға бүленә: 1) циклоид;*

*2) лабиль; 3) гипертим; 4) астеник; 5) сензитив; 6) психотеник; 7) шизоид; 8) эпилептоид; 9) тотҡарланыу (параноялъ); 10) демонстратив (истероид); 11) дистим; 12) үҙгәреүсән, тотороҡhоҙ; 13) конформ (бер төрлө)).*

**АЛЬТЕРНАТИ́ВНОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** альтернатив уҡыу *(традицион, рәсми рәүештә раҫланған уҡытыуҙы алмаштырып йәки уны тулыландырып килеүсе уҡыу-уҡытыу төрө).*

**АЛЬТЕРНАТИ́ВНОЕ ОБУЧЕ́НИЕ** альтернатив уҡытыу *(уҡытыуҙа уҡыу процесын тиҙләтеүгә, шәхестең эске мөмкинлектәрен йәлеп итеүгә булышлыҡ иткән, уҡытыу ысулдарының һәм формаларының дидактик әһәмиәтлелеген көсәйткән яңы технологиялар ҡулланыу).*

**АЛЬТЕРНАТИ́ВНЫЕ ШКО́ЛЫ** альтернатив мәктәптәр *(дөйөм, ғәҙәти белем биреүсе тулы һәм тулы булмаған урта мәктәптәргә параллель йәки улар урынына эшләүсе, уларҙан эстәлеге, формаһы йәки уҡыусылар менән эшләү алымдары айырылып торған «ирекле мәктәптәр»).*

**АЛЬТРУИ́ЗМ** [лат. *alter* — башҡа] альтруизм *(әхлаҡи баһа билдәһе менән башҡа кешенең йәки йәмғиәттең мәнфәғәттәрен үҙ мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуйған шәхестең ҡиммәттәрҙе баһалау системаһы).*

**АНАЛО́ГИЯ** *(уҡытыуҙа)* аналогия, оҡшашлыҡ *(предметтар, күренештәр, төшөнсәләр, процестар араһында ниндәйҙер сифат һәм мөнәсәбәттәр буйынса оҡшашлыҡтар табыуға нигеҙләнгән дидактик ысул).*

**АНКЕ́ТА** [ фр. *enguete* — һорауҙар исемлеге] анкета *(беренсел социологик һәм социаль-психологик мәғлүмәттәр алыу өсөн телдән аралашыу нигеҙендә үткәрелгән методик алым).*

**АНОМА́ЛЬНЫЕ ДЕ́ТИ** [гр. *anōmalia* — норманан тайпылыш, дөрөҫ түгеллек] аномаль балалар *(психик һәм физик яҡтан кәмселекле балалар. Шуға күрә улар махсус шарттарҙа тәрбиәләүгә, уҡытыуға мохтаж).*

**АНТИПЕДАГО́ГИКА** [гр. *anti* — ҡаршы, *paidagōgikē* — йәш быуынға тәрбиә, белем биреү тураһындағы фән] антипедагогика *(шәхесте формалаштырыу процесында маҡсатҡа йүнәлтелгән тәрбиәне кире ҡағыусы педагогика. XX быуаттың икенсе яртыһында АҠШ һәм Көнбайыш Европа илдәрендә барлыҡҡа килә).*

**АПА́ТИЯ** [гр. *apatheia* — дәртһеҙ] апатия *(эмоциональ һүлпәнлек, ғәмһеҙлек, тирә-йүндәге ысынбарлыҡ ваҡиғалары-*

*на вайымһыҙлыҡ, хис-тойғо, ҡыҙыҡһыныу һәм дәрт кәмегән хәл; күңел бушлығы).*

**АППЕРЦЕ́ПЦИЯ** [лат. *ad* — -ға/-гә киҫәксәһе, *perceptio* — үҙләштереү, ҡабул итеү] **апперцепция** *(үҙләштереүҙең, ҡабул итеүҙең дөйөм йүнәлешкә һәм кешенең бөтә шәхси тәжрибәһенә, донъяға ҡарашына, белеменә, ихтыяжына, шәхси үҙенсәлектәренә бәйле булыу күренеше).*

**АППЕРЦЕ́ПЦИЯ ВРЕ́МЕННАЯ** ваҡытлы апперцепция

**АППЕРЦЕ́ПЦИЯ УСТО́ЙЧИВАЯ** тотороҡло апперцепция

**АРХЕТИ́П** [гр. *archetipos* — беренсе (тәүге) образ] **архетип** *(аналитик психологияның төп төшөнсәһе. Архетип — быуындан быуынға күсеүсе образдарҙы бәйләү ысулы. К. Г. Юнг буйынса, башланғыс, тыумыштан булған психик структуралар, образдар. Архетип аңһыҙ рәүештә коллективта барлыҡҡа килә һәм төш күреү, миф, әкиәттәрҙең һәм фантазия тыуҙырған башҡа нәмәләрҙең дөйөм кешелек символикалары нигеҙендә ята).*

**АСПИРАНТУ́РА** [лат. *aspirantis* — ынтылам] **аспирантура** *(ғилми-педагогик һәм ғилми кадрҙарҙы планлы рәүештә әҙерләү формаһы).*

**АССОЦИА́ЦИЯ** [лат. *associatio* — берләшмә] **ассоциация** *(психик күренештәрҙең (үҙләштереү, күҙаллау) эҙмә-эҙлекле бәйләнеше. Уларҙың береһенең актуалләшеүе икенсеһен барлыҡҡа килтерә).*

**АСТЕ́НИЯ** [гр. *asthenia* — көсһөҙлөк, хәлһеҙлек] **астения** *(тиҙ арыу, ябығыу, һиҙгерлек кәмеү, кәйефтең үҙгәреүсәнлеге, йоҡлай алмау менән билдәләнгән нервы һәм психик яҡтан хәлһеҙлек).*

**АТТЕСТА́ЦИЯ** [лат. *attestatio* — таныҡлыҡ] **аттестация(лау)** *(педагогтарҙың квалификация кимәлен, профессиональ ягын, хөкүмәт, муниципаль белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш нәтижәләрен комплекслы баһалау).*

**АФФЕ́КТ** [лат. *affectus* — тулҡынланыу, дәрт] **аффект** *(субъект өсөн мөһим булған тормош ваҡиғаларының ҡырҡа үҙгәреүе тәьҫирендә уның сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт һуҙымында көслө тойғолар кисереү хәле; был саҡта субъекттың ярһыу хәрәкәттәр яһауы һәм уның эске органдары функцияларының үҙгәреүе күҙәтелә).*

**АФФИЛИАЦИЯ** (ингл. *to affiliate* — берләшеү, берләштереү] **аффилиация** *(кешенең башҡа кешеләр араһында булырға ынтылыуы).*

# Б

**БА́ЗОВОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** нигеҙ белем *(шәхесте мәҙәниәтле, әһәмиәтле әхлаҡи йүнәлешле, төрлө яҡлы итеп үҫтереү өсөн уның дөйөм белем буйынса киләсәктәге белеменә, граждансылыҡ һәм профессиональ үҫеүенә нигеҙ булырҙай әҙерлек кимәле).*

**БА́ЗОВОЕ ПРЕДПРИЯ́ТИЕ** база предприятиеһы *(дөйөм һәм профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарына уҡыусыларҙы хеҙмәткә әҙерләүҙе ойоштороуға ғәмәли ярҙам күрһәткән һәм уның өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырған ойошма).*

**БАРЬЕ́Р СМЫСЛОВО́Й** [фр. *barriere* — кәртә, тотҡарлыҡ] мәғәнә ҡаршылығы, аңлашылмаусылыҡ *(кешеләрҙең бер үк күренешкә төрлө мәғәнә һалыуы арҡаһында үҙ-ара аңлашмауы).*

**БАРЬЕ́РЫ ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКИЕ** психологик ҡаршылыҡтар *(субъектҡа хас булмаған һүлпәнлек арҡаһында ниндәйҙер эште үтәүгә тотҡарлыҡ тыуҙырған психик хәл).*

**БЕЗНАДЗО́РНОСТЬ ДЕ́ТСКАЯ** балаларҙың бағыуһыҙлығы, ҡарауһыҙлығы *(ата-әсәләр йәки уларҙы алыштырған кешеләр тарафынан балаларға, үҫмерҙәргә тәрбиәүи тәьҫир, уларҙың тәртибенә, уҡыуына тейешле күҙәтеү етмәү, булмау).*

**БЕСЕ́ДА** әңгәмә *(яңы белем үҙләштереү йәки алған белемде ныҡытыу барышында уҡытыусы тарафынан балаларҙың аң эшмәкәрлеген әүҙемләштереү маҡсатында һорау-яуапҡа ҡоролған уҡытыу алымы).*

**БЕСЕ́ДА ВОСПИТА́ТЕЛЬНАЯ** тәрбиәүи әңгәмә.

**БЕСЕ́ДА ВСТУПИ́ТЕЛЬНАЯ** инеш әңгәмә.

**БЕСЕ́ДА ЗАКЛЮЧИ́ТЕЛЬНАЯ** йомғаҡлау әңгәмәһе.

**БЕСЕ́ДА ЗАКРЕПИ́ТЕЛЬНАЯ** ныҡытыу әңгәмәһе.

**БЕСЕ́ДА КАТЕХИЗИ́ЧЕСКАЯ** катехизик әңгәмә *(һорауҙарҙы һәм уларға әҙер яуаптарҙы механик ятлауҙан торған уҡытыу алымы).*

**БЕСЕ́ДА ТЕМАТИ́ЧЕСКАЯ** тематик әңгәмә.

**БЕСЕ́ДА ЭВРИСТИ́ЧЕСКАЯ** эвристик әңгәмә *(йүнәлткес һорауҙар биреү менән уҡытыу алымы).*

**БЕСПРИЗО́РНОСТЬ** бағыуһыҙлыҡ, ҡарауһыҙлыҡ (балалар, үҫмерҙәр өсөн ғаилә йәки дәүләт тәрбиәһе, педагогик күҙәтеү һәм нормаль йәшәү шарттарының булмауы).

**БЕССОЗНА́ТЕЛЬНОЕ** аңһыҙ, аңһыҙлыҡ *(1) ысынбарлыҡ күренештәре тәьҫирендә субъектта, ул үҙе һиҙмәгәндә, аңламағанда барлыҡҡа килгән психик хәлдәр, психик процестар һәм акттар йыйылмаһы; 2) эске тойғолар сағылышында ысынбарлыҡ образының һәм субъекттың уға булған мөнәсәбәтенең тарҡалмаусы бер бөтөндө тәшкил итеп, махсус рефлексия предметы булып тормаған формаһы. Аңһыҙ эш аңдан шуның менән айырыла: ул сағылдырған ысынбарлыҡ субъекттың кисерештәре, уның донъяға ҡарашы менән ҡушыла, шуға күрә аңһыҙлыҡта субъект тарафынан башҡарылған эштәрҙе ирекле тикшереү һәм уларҙың һөҙөмтәләрен баһалау мөмкин түгел).*

**БИНА́РНЫЙ УРО́К** берләштерелгән (берекмә) дәрес *(ике уҡыу дисциплинаһының йөкмәткеһе ҡушып үткәрелгән дәрес).*

**БИХЕВИОРИ́ЗМ** [ингл. *behaviour* — тәртип] бихевиоризм *(психологияның аңды фәнни тикшеренеү предметы булараҡ инҡар итеүсе һәм психиканы, организмдың тышҡы мөхит стимулдарына яуап реакциялар йыйылмаһы ғына тип, тәртиптең төрлө формаларына ҡайтарып ҡалдырыусы йүнәлеше).*

**БОЛЬ** ауыртыу, ғазап *(организмға ғәҙәттән тыш көслө йәки һәләкәтле тәьҫир арҡаһында уның йәшәүенә, теүәллегенә ҡурҡыныс янағанда барлыҡҡа килгән психик хәл).*

**БРЕД** һаташыу, яңылышыу, уйҙырма *(ысынбарлыҡҡа тура килмәгән, ләкин хата булыуын, уларҙың дөрөҫлөгөнә патологик инанған субъекттың фекерен юҡҡа сығарыу мөмкин булмаған күҙаллауҙар, һығымталар. Һаташыу күп психик ауырыуҙарҙың билгеһе, ул төрлөсә булырға мөмкин: эҙәрләү, ағыулау, көнләшеү һаташыуҙары).*

**БРИГА́ДНО-ИНДИВИДУА́ЛЬНОЕ ОБУЧЕ́НИЕ** бригадалап һәм айырым-айырым уҡыу (уҡытыу) *(3—6-сы синыфтарҙа математика фәнен уҡытыуҙа ҡулланыу өсөн эшләнгән индивидуаль уҡытыу системаһы).*

**БРИГА́ДНО-ЛАБОРАТО́РНЫЙ МЕ́ТОД** бригада-лаборатория алымы *(дөйөм белем биреү мәктәптәрендә, вуздарҙа, техникумдарҙа 20-се йылдарҙа — 30-сы йылдарҙың башында ҡулланылған дәрес ойоштороу формаларының бер төрө).*

# В

**ВАЛИ́ДНОСТЬ** [ингл. *valid* — яраҡлы] яраҡлылыҡ *(тест сифатын билдәләүсе төп критерийҙарҙың береһе).*

**ВДОХНОВЕ́НИЕ** илһам, дәрт *(кешене фән, сәнғәт, техника әҫәрҙәренең төп фекерен һәм идеяларын тыуҙырыуға һәм уларҙы бойомға ашырыуға алып килеүсе көс уятҡан күтәренке рух, ҙур теләк).*

**ВЕДУ́ЩАЯ ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** етәксе (төп) эшмәкәрлек *(онтогенездың был этабында барлыҡҡа килгән мөһим яңы психик үҙгәрештәргә бәйле эшлекле мөнәсәбәт).*

**ВЕ́РА** *(психологияла)* ышаныс *(1) кеше тарафынан киләсәктә уның «Мин»енең нигеҙе булып сығыш яһауға, уның ҡайһы бер ҡыланыштарын, фекерҙәрен, тәртип һәм мөнәсәбәт нормаларын билдәләүгә булышлыҡ иткән ниндәйҙер мәғлүмәттәрҙе, .текстарҙы, күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы йәки үҙ күҙаллауҙарын, фекер йомғаҡлауҙарын ҡаршылыҡһыҙ ҡабул итеүгә мөмкинлек биргән психик хәл; 2) нимәнелер, тышҡы фактик һәм формаль логик иҫбатлауҙар көсөнә иғтибар итмәй, ҡәтғи рәүештә дөрөҫ тип табыу. Был ваҡытта ышаныстың көсө айырым, үҙ аллы, тулыһынса эмпирик һәм логик нигеҙләүҙәр менән билдәләнмәгән психик актҡа бәйле).*

**ВЕЧЕ́РНЕЕ ОБУЧЕ́НИЕ** киске уҡытыу *(өҙлөкһөҙ белем биреү системаһының бер өлөшө буларaҡ, хеҙмәт эшмәкәрлеге менән уҡыуҙы бергә алып барған кешеләр өсөн уҡыу процесын ойоштороу формаһы).*

**ВЗАИ́МНОЕ ОБУЧЕ́НИЕ** бер-береңде уҡытыу *(яҡшы әҙерлекле уҡыусыларҙың уҡытыусы етәкселегендә иптәштәрен уҡытыу дәресе).*

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ** *(психологияла)* үҙ-ара бәйләнеш, йоғонто *(объекттарҙың (субъекттарҙың) үҙ-ара бәйле, мөнәсәбәтле булыуын барлыҡҡа килтергән, бер-береһенә туранан-тура йәки туранан-тура булмаған тәьҫир итеү процесы).*

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ НА́ВЫКОВ** күнекмәләрҙең үҙ-ара бәйләнеше.

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ О́РГАНОВ ЧУВСТВ** һиҙеү органдарының үҙ-ара бәйләнеше (йоғонтоһо).

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ ОЩУЩЕ́НИЙ** тойғолар йоғонтоһо.

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКОЕ** үҙ-ара педагогик бәйләнеш *(белем биреү процесында ҡатнашыусыларҙың эшмәкәрлек өлкәһендә интеллектуаль, эмоциональ яҡтан үҙ-ара байытыуҙы, уларҙы яраштырыуҙы, бәйләнеш булдырыуҙы, үҙ-ара йоғонто яһауҙы күҙ уңында тотҡан айырым бәйләнеш формаһы).*

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ ПЕ́РВОЙ И ВТОРО́Й СИГНА́ЛЬНЫХ СИСТЕ́М** беренсе һәм икенсе сигнал системаларының үҙ-ара бәйләнеше.

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ ПРОЦЕ́ССОВ ВОЗБУЖДЕ́НИЯ И ТОРМОЖЕ́НИЯ** ярһыу һәм тотҡарланыу процестарының үҙ-ара бәйләнеше, йоғонтоһо.

**ВИЗУА́ЛЬНАЯ ГРА́МОТНОСТЬ** визуаль белемлелек *(хәҙерге педагогикала туранан-тура күреп йәки аппараттар ярҙамында мәғлүмәттәр йыйыу һәм уларҙы файҙаланыу күнекмәләрен үҫтереү проблемаларын өйрәнеүсе йүнәлеш).*

**ВЛЕЧЕ́НИЕ** ынтылыш, мауыҡ *(субъекттың ихтыярһыҙ, аңһыҙ йәки тулыһынса аңлап еткерелмәгән ихтыяжын, теләген сағылдырған психик хәл).*

**ВЛЕЧЕ́НИЕ ВНУ́ТРЕННЕЕ** эске ынтылыш.

**ВЛЕЧЕ́НИЕ НОРМА́ЛЬНОЕ** нормаль ынтылыш.

**ВЛЕЧЕ́НИЕ ПАТОЛОГИ́ЧЕСКОЕ** патологик мауыҡ (көслө теләк).

**ВЛЕЧЕ́НИЕ СЕРДЕ́ЧНОЕ** мөхәббәт.

**ВЛИЯ́НИЕ** *(психологияла)* йоғонто, тәьҫир итеү *(индивидтың икенсе кеше менән үҙ-ара бәйләнеше барышында уның тәртибен, маҡсаттарын, ҡуҙаллауҙарын, баһаларын, ниәттәрен үҙгәртеү процесы һәм һөҙөмтәһе).*

**ВЛИЯ́НИЕ ОТРИЦА́ТЕЛЬНОЕ** кире йоғонто.

**ВНЕКЛА́ССНОЕ ЧТЕ́НИЕ** синыфтан тыш уҡыу *(уҡыусыларҙы ижтимағи яҡтан әһәмиәтле ихтыяждарға, талаптарға, ҡыҙыҡһыныуҙарға ярашлы рәүештә үҙ аллы китаптар уҡырға әҙерләү өсөн ойошторолған педагогик процесс).*

**ВНЕУРО́ЧНАЯ РАБО́ТА** синыфтан тыш, дәрестән тыш эш *(мәктәптәге уҡытыу-тәрбиә процесының бер өлөшө буларaҡ, уҡыусыларҙың буш ваҡыттарын ойоштороу буйынса дәрестән тыш эш).*

**ВНЕШКО́ЛЬНАЯ РАБО́ТА** мәктәптән тыш эш *(балаларҙы, үҫмерҙәрҙе һәм уҡыусы йәштәрҙе тәрбиәләү, белем биреү системаһының бер өлөшө. Шәхестең ҡыҙыҡһыныуҙарын,*

*һәләттәрен үҫтереү маҡсатында буш ваҡыттарҙа үткәреләп).*

**ВНИМА́НИЕ** иғтибар, диҡҡәт *(әлеге ваҡытта субъект эшмәкәрлегенең ысынбарлыҡтағы йәки хыялдағы ниндәйҙер объектҡа (предметҡа, ваҡиғаға, образға, фекергә һ. б.) туплаңышы, йүнәлеше).*

**ВНИМА́НИЕ АКТИ́ВНОЕ** әүҙем диҡҡәт.

**ВНИМА́НИЕ ВНЕ́ШНЕЕ** тышҡы иғтибар.

**ВНИМА́НИЕ ВНУ́ТРЕННЕЕ** эске иғтибар.

**ВНИМА́НИЕ ВОЛЕВО́Е** көсләп иғтибар булдырыу.

**ВНИМА́НИЕ ЗРИ́ТЕЛЬНОЕ** күреү диҡҡәте.

**ВНИМА́НИЕ НЕПРОИЗВО́ЛЬНОЕ** ирекһеҙҙән иғтибар итеү.

**ВНИМА́НИЕ НЕУСТО́ЙЧИВОЕ** тотороҡһоҙ иғтибар.

**ВНИМА́НИЕ РАСПРЕДЕЛЁННОЕ** бүленгән иғтибар.

**ВНИМА́НИЕ СЛУХОВО́Е** ишетеү диҡҡәте.

**ВНИМА́НИЕ СТАТИ́ЧЕСКОЕ** статик иғтибар.

**ВНИМА́НИЕ УСТО́ЙЧИВОЕ** тотороҡло диҡҡәт.

**ВНУТРИШКО́ЛЬНЫЙ КОНТРО́ЛЬ** мәктәптәге контроль *(мәктәп директоры һәм уның уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫарҙары тарафынан үткәрелгән үҙидара элементы).*

**ВНУША́ЕМОСТЬ** инаныусанлыҡ, ышаныусанлыҡ, йоғонтоға бирелеүсәнлек *(ниндәйҙер тәьҫиргә, йоғонтоға бирелеүҙә, буйһоноуҙа субъектив үҙенсәлек менән билдәләнгән, күңелгә уй-фекерҙәрҙе ҡабул итеү киммәле).*

**ВНУША́ЕМОСТЬ ГИПЕРСУГГЕСТИ́ВНАЯ** йоғонтоға тиҙ бирелеүсәнлек.

**ВНУША́ЕМОСТЬ ГИПОСУГГЕСТИ́ВНАЯ** йоғонтоға ауыр бирелеүсәнлек.

**ВНУШЕ́НИЕ** (*или* суггестия) [лат. *suggestio* — күңелгә һалыу] ышандырыу *(әүҙем маҡсатлы аңлау ҡеүәһенең кәмеүенә, логик киң анализдың етешмәүенә, тәжрибәгә бәйле баһалауҙың булмауына нигеҙләнеп, айырым бер маҡсат менән кешенең күңеленә билдәле бер фекерҙе, ынтылышты һ.б. һеңдереү, йоғонто яһау).*

**ВОЗБУЖДЕ́НИЕ** 1. ярһыу, әҫәрләнеү; 2. ҡуҙғытыу, уятыу *(тере организмдың ярһыусан туҡымаларының ҡуҙғытҡысҡа әүҙем яуап биреү үҫсәнлеге).*

**ВОЗБУЖДЕ́НИЕ ИНТЕРЕ́СА** ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ** йоғонто, тәьҫир итеү *(үҙ-ара бәйләнештә булған кешеләрҙең береһенең икенсеһенә ниндәйҙер маҡсат менән эш-хәрәкәтте, мәғлүмәтте күсереүе).*

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ КО́СВЕННОЕ** ситләтеп тәьҫир итеү.

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ ОБЩЕ́СТВЕННОЕ** йәмәғәтселек йоғонтоho.

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ ПАРАЛЛЕ́ЛЬНОЕ** параллель тәьҫир итеү.

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКОЕ** педагогик йоғонто.

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКОЕ** психологик йоғонто.

**ВО́ЗРАСТ** йәш, осор *(шәхестең һәм организмдың формалашыуында үҙенсәлекле ҡанундар йыйылмаһы менән ҡылыҡһырланған үҫеш осоро).*

**ВО́ЗРАСТ ДОШКО́ЛЬНЫЙ** мәктәпкәсә йәш.

**ВО́ЗРАСТ ЗРЕ́ЛЫЙ** өлгөргән осор.

**ВО́ЗРАСТ МЛА́ДШИЙ ШКО́ЛЬНЫЙ** кесе мәктәп йәше.

**ВО́ЗРАСТ ПЕРЕХО́ДНЫЙ** күсеү осоро (йәше).

**ВО́ЗРАСТ СТА́РЧЕСКИЙ** ҡартлыҡ осоро.

**ВО́ЗРАСТ Ю́НОШЕСКИЙ** егетлек осоро, йәшлек.

**ВОЗРАСТНА́Я ПСИХОЛО́ГИЯ** йәш осорҙары психологияһы *(психология фәнендә шәхестең тыуғандан алып ғүмер ахырына тиклемге психик үҫеш һәм формалашыу этаптарының ҡанундарын өйрәнеүсе тармаҡ).*

**ВОЗРАСТНО́Й ПОДХО́Д** йәшкә ҡарап эш итеү *(тәрбиәләү процесында шәхестең үҫеш, шулай уҡ тәрбиәләнеүселәр төркөмөнөң социаль-психологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу һәм файҙаланыу).*

**ВОЗРАСТНЫ́Е ОСО́БЕННОСТИ** йәш үҙенсәлектәре *(шәхестең үҫешендә йәш осорҙары алмашыу ваҡытында законлы рәүештә барлыҡҡа килгән үҙенсәлекле һыҙаттар).*

**ВО́ЛЯ** ихтыяр *(кешенең эшмәкәрлегендә һәм төрлө психик процестарҙа үҙ-үҙеңде тотоу, идара итеү һәләте һәм маҡсатҡа ирешеүгә йүнәлтелгән аңлы ынтылыш).*

**ВООБРАЖЕ́НИЕ** хыял, фараз, күҙаллау *(субъекттың үҙ эшмәкәрлегенең һуңғы һөҙөмтәһе булған образды кәүҙәләндереүен, аныҡ булмаған проблемалы ситуацияла үҙ-үҙен тотоу программаһын төҙөүен, объекттың тасуирланышына тап килгән образды күҙ алдына килтереүен билдергән психик процесс).*

**ВООБРАЖЕ́НИЕ АКТИ́ВНОЕ** әүҙем фараз.

**ВООБРАЖЕ́НИЕ ТВО́РЧЕСКОЕ** ижади хыял.

**ВОСКРЕ́СНАЯ ШКО́ЛА** йәкшәмбе мәктәбе *(мәктәптән тыш белем алыуҙың башланғыс формаһы буларак, ололар һәм балалар өсөн уҡыу йорто).*

**ВОСПИТА́НИЕ** тәрбиә, тәрбиәләү *(кешенең үҫешенә, ижтимағи тормошҡа һәм етештереүсән хеҙмәткә әҙерләүҙә кәрәкле шарттар тыуҙырған, билдәле күрһәтмәләр, төшөнсәләр, принциптар, ҡиммәттәрҙе аңлауҙы формалаштырыу өсөн планлы һәм маҡсатлы рәүештә уның тәртибенә, аңына тәьҫир итеү, яңы быуынға ижтимағи-тарихи тәжрибәне тапшырыу эшмәкәрлеге).*

**ВОСПИТА́НИЕ АВТОРИТА́РНОЕ** авторитар тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ВНЕШКО́ЛЬНОЕ** мәктәптән тыш тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ВОЕ́ННОЕ** хәрби тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ВОЕ́ННО-ПАТРИОТИ́ЧЕСКОЕ** хәрби-патриотик тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ВСЕСТОРО́ННЕЕ** төрлө яҡлы тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ДОШКО́ЛЬНОЕ** мәктәпкәсә йәштәге тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ИНТЕРНАЦИОНА́ЛЬНОЕ** интернациональ тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ МУЗЫКА́ЛЬНОЕ** музыкаль тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ ПОЛОВО́Е** енси тәрбиә.

**ВОСПИТА́НИЕ СЕМЕ́ЙНОЕ** ғаилә тәрбиәһе.

**ВОСПИТА́НИЕ ЭСТЕТИ́ЧЕСКОЕ** эстетик тәрбиә.

**ВОСПИТА́ТЕЛЬ** тәрбиәсе *(айырым шәхестәрҙе үҫтереүҙә, йәшәү шарттарын булдырыуҙа яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып тәрбиәләүсе кеше).*

**ВОСПИТА́ТЕЛЬНАЯ СИСТЕ́МА** тәрбиә системаһы *(тәрбиә маҡсаттарын, уларҙы тормошҡа ашырыусы кешеләрҙе, кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте, мөхитте һәм идара эшмәкәрлеген берләштереүсе комплекс).*

**ВОСПИТА́ТЕЛЬНО-ТРУДОВА́Я КОЛО́НИЯ** тәрбиәүи-хеҙмәт колонияһы *(суд тарафынан иркенән мәхрүм ителгән 14-18 йәшкә тиклемге балиғ булмағандарҙың яза ваҡытын үтә торған холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт учреждениеһы).*

**ВОСПИТА́ТЕЛЬНЫЙ ДОМ** тәрбиә йорто, тәрбиәхана *(ташландыҡ йәки етем балаларҙы тәрбиәләүсе учреждение).*

**ВОСПИ́ТЫВАЮЩЕЕ ОБУЧЕ́НИЕ** тәрбиәләп уҡытыу *(белем, оҫталыҡ, күнекмәләр алыу, ижади эшмәкәрлек тәжрибәһен үҙләштереү менән бергә донъяға, бер-береңә, үҙләштергән дәрес материалына баһалы, ҡәҙерле ҡараш формалаштырыу, уларҙың эске бәйләнешен булдырырға тырышып уҡытыу).*

**ВОСПРИЯ́ТИЕ** ҡабул итеү, үҙләштереү, тойоу, һиҙемләү *(тойоу ағзалары рецепторҙарына физик ҡуҙғытҡыстарҙың туранан-тура тәьҫир итеүе һөҙөмтәһендә предметтарҙың, төрлө хәлдәрҙең, ваҡиғаларҙың тулы сағылышы).*

**ВОСПРИЯ́ТИЕ АНАЛИТИ́ЧЕСКОЕ** аналитик ҡабул итеү.

**ВОСПРИЯ́ТИЕ ВРЕ́МЕНИ** ваҡытты тойоу.

**ВОСПРИЯ́ТИЕ МЕЖЛИ́ЧНОСТНОЕ** кешеләрҙең бер-береһен аңлауы, баһалауы, ҡабул итеүе.

**ВОСПРИЯ́ТИЕ МОНОСЕНСО́РНОЕ** моносенсор һиҙемләү *(бер генә һиҙеү ағзаһы менән тойоу).*

**ВОСПРИЯ́ТИЕ РИ́ТМА** ритмды тойоу.

**ВСЕО́БЩЕЕ ОБУЧЕ́НИЕ, ВСЕО́БУЧ** дөйөм мәжбүри белем биреү *(бөтә балаларҙы һәм билдәле бер йәштәге йәштәрҙе хөкүмәт тарафынан билдәләнгән белем һәм уҡыу күнекмәләре кимәлен биргән уҡыу йорттарында уҡытыу, дөйөм мәжбүри белем биреү, халыҡ мәғарифын ойоштороу принцибы).*

**ВСПОМОГА́ТЕЛЬНАЯ ШКО́ЛА** ярҙамсы мәктәп *(аҡыл кимәле түбән балаларҙы уҡытыу-тәрбиә эшен башҡарған махсус учреждение).*

**ВЫ́СШЕЕ ОБРАЗО́ВАНИЕ** юғары белем *(урта белем базаһында юғары уҡыу йорттарында алынған һәм рәсми танылған документтар (диплом, сертификат һ. б.) менән раҫланған белем кимәле).*

**ВЫ́СШИЕ ПСИХИ́ЧЕСКИЕ ФУ́НКЦИИ** юғары психик функциялар *(йәшәү дәүерендә формалашҡан, сығышы яғынан социаль, системалы, ҡатмарлы психик процестар).*

**ВЫ́СШИЕ УЧЕ́БНЫЕ ЗАВЕДЕ́НИЯ** юғары уҡыу йорттары *(юғары белем биреүсе, шәхестең белемгә ынтылышын ҡәнәғәтләндереү һәм мәҙәниәт, иҡтисад, һаулыҡ һаҡлау һ.б. төрлө фән өлкәһендәге профессия кешеләрен әҙерләү өсөн төрлө кимәлдәге программалар нигеҙендә уҡытҡан уҡыу йорттары. Тикшеренеү эштәре, белемде арттырыу, белгестәрҙең квалификацияһын күтәреү менән шөғөлләнәләр).*

**ВЫТЕСНЕ́НИЕ** **ҡыҫырыҡлау** *(«психологик һаҡлау»ҙың бер төрө — психологик уңайһыҙлыҡты кәметеүгә йәки бөтөрөүгә йүнәлгән процесс. Уның һөҙөмтәһендә насар уйҙар, хәтирәләр, кисерештәр индивид тарафынан аңдан «ҡыуыла», аңһыҙлыҡ даирәһенә күсерелә, әммә индивидтың үҙ-үҙен тотошонда уларҙың йоғонтоһо һаҡлана һәм улар хафа, ҡурҡыу рәүешендә кисерелә).*

# Г

**ГЕНИА́ЛЬНОСТЬ** [лат. *genius* — рух] **даһилыҡ** *(һәләттәр үҫешенең иң юғары кимәле).*

**ГЕШТА́ЛЬТ** [нем. *Gestalt* — образ, форма] **гештальт** *(ҡайһы бер күренештәрҙең күп төрлө булыуын үҙенә хас ҡанундар нигеҙендә рәткә һалыусы функциональ структура).*

**ГЕШТАЛЬТПСИХОЛО́ГИЯ** [нем. *Gestalt* — образ, форма] **гештальтпсихология** *(XX быуаттың башында Германияла барлыҡҡа килгән һәм психиканы үҙенең компоненттарына ҡарата беренсел булған бөтөн структуралар (гештальттар) ҡарашынан сығып өйрәнеү программаһын тәҡдим итеүсе көнбайыш психологияһы йүнәлеше. Төп вәкилдәре: немец психологтары М. Вертхеймер, В. Кёлер, К. Коффка).*

**ГИГИЕ́НА УЧЕ́БНЫХ ЗАВЕДЕ́НИЙ** **уҡыу йорттары гигиенаһы** *(уҡыу процесын ойоштороуға ҡарата фәнни нигеҙләнгән талаптарҙың оптималь системаһы — дәрестәрҙе рациональ ойоштороу, аҡыл һәм физик эштәрҙе нормалаштырыу (хеҙмәткә өйрәтеү һәм физик тәрбиә); көн, аҙна, уҡыу йылы дауамында уҡыу төрҙәрен аралаштырыу).*

**ГИМНА́ЗИЯ** [гр. *gymnasion* — гимнасий] **гимназия** *(дөйөм урта белем биреүсе уҡыу йорто (ғәҙәттә, гуманитар-филологик йүнәлешле). Уҡыу йортоноң йүнәлеше нигеҙендә дөйөм белем фәндәрен һәм уҡыусылар һайлаған йүнәлеш буйынса фән нигеҙе курстарын (физ.-мат., гуманитар, тәбиғәт, эстетик һ.б.) өйрәнеүҙә башланғыс белемдең вариантлылығын тәьмин итә).*

**ГИПНО́З** [гр. *hypnos* — йоҡо] **гипноз** *(индивидуаль контроль һәм үҙаң функцияларының үҙгәреүе менән бәйле аңдың ваҡытлыса күләме тарайыу һәм йоғонто яһаусының тәьҫиренә ныҡ бирелеү хәле. Гипноз гипнозсының махсус*

*рәүештә тәьҫир итеүе йәки үҙ-үҙеңде маҡсатҡа йүнәлешле инандырыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә).*

**ГИПНОПЕ́ДИЯ** [гр. *hypnos* — йоҡо, *paideia* — уҡытыу, тәрбиәләү] **гипнопедия** *(тәбиғи йоҡо ваҡытында уҡытыу һәм тәрбиәләү).*

**ГИПО́ТЕЗА** [гр. *hypothesis* — фараз] **гипотеза, фәнни фараз** *( берәй хәл, күренештең килеп сығышы, асылы хаҡында фәнгә нигеҙләнеп әйтелгән, ләкин дөрөҫлөгө тәжрибә нигеҙендә әлегә иҫбатланмаған фекер, уй; фән үҫешенең бер формаһы).*

**ГОСПИТАЛИ́ЗМ** [нем. *hospital* — больница] **госпитализм** *(бала тыуғандың беренсе йылдарында өлкәндәр менән аралашыу етешмәгәнлектән барлыҡҡа килгән психик һәм физик үҫештә артта ҡалыу синдромы. Госпитализмдың тышҡы сағылышы: хәрәкәттәр, бигерәк тә һуңлап атлай башлау, телмәр үҫешенең тотҡарланыуы, хис-тойғо ярлылығы, мәғәнәһеҙ йөҙәткес хәрәкәттәр һәм түбән антропометрик күрһәткестәр).*

**ГОТО́В К ТРУДУ́ И ОБОРО́НЕ (ГТО)** хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер *(1931—1991 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһының дөйөм урта белем биреүсе һәм техник уҡыу йорттарында спорт секцияларында, һауыҡтырыу төркөмдәрендә физкультура буйынса әҙерлек программаһы).*

**ГРАЖДА́НСКОЕ ВОСПИТА́НИЕ** гражданлыҡ тәрбиәһе *(кешегә үҙен хоҡуҡи, социаль, әхлаҡи һәм сәйәси яҡтан эшкә яраҡлы, һәләтле итеп тойорға мөмкинлек биреүсе сифаттарҙы берләштергән шәхес, граждан формалаштырыу).*

**ГРА́МОТНОСТЬ** грамоталылыҡ *(кешенең билдәле кимәлдә туған теленең грамматик нормаларына ярашлы уҡыу һәм яҙыу күнекмәләренә эйә булыуы. Халыҡтың социаль-мәҙәни яҡтан үҫешен ҡылыҡһырлағанда файҙаланыла торған күрһәткестәрҙең береһе).*

**ГРАФИ́ЧЕСКАЯ РАБО́ТА** график эш *(уҡытыусы һәм уҡыусыларҙың уҡыу мәғлүмәттәренә визуаль форма биреүе: өйрәнелгән объекттарҙың деталдәрен ябайлаштырып, рәсемен, шартлы тамғаларын яһау, схемалар, графиктар, картограммалар, таблицалар төҙөү, мәғлүмәттәрҙе графоаналитик тикшереү; сигнал тамғалар һәм текст фрагменттарын төҙөү).*

**ГРУ́ППА төркөм** *(социаль бөтөндән билдәле бер сифаттар (башҡарылған эшмәкәрлек характеры, ижтимағи йәки синфи бүленеш, структура, композиция, үҫеш кимәле һ.б.) нигеҙендә бүленгән, һаны буйынса сикләнгән кешеләр берләшмәһе. Кешеләрҙе һан буйынса төркөмләү киң таралған: ҙур, бәләкәй, микротөркөмдәр (диадалар, триадалар). Ижтимағи статус буйынса: рәсми һәм рәсми булмаған; тәбиғи бәйләнеш буйынса: реаль һәм шартлы; үҫеш кимәле (ассоциациялар, корпорациялар, таралау төркөмдәр) һәм юғары үҫеш кимәле буйынса (коллектив); әһәмиәтлелек буйынса: референт төркөм һәм ағзалыҡ төркөмдәре һ.б. Төркөмдөң ҙурлығы, структураһы һәм составы эшмәкәрлектең маҡсаты, алға ҡуйылған бурыстары менән билдәләнә).*

**ГРУ́ППА БОЛЬША́Я ҙур төркөм** *(1) кешеләрҙең билдәле социаль сифаттары (ниндәй синыфҡа ҡарауы, енесе, йәше, милләте һ.б.) нигеҙендә бүленгән, һан яғынан сикләнмәгән шартлы дөйөмлөгө; 2) кешеләрҙең ниндәйҙер йәмәғәт эшмәкәрлегенә йәлеп ителгән реаль, һаны яғынан шаҡтай ҙур, ҡатмарлы берләшмәһе (мәҫ., мәктәп йәки вуз, предприятие йәки учреждение коллективы).*

**ГРУ́ППА ДИФФУ́ЗНАЯ** [лат. *diffusio* таратыу, сәсеү] **диффуз** *(таралау) төркөм (ҡатнашыусыларҙың мөнәсәбәтен бәйләрҙәй дөйөм эшмәкәрлек, берҙәмлек булмаған, тупланмаған берләшмә).*

**ГРУ́ППА МА́ЛАЯ бәләкәй төркөм** *(дөйөм маҡсат һәм бурыстар менән бәйле, сағыштырмаса аҙ һанлы, яҡындан аралашыусы индивидтар төркөмө. Бәләкәй төркөмдәрҙең сағыштырмаса структур ябайлығы уларҙы ҡатмарлы һәм ҙур төркөмдәрҙән айырыусы үҙенсәлек булып тора)*

**ГРУ́ППА НЕФОРМА́ЛЬНАЯ (НЕОФИЦИАЛЬНАЯ) рәсми булмаған төркөм** *(статусы юридик яҡтан теркәлмәгән, дөйөм ҡыҙыҡһыныу, дуҫлыҡ, оҡшатыу нигеҙендә йәки прагматик файҙа нигеҙендә берләшкән реаль ижтимағи төркөм)*

**ГРУ́ППА ОФИЦИА́ЛЬНАЯ (ФОРМАЛЬНАЯ) рәсми төркөм** *(статусы юридик яҡтан теркәлгән, ағзалары ижтимағи хеҙмәт бүленеше шарттарында эште ойоштороусы билдәле эшмәкәрләк нигеҙендә берләшкән реаль йәки шартлы ижтимағи төркөм)*

**ГРУ́ППА РЕФЕРЕ́НТНАЯ** [лат. *referens* — хәбәр итеүсе, белдереүсе] **референт төркөм** *(индивид үҙенең фекерҙәрен,*

*ҡиммәттәрен, үҙ тәртибен билдәләгәндә, баһалау нормаһы һәм эталон итеп сағыштырған реаль йәки шартлы ижтимағи төркөм).*

**ГРУ́ППА УСЛО́ВНАЯ шартлы төркөм** *(ижтимағи психологияның өйрәнеү объекты булараҡ билдәле сифаттар (эшмәкәрлек характеры, енесе, йәше, белем кимәле, милләте һ.б.) менән берләштерелгән, әммә бер-береһе менән тура һәм тура булмаған объектив үҙ-ара бәйләнештә тормаған субъекттарҙы эсенә алған кешеләр төркөмө).*

**ГРУППОВА́Я ДИНА́МИКА** [гр. *dynamis* — көс] **төркөм хәрәкәте, үҙгәреше** *(бәләкәй төркөмдөң йәшәү эшмәкәрлеге циклдарын һәм уның этаптарын (барлыҡҡа килеүен, эшләүен, үсешен, торғонлоҡ осорон, артҡа китеүен, тарҡалыуын) ҡылыҡһырлаусы социаль-психологик процестарҙың һәм күренештәрҙең йыйылмаһы. Төркөм хәрәкәтенә етәкселек һәм лидерлыҡ, күмәкләп ҡарарҙар ҡабул итеү; нормалар, дөйөм фекер, ҡағиҙәләр, ҡиммәттәр булдырыу; төркөмдөң функциональ структураһын формалаштырыу, туплау, ҡаршылыҡтар, дөйөм баҫым һ.б. инә).*

**«ГУМАНИСТИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ» «гуманистик психология»** *(алдан билдәле булмаған, ә кешегә генә хас булғанса үҙенән-үҙе актуалләшеү мөмкинлегенә эйә булған шәхесте, уникаль бөтөн система булараҡ өйрәнеүҙе үҙенең төп предметы тип таныған көнбайыш (бигерәк тә Америка) психологияһы йүнәлеше. Уның төп положениелары: кеше бер бөтөн булараҡ өйрәнелергә тейеш; кешенең тормошо уның берҙәй үсеш, йәшәйеш процесы булараҡ өйрәнелергә тейеш).*

**ГУМАНИТАРИЗА́ЦИЯ ОБРАЗОВА́НИЯ белемде гуманитарлаштырыу** *(уҡыусыларҙың шәхси үсешен формалаштырыуҙа белем эстәлегенең дөйөм мәҙәни компоненттарына өҫтөнлөк бирелгән һәм айырым иғтибар йүнәлтелгән саралар системаһы).*

# Д

**ДЕВИА́НТНОЕ ПОВЕДЕ́НИЕ** [лат. *deviatio* — тайпылыу] ҡара: **ПОВЕДЕ́НИЕ ОТКЛОНЯ́ЮЩЕЕСЯ.**

**ДЕ́ЙСТВИЕ 1. эш, хәрәкәт; 2. тәьҫир** *(эшмәкәрлек берәмеге; аңлап ҡуйылған маҡсатҡа ирешеүгә йүнәлтелгән, үҙ теләге менән һәм алдан уйлап күрһәтелгән әүҙемлек).*

**ДЕ́ЙСТВИЕ АВТОМАТИЗИ́РОВАННОЕ** автоматлашҡан хәрәкәт.

**ДЕ́ЙСТВИЕ ИМПУЛЬСИ́ВНОЕ** импульсив хәрәкәт.

**ДЕ́ЙСТВИЕ МЫ́СЛЕННОЕ** фекерләү.

**ДЕ́ЙСТВИЕ НЕПРОИЗВО́ЛЬНОЕ** ирекһеҙҙән яһалған хәрәкәт.

**ДЕ́ЙСТВИЕ ЦЕЛЕНАПРА́ВЛЕННОЕ** маҡсатҡа йүнәлтелгән хәрәкәт.

**ДЕЛИНКВЕ́ТНОЕ ПОВЕДЕ́НИЕ** [лат. *delinguentis* — енәйәтсе] **яман ҡылыҡ, енәйәтсел холоҡ** *(шәхес тәртибендә енәйәткә ылығыуҙы күрһәткән сифаттарҙы ҡылыҡһырлай).*

**ДЕЛОВА́Я ИГРА́ эшкә өйрәтеү уйыны** *(теге йәки был ысынбарлыҡ хәл-ваҡиғаларына оҡшатып, хеҙмәттәге кешеләрҙең эшмәкәрлеген ҡабатлап уҡыу процесын әүҙемләштереү маҡсатында ҡулланылған алым).*

**ДЕМОКРАТИЗА́ЦИЯ ОБРАЗОВА́НИЯ уҡыу-уҡытыуҙы демократлаштырыу** *(уҡытыу процесында ҡатнашыусыларға уҡытыу, тәрбиә маҡсаттарын уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн кәрәкле матди-иҡтисади, хоҡуҡи, мәҙәни-рухи шарттар булдырыу).*

**ДЕМОКРАТИЗА́ЦИЯ ШКО́ЛЫ** мәктәп эшен демократлаштырыу *(мәктәп эшмәкәрлегендә бер генә кеше идараһы менән коллегиаль идараны бәйләп алып барыу, педагогик процеста ҡатнашыусыларҙың хоҡуғын һаҡлау, талапсанлыҡ менән шәхескә оло ихтирамды берләштереү принциптарына ҡоролған ойоштороу системаһы. Мәктәптә уҡытыу процесының билдәлелеге, асыҡлығы, аныҡлығы).*

**ДЕПРЕ́ССИЯ** [лат. *depressio* — баҫыу] **күңел төшөнкөлөгө, депрессия** *(күңел, рух төшөнкөлөгөнә бирелгән психик хәл. Был хәлдә ауырыу ауыр, интектергес тойғолар һәм кисерештәр үткәрә, төшөнкөлөккә, һағышҡа, өмөтһөҙлөккә бирелә. Депрессия хәлендәге кешегә әкренлек, дәртһеҙлек, хәлһеҙлек хас. Былар бөтәһе лә һөҙөмтә күрһәткестәренең ҡырҡа түбәнәйеүенә килтерә).*

**ДЕ́ТСТВО** бала саҡ *(онтогенездың башланғыс осорон билдергән термин. Бала саҡ сабыйлыҡ (тыуғандан 1 йәшкә тиклем), балалыҡ (1—3 йәш), мәктәпкәсә йәш (3—6—7 йәш), кесе мәктәп йәше (6—7—10) осорҙарына бүленә).*

**ДЕФЕКТОЛОГИ́ЧЕСКОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** дефектологик белем *(юғары педагогик белем тармағы, зәғиф балалар менән уҡытыу-тәрбиә эштәрен алып барыусы педагогик кадрҙар әҙерләү системаһы).*

**ДЕФЕКТОЛО́ГИЯ** [лат. *defectus* — етешһеҙлек, гр. *logos* — төшөнсә, фән] **дефектология** *(аномаль балалар үҫешендәге психофизиологик үҙенсәлектәрҙе, уларҙы тәрбиәләү, уҡытыу, өйрәтеү ҡанундарын өйрәнеүсе фән).*

**ДЕЦЕНТРА́ЦИЯ** [лат. *de* — ботөрөүҙе аңлатҡан алъялғау, *centrum* — төп үҙәк] **децентрация** *(субъекттың үҙенең позицияларынан айырылған позициялар менән осрашыу, сағыштырыу, берләштереү нәтижәһендә үҙ ҡарашын, позицияһын үҙгәртеп, шәхси үҙемселеген еңеүе).*

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТНЫЙ ПОДХО́Д** эшлекле ҡараш *(1) психиканы өйрәнеүҙең К. Маркс тарафынан эшләнгән предметлы категорияһын нигеҙ итеп алған принцибы (М.Я. Басов, С.Л. Рубинштейн, А.Н. Леонтьев һәм уларҙың уҡыусылары); 2) психологияны шәхес эшмәкәрлеге барышында эске тойғолар сағылышының барлыҡҡа килеүе, функцияһы, төҙөлөшө тураһындағы фән тип ҡараған теория (А.Н. Леонтьев).*

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** эшмәкәрлек *(ихтыяж арҡаһында барлыҡҡа килгән, тышҡы донъяны һәм кешенең үҙен төшөнөүгә, үҙгәртеүгә йүнәлтелгән, аң менән яйға һалынған әүҙемлек.*

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ АКТИ́ВНАЯ** әүҙем эшмәкәрлек.

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ ВОЛЕВА́Я** ихтыяр эшмәкәрлеге.

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ ИНСТИНКТИ́ВНАЯ** инстинктив эшмәкәрлек.

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ ПСИХИ́ЧЕСКАЯ** психик эшмәкәрлек.

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ СОЗНА́ТЕЛЬНАЯ** аңлы эшмәкәрлек.

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ ТВО́РЧЕСКАЯ** ижади эшмәкәрлек.

**ДИАГНО́СТИКА ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ** [гр. *diagnostikos* — аңлап, һиҙеп алыу һәләте] **педагогик диагностика** *(педагогикала, педагогик системаларҙың һәм мөнәсәбәттәрҙең төрлө элементтары, параметрҙары тураһында диагностик һығымта яһау ҡанундарын, диагностик процедуралар үткәреү ҡағиҙәләрен, педагогика өлкәһендәге диагностика формаларын, алымдарын, принциптарын өйрәнеүсе теоретик-ғәмәли тармаҡ).*

**ДИДА́КТИКА** [гр. *didaktikos* — өйрәтеүсе, аҡыл биреүсе] **дидактика** *(педагогика фәнендә уҡытыу эшенең дөйөм теоре-*

*тик нигеҙҙәрен һәм ҡанундарын өйрәнеү бүлеге. Дидактиканың предметы булып уҡытыу һәм кеше тәрбиәләү алымдары тора, йәғни уҡытыусы биргән белем йөкмәткеһенең уҡыусылар тарафынан үҙләштерелеүен тәьмин иткән уҡытыу һәм тәрбиәнең үҙ-ара берҙәм йоғонтоһо).*

**ДИДАКТИ́ЧЕСКИЕ И́ГРЫ** **дидактик уйындар** *(уҡытыу, өйрәтеү маҡсатында махсус ойошторолған, ҡулайлаштырылған уйындар).*

**ДИНАМИ́ЧНОСТЬ НЕ́РВНОЙ СИСТЕ́МЫ** [гр. *dynamis* — көс] **нервы системаһының динамикалылығы, үҙгәреүсәнлеге** *(нервы системаһының шартлы рефлекс булдырғанда ярһыуҙың һәм тотҡарланыуҙың еңел барлыҡҡа килеүе менән ҡылыҡһырланыусы үҙсәнлеге).*

**ДИСКУ́ССИЯ** [лат. *discussio* — тикшереү, ҡарау] **дискуссия, бәхәс** *(1) дөйөм эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән төркөмдә ҡарар ҡабул итеү процесын тиҙләтеү маҡсатында ойошторолған алым; 2) уҡыу процесын тиҙләтеү һәм һөҙөмтәлелекте күтәреү, дөрөҫлөктө табыуҙа уҡыусыларҙы әүҙемләштереү маҡсатында ҡулланылған уҡытыу алымы; 3) махсус дискуссия төркөмөндә субъекттың ҡарашына, йүнәлешенә йоғонто яһау өсөн ойошторолған психотерапия алымы).*

**ДИССЕРТА́ЦИЯ** [лат. *dissertatio* — фекер йөрөтөү, тикшереү] **диссертация** *(ғилми тикшеренеүсе тарафынан яҡлауға тәҡдим ителгән, фәнни положениеларҙы эсенә алған тикшеренеү һөҙөмтәләре йыйылмаһы, уның фәнгә ғалим буларак индергән шәхси өлөшөн билдәләүсе квалификациялы фәнни хеҙмәт).*

**ДИСЦИПЛИ́НА** [лат. *disciplina* — уҡытыу, тәрбиә] **дисциплина, тәртип** *(коллективтағы бөтә кеше мәжбүри буйһонорға тейеш булған ныҡлы әхлаҡ талабы, әҙәп, ҡылыҡ ҡағиҙәһе).*

**ДИСЦИПЛИ́НА СОЗНА́ТЕЛЬНАЯ** **аңлы тәртип.**

**ДИФФЕРЕНЦИА́ЦИЯ ОБУЧЕ́НИЯ** [ лат. *differentia* — айырма] **айырып уҡытыу** *(уҡытыу эшмәкәрлеген урта мәктәп йәшендәге һәм өлкән уҡыусы балаларҙың һынтылышын, ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм һәләттәренең төрлөлөгөн иҫәпкә алып ойоштороу).*

**ДИФФЕРЕНЦИ́РОВАННЫЙ ПОДХО́Д** **дифференциациялы ҡараш, айырып эш итеү** *(уҡыусыларҙы уларҙың шәхси*

*сифаттарының оҡшашлығы буйынса төркөмләп айырып тәрбиәләү маҡсатына йүнәлтелгән педагогик алым. Дифференциаль ҡараш уҡыусыға уның шәхесен үҫтереүҙә һөҙөмтәле ярҙам булып тора).*

**ДОКАЗА́ТЕЛЬСТВО дәлил, иҫбат** *(уҡытҡанда фекерҙең дөрөҫлөгөн нигеҙләүсе, раҫлаусы логик нәтижә).*

**ДОКЛА́Д УЧА́ЩИХСЯ уҡыусылар докладты** *(дәрестә һәм синыфтан тыш эштәрҙә файҙаланылған үҙ аллы эш төрө).*

**ДОКТОРАНТУ́РА докторантура** *(Рәсәй Федерацияһында ғилми һәм ғилми-педагогик кадрҙар (фән докторҙары) әҙерләүҙәге юғары баҫҡыс, өҙлөкһөҙ уҡытыу системаһының өлөшө).*

**ДОМИНА́НТА** [лат. *dominans* — өҫтөнлөк алған] **доминанта** *(үҙәк нервы системаһында ваҡытлыса өҫтөнлөк алған ҡуҙғытҡыс сығанағы. Әлеге мәлдә үҙәк нервы системаһына тәьҫир итеүсе ҡуҙғытҡыстарҙы йыйып, туплап, шул уҡ ваҡытта башҡа нервы үҙәктәренең эшен тотҡарлап, организмдың ҡылығына (эшмәкәрлегенә) билдәле бер йүнәлеш биреүсе рефлектор система).*

**ДОСТИЖЕ́НИЯ МОТИВА́ЦИЯ** [фр. *motif* — этәргес сәбәп], **ҡаҙаныш (уңыш) мотивацияһы, ниәткә ирешеү** *(индивидтың уңыш ҡаҙаныу һәм уңышһыҙлыҡтарҙан ҡасыу ихтыяжы менән бәйле мотивация эшмәкәрлегенең бер төрө. Тәүге билдәләмәһе «үҙ мөмкинлектәреңдең кимәлен күтәреүгә ынтылыу» ине, әммә ул үҫеш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, уңышҡа ирешеү йәки унан ҡасыуға йүнәлтелгән ғәҙәттең төп типтары кеше ғүмеренең 3—13 йәшендә ата-әсә (бигерәк тә әсәйҙең талапсанлығы) һәм тирә-яҡ мөхит йоғонтоһонда формалаша. 3—5 йәштәрҙә ҡаҙаныш (уңыш) мотивацияһының уңышҡа ынтылыуы көслө, сөнки балаға үҙ уңышы өсөн ата-әсә йәки тәрбиәсенән маҡталыу оҡшай, шулай уҡ уңышһыҙлыҡҡа осрағанда әгәр шелтә дуҫтарса, ихтирам менән әйтелһә, бала тарафынан насар ҡабул ителмәй. Уңыш ҡаҙаныуға юғары ынтылыш формалаштырыуҙа ата-әсәнең бала эше менән ҡыҙыҡһыныып, эмоциональ ҡушылыу кимәле ҙур әһәмиәткә эйә).*

**ДОСУГОВА́Я ПЕДАГО́ГИКА ял ваҡыты педагогикаһы** *(өлкәндәрҙең тәрбиәсе етәкселегендә билдәле маҡсатҡа йүнәлтелгән, йөкмәткеһе яғынан бай, ҡыҙыҡлы итеп ойошторолған педагогик эшмәкәрлектә балаға йоғонтоһо).*

**ДОШКО́ЛЬНАЯ ПЕДАГО́ГИКА** мәктәпкәсә йәштәге балалар педагогикаһы *(педагогикала мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың үҫеш ҡанундарын, тәрбиәләү һәм ябай өйрәтеү, уҡытыу формаларын өйрәнеүсе тармаҡ).*

**ДРУ́ЖБА** дуҫлыҡ *(ҡатнашыусыларҙың аралашыуға ихтыяжы көсәйеүе арҡаһында үҙ-ара эйәләшеүе, яҡын күреүе, бер-берeһенән йылы яуап хистәре, өҫтөнлөклө ҡараштар өмөт иткән мөнәсәбәттәр төрө).*

**ДУХО́ВНОСТЬ** рухилыҡ, рухиәт *(материалистик ҡараш буйынса, шәхестең мотивтар системаһында ике төп шәхси ихтыяждың сағылышы: белемгә булған рухи ихтыяж һәм «башҡалар өсөн» йәшәүгә, эшләүгә булған социаль ихтыяж. Ғәҙәттә, рухиәттә — ошо ихтыяждарҙың беренсеһе, ә эскерһеҙлектә икенсеһе күҙ уңында тотола).*

**ДУША́** йән *(кешенең эске донъяһы, уй-фекере, тойғоһо, күңел. Кеше һәм хайуан психикаһына тарихи яҡтан үҙгәреүсе ҡараштарҙы сағылдырған төшөнсә: диндә, идеалистик фәлсәфә һәм психологияла йән — ул кәүҙәнән башҡа ла йәшәй алған башланғыс).*

## Е

**ЕДИ́НАЯ ШКО́ЛА** берләштерелгән (берҙәм) мәктәп *(мәғариф системаһында түбәндән юғарыға тиклем бөтә баҫҡыстарында ла күсәгилешлелек һәм асыҡлыҡ булған ойоштороу принцибы).*

**ЕСТЕ́СТВЕННОЕ ВОСПИТА́НИЕ** тәбиғи тәрбиә *(тәрбиәнең маҡсатын баланың тәбиғи үҫешенә тәьҫир итеү тип билдәләгән педагогик концепция).*

## Ж

**ЖЕЛА́НИЕ** теләк *(нимәгәлер эйә булыу йәки нимәнелер тормошҡа ашырыу мөмкинлеге тураһындағы хыялдарҙың ысын фекергә күсеүен, ихтыяжға әйләнеүен сағылдырған кисереш).*

# З

**ЗАБЫВА́НИЕ** онотоу, иҫтән (хәтерҙән) сығарыу *(иҫкә төшөрөү, хәтерләү мөмкинлегенең, ятлаған мәғлүмәттәрҙе иҫләүҙең яйлап кәмеү процесы).*

**ЗАБЫВА́НИЕ ОТНОСИ́ТЕЛЬНОЕ** сағыштырмаса онотоу.

**ЗАБЫВА́НИЕ ПО́ЛНОЕ** тулыһынса онотоу.

**ЗАБЫВА́НИЕ ЧАСТИ́ЧНОЕ** өлөшләтә онотоу.

**ЗА́ВИСТЬ** көнсөллөк *(субъект тарафынан кемдеңдер ысынбарлыҡта йәки фараз буйынса социаль байлыҡтар (матди ҡиммәттәр, уңыш, статус, шәхси сифаттар һ.б.) булдырыу өҫтөнлөгөн күреп, был өҫтөнлөктө уның мин-минлегенә хәүефле тип ҡабул итеп үртәнеү тойғоһо. Ғәҙәттә, был тойғо аффектив кисерештәр менән ҡушыла).*

**ЗАДА́НИЕ** эш, бирем, задание *(уҡытыусының уҡыусыға ниндәйҙер талаптар ҡуйып үтәргә ҡушылған эш төрө. Бындай эштәрҙе даими үтәү уҡыу материалын үҙләштереүҙе тәьмин итә).*

**ЗАДА́НИЕ ДОМА́ШНЕЕ** өйгә эш.

**ЗАДА́НИЕ ДОПОЛНИ́ТЕЛЬНОЕ** өҫтәлмә эш.

**ЗАДА́НИЕ КЛА́ССНОЕ** синыф эше.

**ЗАДА́НИЕ ПОДГОТОВИ́ТЕЛЬНОЕ** әҙерлек эше.

**ЗАДА́ТКИ** һәләт билдәләре, өмөт *(нервы системаһының, мейенең тыумыштан уҡ һәләт үҫешендәге тәбиғи нигеҙҙе тәшкил итеүсе анатомик-физиологик үҙенсәлектәре).*

**ЗАДА́ТКИ ПРИРО́ДНЫЕ** тәбиғи һәләт билдәләре.

**ЗАДА́ТКИ ФИЗИОЛОГИ́ЧЕСКИЕ** тыумыштан килгән һәләт билдәләре.

**ЗАДА́ЧА ПОЗНАВА́ТЕЛЬНАЯ** танып белеү бурысы *(яңы белем, ысул эҙләгәндә быға тиклем үҙләштерелгән белем, бәйләнештәрҙе, мөнәсәбәттәрҙе, иҫбатлауҙарҙы әүҙем файҙаланыуға этәреш биргән эш).*

**ЗАКО́Н СТИ́ВЕНСА** Стивенс законы *(тойоу көсөн ҡуҙғытҡыстың билдәле бер физик интенсивлығы кимәле менән бәйләүсе формула. Америка ғалимы С.С. Стивенс тарафынан табылған).*

**ЗАПОМИНА́НИЕ** хәтерләү, иҫтә тотоу *(материалды хәтерҙә тотоуҙы, нығытыуҙы тәьмин иткән процестарҙың дөйөмләштерелгән атамаһы).*

**ЗАПОМИНА́НИЕ ДОЛГОВРЕ́МЕННОЕ** оҙаҡ ваҡытҡа хәтерләү.

**ЗАПОМИНА́НИЕ ЗРИ́ТЕЛЬНОЕ** күреп хәтерләү, күреү хәтере.

**ЗАПОМИНА́НИЕ МЕХАНИ́ЧЕСКОЕ** аңламайынса хәтерләү.

**ЗАПОМИНА́НИЕ НЕПРОИЗВО́ЛЬНОЕ** ихтыярһыҙ хәтерләү.

**ЗАПОМИНА́НИЕ ОПЕРАТИ́ВНОЕ** тиҙ хәтерләү.

**ЗАПОМИНА́НИЕ СЛУХОВО́Е** ишетеп хәтерләү.

**ЗАПУ́ЩЕННОСТЬ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ** тәрбиә етешһеҙлеге *(тирә-яҡ мөхиттең кире йоғонтоһо һәм тәрбиәнең хаталары арҡаһында күҙаллауҙарҙың, аңлауҙарҙың тотороҡло рәүештә боҙолоуы, тойғоларҙың тыйнаҡһыҙлығы, ижтимағи яҡтан әһәмиәтле тәртиптәрҙең, ғәҙәттәрҙең формалашып етмәүе).*

**ЗАРАЖЕ́НИЕ** *(социаль психологияла)* **йоғонто яһау, тәьҫир итеү, тоҡандырыу** *(бер индивидтың эмоциональ хәле икенселәргә психофизиологик кимәлдә күсеү процесы).*

**ЗАЧЁТ** зачет *(Рәсәй Федерацияһында уҡыусылар һәм студенттарҙың белем кимәлен, һәләтен, күнекмәләрен тикшереү формаһы. Айырым-айырым йәки төркөмләп әңгәмәләшеү, һорау, ғәмәли эштәр формаһында үткәрелә).*

**ЗАЩИ́ТА ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ** психологик һаҡлау **(яҡлау)** *(бәрелеш, бәхәс булырын аңлауға бәйле ҡурҡыуҙы, хафаларҙы кәметеүгә, бөтөрөүгә йүнәлтелгән, шәхесте тотороҡлолоҡҡа, ныҡлыҡҡа махсус көйләү, әҙерләү системаһы).*

**ЗАЩИЩЁННОСТЬ ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ** психологик һаҡланғанлыҡ *(индивидтың төп ихтыяждарын, үҙ хоҡуҡтарын бөтә, хатта уларҙы тормошҡа ашырыуҙы ауырлаштырған йәки туҡтатҡан шарттар килеп тыуған ҡыйын ситуацияларҙа ла был хәлдән ҡотолоу мөмкинлектәрен табасағын аңлауы, ныҡлы ыңғай эмоциональ кисерештәре).*

**ЗНА́НИЕ** белем *(ысынбарлыҡты өйрәнеү процесының ижтимағи-тарихи практикала тикшерелгән, логика тарафынан раҫланған һөҙөмтәһе. Уға ярашлы күҙаллауҙарҙың, төшөнсәләрҙең, теорияларҙың, фекерҙәрҙең кеше аңында сағылышы. Белем телдәрҙә тәбиғи һәм яһалма тамғалар формаһында теркәлә).*

**ЗНА́ЧИМЫЙ ДРУГО́Й** үрнәк (өлгө) булырлыҡ кеше *(был субъект өсөн аралашыуҙа, эшмәкәрлектә абруйлы кеше).*

**ЗО́НА БЛИЖА́ЙШЕГО РАЗВИ́ТИЯ** яҡындағы үҫеш зонаһы *(бала үҙ аллы (актуаль үҫеш кимәле) һәм оло кеше етәкселегендә эшләгән мәсьәләләрҙең ауырлыҡ кимәлендәге айырмаһы. Л. С. Выготский тарафынан индерелгән был төшөнсә баланың аҡыл үҫешенең уҡыу мөмкинлегенә булған реаль мөнәсәбәте уның актуаль үҫеш кимәлен һәм яҡындағы үҫеш зонаһын билдәләү ярҙамында асыҡлана алыуын күрһәтә. Яҡындағы үҫеш зонаһын булдырған уҡытыу ғына үҫеште барлыҡҡа килтерә һәм үҫештән алдараҡ барған уҡытыу ғына нәтижәле була).*

**ЗРЕ́ЛОСТЬ** өлгөргәнлек, балиғ булыу *(онтогенезда кеше шәхесенең әхлаҡи, интеллектуаль һәм физик һәләттәренең иң юғары үҫеше менән ҡылыҡһырланған оҙайлы осоро).*

**ЗРЕ́ЛОСТЬ ПОЛОВА́Я** енси өлгөргәнлек.

# И

**ИГРА́** уйын *(фән һәм мәҙәниәт предметында шартлы ситуацияларҙа ижтимағи тәжрибәне үҙләштереүгә, ижад итеүгә, предметлы эш-хәрәкәттәрҙең, социаль яҡтан нығытылып, тормошҡа ашырыу юлдарын билдәләүгә йүнәлтелгән, күнекмә өсөн башҡарылған эшмәкәрлек формаһы).*

**И́ГРЫ ДЕЛОВЫ́Е** эшкә өйрәтеү уйындары.

**И́ГРЫ ДИДАКТИ́ЧЕСКИЕ** дидактик уйындар.

**И́ГРЫ НАСТО́ЛЬНЫЕ** өҫтәл уйындары.

**И́ГРЫ ОРГАНИЗО́ВАННЫЕ** ойошторолған уйындар.

**И́ГРЫ ПОДВИ́ЖНЫЕ** хәрәкәтле уйындар.

**И́ГРЫ РАЗВИВА́ЮЩИЕ** фекерләүҙе үҫтереүсе уйындар.

**И́ГРЫ СПОРТИВНЫЕ** спорт уйындары.

**И́ГРЫ ТВО́РЧЕСКИЕ** ижади уйындар.

**ИДЕНТИФИКА́ЦИЯ** [лат. *identificare*— тиңләү, тиң итеү] тиңәү, тиңләү *(1) нимәнелер, кемделер таныу; 2) нимәгәлер, кемгәлер оҡшатыу, тиңләштереү).*

**ИЗЛОЖЕ́НИЯ УЧИ́ТЕЛЯ** уҡытыусы һөйләүе *(уҡытыусының әңгәмә, лекция, аңлатыу, күрһәтмә биреү, балаларҙың үҙ аллы эштәре ваҡытында монологик өҫтәмәләр йәки яуапта-*

*рына аңлатмалар биргән ваҡытта ҡулланған һөйләү формаһы).*

**ИМПЕРАТИ́В** [лат. *imperativus* — бойороҡ] бойороҡ *(ҡәтғи талап, бойороу, тәртиптең мотлаҡ принцибы).*

**ИМПРОВИЗА́ЦИЯ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ** педагогик импровизация *(уҡытыусының, тәрбиәсенең педагогик аралашыу барышында алдан әҙерләнмәйенсә, уйламайынса ғәмәлгә ашырылған эшмәкәрлеге. Педагогик импровизацияның маҡсаты — уҡытыуҙағы, тәрбиәләүҙәге тәғәйен шарттарҙа яңыса хәл итеү юлдарын табыу).*

**ИНДИВИ́Д** [лат. *individuum* — бүленмәй торған] индивид, шәхес, зат *(1) айырым тереклек эйәһе, биологик төрҙөң бер вәкиле; 2) ниндәйҙер сифаты менән айырылып торған шәхес, кеше).*

**ИНДИВИДУА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** индивидуаль (шәхси) психология *(психоанализдың фрейдизмдан тармаҡланған, А. Адлер тарафынан тикшерелгән бер йүнәлеше. Индивидуаль психология, баланың шәхси үҙенсәлеге, индивидуаллеге сабый саҡтан уҡ (5 йәштән уҡ) һалына һәм, үҙенә башҡа тормош стиле булып, алдағы бөтә психик үҫеште билдәләй, тип күрһәтә).*

**ИНДИВИДУА́ЛЬНОСТЬ** индивидуаллек *(башҡаларҙан үҙенең социаль яҡтан әһәмиәтле айырмалары менән ҡылыҡһырланған кеше; индивидтың үҙенә генә хас психик һәм шәхси үҙенсәлеге; уның ҡабатланмаҫ тиңһеҙлеге. Индивидуаллек индивидтың дәртендә, холҡонда, ҡыҙыҡһыныуында, һиҙемләү һәм фекерләү ҡеүәһендә, ихтыяж һәм һәләттәрендә сағыла).*

**ИНДИВИДУА́ЛЬНЫЙ СТИЛЬ ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТИ** эшмәкәрлектең индивидуаль стиле *(психологик сараларҙың, алымдарҙың, ысулдарҙың, күнекмәләрҙең, ниндәйҙер эште башҡарыу юлдарының берәүгә генә хас тотороҡло индивидуаль үҙенсәлекле системаһы).*

**ИННОВА́ЦИЯ** инновация, яңылыҡ *(социаль яҡтан әһәмиәтле үҙгәрештәр барлыҡҡа килтергән төрлө яңылыҡтар булдырыу һәм ғәмәлгә индереү).*

**ИННОВА́ЦИЯ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ** педагогик яңылыҡ *(маҡсатҡа йүнәлтелгән үҙгәрештәр, тотороҡло яңы элементтар индергән, системаның бер хәлдән икенсе хәлгә күсеүен барлыҡҡа килтергән яңылыҡтар).*

ИНСПЕКТИ́РОВАНИЕ тикшереү *(мәғариф системаһы учреждениелары эшмәкәрлегенең закондар нормаһына һәм башҡа хоҡуҡи акттарға тура килеүен тикшереү. Инспекциялар мәғариф идаралығы йәки вазифалы кеше исеменән ойошторола).*

ИНСТИ́НКТ [лат. *instinctus* — уяныу] инстинкт, тоҫмар *(кеше, хайуан психологияһында, ғәҙәтендә тыумыштан булған компоненттар йыйылмаһы; йәшәү өсөн әһәмиәтле булған, аңһыҙ рәүештә башҡарылған маҡсатлы ынтылыш).*

ИНСТИ́НКТ ОБОРОНИ́ТЕЛЬНЫЙ һаҡланыу инстинкты (тоҫмары).

ИНСТИ́НКТ ПИТА́НИЯ туҡланыу инстинкты (тоҫмары).

ИНСТИ́НКТ РАЗМНОЖЕ́НИЯ үрсеү инстинкты (тоҫмары).

ИНСТИ́НКТ САМОСОХРАНЕ́НИЯ үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты (тоҫмары).

ИНСТИ́НКТ РОДИ́ТЕЛЬСКИЙ ата-әсәлек инстинкты (тоҫмары).

ИНТЕГРАТИ́ВНЫЙ УРО́К берләштерелгән дәрес *(бер нисә ҡатмарлы уҡыу фәндәрен органик яҡтан берләштергән ҡатмарлы процестар, ҙур төшөнсәләр, закондар, проблемалар тураһында уҡыусыларҙа тулы системалы күҙаллауҙар формалаштырыу өсөн файҙаланылған һәм теория менән практиканың тығыҙ бәйләнешен күрһәтеү өсөн бик мөһим булған дәрес).*

ИНТЕЛЛЕ́КТ [лат. *intellectus* — аңлау, төшөнөү] интеллект *(фекерләү һәләте, аҡыл кимәле) (индивидтың фекерләү һәләтенең сағыштырмаса тотороҡло структураһы, аҡыл үҫешенең кимәле).*

ИНТЕЛЛЕ́КТ ИСКУ́ССТВЕННЫЙ яһалма интеллект.

ИНТЕРВЬЮ́ [ингл. *interview* — әңгәмә, ораш ыу] интервью *(телдән һорау ярҙамында социаль-психологик мәғлүмәт алыу ысулы).*

ИНТЕРЕ́С ҡыҙыҡһыныу, мәнфәғәт *(шәхестең объектты, күренеште аңлауға, эшмәкәрлекте, уның маҡсатын үҙләштереүгә, яңы факттар менән танышыуға, ысынбарлыҡты мөмкин тиклем тулыраҡ һәм тәрәнерәк өйрәнеүгә, сағылдырыуға йүнәлтелгән ынтылышы).*

ИНТЕРЕ́СЫ МНОГОСТОРО́ННИЕ күп яҡлы ҡыҙыҡһыныуҙар.

**ИНТЕРЕ́СЫ ЛИ́ЧНЫЕ** шәхси мәнфәғәттәр.

**ИНТЕРЕ́СЫ НАУ́ЧНЫЕ** фәнни ҡыҙыҡһыныу.

**ИНТЕРЕ́С НЕПОСРЕ́ДСТВЕННЫЙ** туранан-тура ҡыҙыҡһыныу.

**ИНТЕРЕ́СЫ ПРОФЕССИОНА́ЛЬНЫЕ** профессиональ ҡыҙыҡһыныу.

**ИНТЕРЕ́СЫ УСТО́ЙЧИВЫЕ** тотороҡло ҡыҙыҡһыныу.

**ИНТЕРИОРИЗА́ЦИЯ** [лат. *interior* — эске] интериоризациялау *(тышҡы ижтимағи эшмәкәрлек структураларын өйрәнеү арҡаһында кеше психикаһының эске структураларының формалашыуы).*

**ИНТЕРФЕРЕ́НЦИЯ** [лат. *inter* — араһында, *ferens* — таратыу] интерференция *(субъект элек хәтерендә ҡалдырған материалға ул хәҙер эш иткән икенсе материалдың тәьҫире өҫтәлеү арҡаһында хәтерҙә ҡалғандың насар һаҡланыуы).*

**ИНТЕРФЕРЕ́НЦИЯ НА́ВЫКОВ** күнекмәләр интерференцияһы *(иҫке күнекмәләрҙең яңыларын үҙләштереүгә кире тәьҫире).*

**ИНТУИ́ЦИЯ** [лат. *intueri* — иғтибар менән ҡарау] һиҙем, тоҫмал *(субъектта тормош, эш тәжрибәһе нигеҙендә, ирекһеҙ рәүештә, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән белем).*

**ИНФАНТИЛИ́ЗМ** [лат. *infantilis* — сабыйҙарса, балаларса] инфантилизм *(1) организмдың үҫешендә, буйында, тән пропорцияларында, енси үҙенсәлектәрҙә булған тотҡарлыҡ; 2) оло йәштәге кешеләрҙә, уларҙың ҡылығында балалыҡҡа хас физик, психик сифаттарҙың һаҡланыуы).*

**ИНФОРМАТИЗА́ЦИЯ ОБРАЗОВА́НИЯ** уҡыу-уҡытыуҙа информатика ҡулланыу *(киң мәғәнәлә — мәғариф системаһын информацион продукция, сара һәм технологиялар менән тулыландырыуға бәйле социаль-педагогик яҡтан үҙгәртеп ҡороуҙар комплексы; тар мәғәнәлә — мәғариф системаһы учреждениеларына микропроцессор техникаһына, шулай уҡ информацион продукцияларға һәм педагогик технологияларға нигеҙләнгән информацион саралар ҡулланыуҙы индереү).*

**ИНФОРМАЦИО́ННАЯ ТЕО́РИЯ ЭМО́ЦИЙ** эмоцияларҙың мәғлүмәт теорияһы *(эмоцияларҙың ниндәйҙер актуаль ихтыяж һәм уны ҡәнәғәтләндереү мөмкинлектәре менән билдәләнеүе тураһындағы концепция. Кеше был мөмкинлекте шәхси тәжрибәһе нигеҙендә баһалай. Аңһыҙ рәүештә, ихты-*

*яжды ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәк буласаҡ саралар, ваҡыт, башҡа ресурстар тураһындағы мәғлүмәт менән әле алынған мәғлүмәтте сағыштыра. Яңы мәғлүмәт нигеҙендә маҡсатҡа ирешеү мөмкинлеге артһа — ыңғай эмоциялар, кәмеһә кире эмоциялар барлыҡҡа килә).*

**ИНФОРМАЦИО́ННО-РЕЦЕПТИ́ВНЫЙ МЕ́ТОД ОБУЧЕ́НИЯ** **уҡытыуҙа мәғлүмәтле рецептив алым** *(уҡытыусы менән уҡыусыларҙың берҙәм эшмәкәрлеген ойоштороуҙа аңлатыу-һүрәтләү алымы. Уҡытыусы әҙер мәғлүмәтте хәбәр итә, ә уҡыусылар ҡабул итә, аңлай һәм хәтерендә теркәй).*

**ИПОХОНДРИ́Я** [гр. *hypochondria* — төшөнкөлөк, шикләнеүсәнлек] **ипохондрия** *(дауалап булмай торған ауырыуҙарҙан ҡурҡыу, үҙеңдең һаулығыңа артыҡ иғтибарлы булыу, төрлө нәмәнән сәбәпһеҙгә шикләнеү, көҙөл төшөнкөлөгөнә бирелеү хәле).*

**ИСПРАВИ́ТЕЛЬНО-ТРУДОВА́Я ПЕДАГО́ГИКА** **холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт педагогикаһы** *(педагогика фәнендә, енәйәт эшләп, иркенән мәхрүм ителгән йәки башҡа төрлө язаға тарттырылған кешеләрҙең холҡон төҙәтеү өсөн ойошторолған эшмәкәрлекте өйрәнеүсе тармаҡ).*

**ИССЛЕ́ДОВАНИЯ В ПЕДАГО́ГИКЕ** **педагогикалағы тикшеренеүҙәр** *(белем биреү, ҡанундар, структура, тәрбиә механизмы, педагогиканың теорияһы һәм тарихы, уҡытыу-тәрбиә эштәрен ойоштороу методикаһы, уның йөкмәткеһе, принциптары, ойоштороу формалары һәм алымдары тураһында ижтимағи яҡтан әһәмиәтле, яңылыҡҡа йүнәлтелгән фәнни эшмәкәрлек процесы һәм һөҙөмтәһе).*

**ИССЛЕ́ДОВАТЕЛЬСКИЙ МЕ́ТОД ОБУЧЕ́НИЯ** **уҡытыуҙа тикшеренеү методы** *(уҡытыусының йүнәлеш биреүе арҡаһында уҡыусылар уҡыу-тикшеренеү мәсьәләләрен үҙ аллы эшләгән уҡытыу алымы).*

# К

**КАНА́ЛЫ КОММУНИКА́ЦИИ** **аралашыу каналдары, бәйләнеш формалары** *(ижтимағи төркөм структураһына ҡараған төшөнсә; кешеләрҙең бергә эшләү процесында эшлекле һәм шәхес-ара бәйләнештәрен ҡылыҡһырлай).*

**КВАЛИФИКА́ЦИЯ** [лат. *qualificatio:* лат. *qualis* — ниндәй сифат — *facere* — эшләргә] **квалификация** *(эшсегә эшмәкәрлектең тәғәйен бер төрөнөң билдәле ауырлыҡтағы хеҙмәт функцияһын үтәргә мөмкинлек биргән һәләт үсеше кимәле).*

**КЛАССИ́ЧЕСКОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** классик белем *(боронғо телдәрҙе һәм математиканы төп предметтар итеп системалы өйрәнеүҙе күҙ уңында тотҡан дөйөм урта белем тибы).*

**КЛА́ССЫ ВЫРА́ЩИВАНИЯ** яраҡлашыу синыфтары *(уҡытыуҙы индивидуалләштереү формаһы, ҡулайлашыу синыфтары).*

**КЛИ́МАТ СОЦИА́ЛЬНО-ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКИЙ** **социаль-психологик климат** *(бергәләшеп нәтижәле эшләүгә, шәхестең төркөмдә төрлө яҡлы үсешенә ярҙам итеүсе йәки ҡамасаулаусы психологик шарттар йыйылмаһы, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙең сифаты).*

**КОЛЛЕ́ГИИ** коллегиялар *(XVI — XVIII быуаттарҙа Европала урта йәки юғары ябыҡ уҡыу йорттары).*

**КО́ЛЛЕДЖ** [ингл. *college*] **колледж** *(Бөйөк Британия, АҠШ һ.б. илдәрҙең мәғариф системаһындағы уҡыу йорто. Рәсәй Федерацияһында 90-сы йылдар башынан алып ҡайһы бер яңы йәки үҙгәртелгән урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарын колледж тип атайҙар).*

**КОЛЛЕКТИ́В** [лат. *collectios* — дөйөмләштерелгән] **коллектив** *(социаль яҡтан әһәмиәтле уртаҡ эшмәкәрлек процесында дөйөм маҡсаттар һәм бурыстар берләштергән кешеләр төркөмө).*

**КОММЕ́РЧЕСКИЕ УЧИ́ЛИЩА** коммерция училищелары *(Рәсәй Федерацияһында йәмғәтселек аҡсаһына йәки хосуси аҡсаға асылып, тәьмин ителгән урта уҡыу йорто).*

**КО́МПЛЕКС НЕПОЛНОЦЕ́ННОСТИ** кәмһенеү комплексы *(кешенең үҙен шәхес булараҡ булдыҡһыҙ, һәләтһеҙ тип ныҡлы ышаныуы, үҙ мөмкинлектәрен кәмһетеп ҡарауы сәбәпле невротик тайпылыштарға алып барыусы психопатологик синдром. Кәмһенеү комплексы балаларҙа ағза үсешендәге кәмселектәр арҡаһында барлыҡҡа килгән яраҡлашыу формаларын өйрәнеүсе А. Адлер тарафынан асылған).*

**КО́МПЛЕКС ОЖИВЛЕ́НИЯ** йәнләнеү (күңелләнеү) комплексы *(сабыйҙың оло кешене күреүенә эмоциональ-хәрәкәт реакцияһы).*

**КО́МПЛЕКСНАЯ СИСТЕ́МА ОБУЧЕ́НИЯ** комплекслы уҡытыу системаһы *(белем йөкмәткеһен һәм уҡытыу процесын берләштереп, бәйләп торған бер үҙәк нигеҙендә төҙөү һәм ойоштороу).*

**КОМПЬЮТЕРИЗА́ЦИЯ ОБУЧЕ́НИЯ** уҡытыу процесын компьютерлаштырыу (тар мәғәнәлә — *компьютерҙы уҡытыу сараһы итеп ҡулланыу,* киң мәғәнәлә — *компьютерҙы уҡытыу процесында күп маҡсатлы ҡулланыу).*

**КОНСПЕКТИ́РОВАНИЕ** конспектлау *(мәҡәлә, китап, лекциялар йөкмәткеһендәге төп фекерҙәрҙе, улар нигеҙләгән факттарҙы, миҫалдарҙы һ.б. ҡыҫҡаса яҙып алыу).*

**КОНТРО́ЛЬНАЯ РАБО́ТА** контроль эш *(үҙләштерелгән белемдең кимәлен тикшереү һәм баһалау, уҡыу процесында уҡыусыларҙың үҙаллылығын, әүҙемлеген билдәләү, уҡыу эшмәкәрлеге формаларының, ысулдарының, методтарының эффектлылығын асыҡлау формаларының береһе).*

**КОНТРО́ЛЬ СОЦИА́ЛЬНЫЙ** [фр. *controle* — тикшереү] йәмғиәт күҙәтеүе *(йәмғиәттең һәм социаль төркөмдөң шәхескә уның тәртибен яйға һалыу, был йәмғиәттә ҡабул ителгән дөйөм ҡағиҙәләргә яраҡлаштырыу маҡсатында тәьҫир итеү алымдары системаһы).*

**КОНФЛИ́КТ** [лат. *conflictus* — ҡаршылыҡ] конфликт *(оппоненттарҙың йәки үҙ-ара бәйләнештәге субъекттарҙың ҡапма-ҡаршы йүнәлтелгән маҡсаттары, мәнфәғәттәре, позициялары, фекерҙәре, ҡараштары араһындағы ҡаршылыҡ).*

**КОНФО́РМНОСТЬ** [лат. *conformis* — оҡшаш, ярашлы] конформлыҡ, күндәмлек *(башта күпселектең позицияһын ураҡлашмаған кешенең төркөмдөң реаль йәки реаль булмаған баҫымы арҡаһында тәртибен, йүнәлешен үҙгәртеүе, ыңғайға килеүе, күнеүсәнлеге).*

**КОНЦЕНТРИ́ЗМ** [лат. *con* — менән, *centrum* — үҙәк] концентризм *(фән нигеҙҙәрен мәктәп курстарында уҡытҡанда уҡыу материалының өлөштәрен яңынан ҡабатлап, төрлө кимәлдә тәрәнәйтеп, бер нисә уҡыу баҫҡысына бүлеп төҙөү принцибы).*

**КОНЦЕ́ПЦИЯ** [лат. *conceptio* — ҡабул итеү] концепция *(күренешкә, хәлгә, предметҡа ҡарата ҡараштар, идеялар системаһы; танып белеү һәм был йүнәлештә ғәмәли эшмәкәрлек характерын билдәләүсе, уларҙы аңлау, аңлатыу ысулы).*

**КОНЦЕ́ПЦИЯ ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТНОГО ОПОСРЕ́ДСТВОВАНИЯ МЕЖЛИ́ЧНОСТНЫХ ОТНОШЕ́НИЙ** эшмәкәрлектә туранан-тура булмаған шәхес-ара мөнәсәбәттәр концепцияһы *(тейешле кимәлдә үҫеш алған төрлө төркөмдә туранан-тура булмаған шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙең йөкмәткеһен һәм эшмәкәрлекте баһалаған махсус социаль-психологик концепция).*

**КОНЦЕ́ПЦИЯ САМООРГАНИЗА́ЦИИ** үҙенән-үҙе ойошоу концепцияһы *(XX быуаттың 50—60-сы йылдарында статистик физика (И. Пригожин, Г. Хакян), системаның дөйөм теорияһы, кибернетика (Г. фон Ферстер, Х. Матурана) нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм тәртипкә килтерелгән элементтарҙың тиң булмаған системаларында билдәле бер структура барлыҡҡа килеү ҡанундарын өйрәнеүсе фәнни йүнәлеш).*

**КОНЦЕ́ПЦИЯ СПЕЦИФИ́ЧЕСКОЙ ЭНЕ́РГИИ О́РГАНОВ ЧУВСТВ** [лат. *specificus* — айырым] **һиҙеү (тойоу) ағзаларының үҙенсәлекле энергия концепцияһы** *(тойоуҙың сифаты ниндәй тойоу ағзаһының ҡуҙғыуына бәйле тигән фараз. Бер үк тышҡы сәбәп төрлө тойоу ағзаларына тәьҫир итеп, төрлө тойғо тыуҙыра, мәҫ., электр тоғы күҙгә тәьҫир иткәндә – күреү тойғоһо, ҡолаҡҡа тәьҫир иткәндә ишетеү тойғоһо барлыҡҡа килә).*

**КОРРЕКЦИО́ННО-ВОСПИТА́ТЕЛЬНАЯ РАБО́ТА** төҙәтеү-тәрбиә эше *(аномаль балалар үҫешендәге кәмселектәрҙе бөтөрөүгә йәки кәметеүгә йүнәлтелгән махсус алымдар һәм саралар системаһы).*

**КОРРЕЛЯЦИО́ННЫЙ АНА́ЛИЗ** *(психологияла)* [лат. *correlatio* — мөнәсәбәт, бәйләнеш] **корреляцион анализ** *(тикшерелгән факторҙарҙың, үҙсәнлектәрҙең үҙ-ара бәйләнешен, мөнәсәбәт тығыҙлығын, формаһын, билдәһен баһалаусы статистик алым).*

**КРАЕВЕ́ДЕНИЕ В ШКО́ЛЕ** мәктәптә тыуған яҡты өйрәнеү *(уҡыусыларҙың үҙҙәре йәшәгән урындың — биҫтә, ҡала, ауылдың, район, өлкәнең — тәбиғәтен, иҡтисадын, тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүе).*

**КРИ́ЗИСЫ ВОЗРАСТНЫ́Е** йәш кризистары *(бер йәш этабынан икенсеһенә күскән осорҙа күҙәтелә торған төрлө киҫкенлектәге көсөргәнешлек хәлдәренең шартлы атамаһы. Психологик яҡтан ҡырҡа үҙгәрештәр менән ҡылыҡһырланған, айырым, сағыштырмаса оҙаҡҡа һуҙылмаған (йылға*

*яҡын) онтогенез осоро. Невротик йәки травматик характерҙағы кризистарҙан айырмалы рәүештә, йәш кризисы шәхес үҫешендә нормаль һәм алға ынтылышта кәрәк булған норматив процесҡа ҡарай (Э. Эриксон)).*

**КРУЖКОВА́Я РАБО́ТА** түңәрәк эштәре *(уҡыусыларҙың үҙешмәкәр берләшмәләренең эшмәкәрлеге; мәктәптән тыш һәм дәрестән тыш эштәр формаһы. Балаларҙың белемен тәрәнәйтеү, һәләтен үҫтереү, уларҙың ижади ҡыҙыҡһыныуҙарын, ынтылыштарын ҡәнәғәтләндереү, файҙалы эшкә ылыҡтырыу һәм буш ваҡытты, ялды ойоштороу маҡсатында үткәрелә).*

**КУЛЬТУ́РА ПОВЕДЕ́НИЯ** әҙәп *(кешеләрҙең әхлаҡ принциптарына, эстетик зауыҡҡа, кешелек йәмғиәте ҡағиҙәләрен, нормаларын һаҡлауға нигеҙләнгән аралашыу формаһы һәм эш-ҡылығы).*

# Л

**ЛАБИ́ЛЬНОСТЬ** [лат. *labilis* — үҙгәреүсән] лабиллек *(билдәле ваҡыт берәмегендә нервы ҡуҙәнәктәре йәки функциональ структуралар боҙмайынса тапшыра алған максималь импульстар һаны. Был термин Н.Е. Введенский тарафынан индерелгән. Дифференциаль психофизиологияла лабиллек нервы системаһының төп үҙенсәлектәренең береһе: нервы процестарының барлыҡҡа килеү һәм бөтөү тиҙлеген ҡылыҡһырлай).*

**ЛАБОРАТО́РНЫЕ ЗАНЯ́ТИЯ** лаборатор дәрестәр *(дөйөм белем биреүсе урта, махсус һәм юғары мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың теоретик белемен тәрәнәйтеү, нығытыу һәм үҙ аллы тәжрибәләр эшләү күнекмәләрен үҫтереү маҡсатында үткәрелгән ғәмәли эштәр, тикшеренеүҙәр төрө).*

**ЛАБОРАТО́РНЫЙ ЭКСПЕРИМЕ́НТ** [лат. *laborare* — эшләү, *experimentum* — тәжрибә] лаборатор тәжрибә *(махсус йыһазландырылған бүлмә шарттарында үткәрелгән, бигерәк тә бәйле һәм бәйһеҙ үҙгәреүсәндәрҙе теүәл тикшереүҙе тәьмин иткән тәжрибәләр төрө).*

**ЛЕ́КЦИЯ** [лат. *lectio* — уҡыу] лекция *(уҡытыусының (лекторҙың) теоретик уҡыу материалын системалы, эҙмә-эҙлекле һөйләүе, аңлатыуы).*

**ЛЕ́КЦИЯ ВСТУПИ́ТЕЛЬНАЯ** инеш лекция.

**ЛЕ́КЦИЯ ОБЗО́РНАЯ** обзор лекция, күҙәтеү лекцияһы.

**ЛЕ́КЦИЯ УСТАНО́ВОЧНАЯ** йүнәлеш биреүсе (йүнәлтеүсе) лекция.

**ЛИБИДО́** [лат. *libido* — енси теләк] либидо, шәһүәт, енси теләк (*психоанализдың төп төшөнсәләренең береһе. Индивидтың бөтә енси ынтылыштары нигеҙендә ятҡан психик энергияны аңлата: енси теләккә синоним итеп ҡулланыла (З. Фрейд).*

**ЛИ́ДЕР** [ингл. *leader* — етәксе] лидер, етәксе (*төркөм өсөн әһәмиәтле хәлдәрҙә уның исеменән яуаплы ҡарарҙар ҡабул итергә хоҡуҡлы тип һаналған төркөм ағзаһы. Төркөмдә берҙәм эшмәкәрлекте ойоштороуҙа һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүҙә үҙәк ролде уйнаған иң абруйлы шәхес).*

**ЛИ́ДЕР АВТОРИТА́РНЫЙ** авторитар етәксе.

**ЛИ́ДЕР ГРУ́ППЫ** төркөм етәксеһе.

**ЛИ́ДЕР НЕОФИЦИА́ЛЬНЫЙ** рәсми булмаған лидер.

**ЛИ́ДЕР ОФИЦИА́ЛЬНЫЙ** рәсми лидер.

**ЛИ́ДЕРСТВО** лидерлыҡ, етәкселек (*төркөмдәге шәхес-ара мөнәсәбәттәр системаһында өҫтөнлөк итеү һәм буйһоноу, тәьҫир итеү һәм эйәреү мөнәсәбәттәре. Тикшеренеүҙәр барышында лидерлыҡ төрлө стилдәргә бүленгән һәм уның хаҡында төрлө концепциялар эшләнгән).*

**ЛИ́ЧНОСТНЫЙ ПОДХО́Д** шәхес мөнәсәбәте, шәхескә хас ҡараш (*педагогтың тәрбиәләнеүсегә үҙ кимәлендә үҫешкән, аңлы, яуаплы субъект, шәхес итеп ҡарауы, әҙмә-әҙлекле мөнәсәбәте).*

**ЛИ́ЧНОСТНЫЙ СМЫСЛ** шәхси мәғәнә (*шәхестең объектив ысынбарлыҡ күренештәренә субъектив мөнәсәбәте).*

**ЛИ́ЧНОСТЬ** шәхес (*шәхес-ара һәм социаль мөнәсәбәттәрҙең, аңлы эшмәкәрлектең субъекты булараҡ айырым кеше).*

**ЛОГОПЕДИ́Я** [гр. *logos* — һүҙ, *paideia* — тәрбиә] логопедия (*һөйләү кәмселектәрен өйрәнеү һәм уларҙы дауалау, бөтөрөү саралары тураһындағы фән, дефектологияның бер тармағы).*

**ЛОЖЬ** ялған, алдыҡ (*ысын хәлде аңлы рәүештә боҙоп күрһәтеүҙән торған аралашыу феномены. Ялған күберәк тиҙ генә тикшереү ауыр йәки бөтөнләй мөмкин булмаған телдән һөйләү эсмәлегендә сағылыш ала).*

**ЛО́КУС КОНТРО́ЛЯ** [лат. *locus* — урын, фр. *controle* — тикшереү] **контроль локусы** *(кешенең үҙ эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре өсөн яуаплылыҡты (тышҡы көстәргә тышҡы контроль локусы) йәки үҙ һәләтенә һәм тырышлығына (эске контроль локусы) ҡайтарып ҡалдырыу сифаты. Контроль локусы төшөнсәһе Америка психологы Д. Роттерь тарафынан тәҡдим ителгән. Контроль локусы индивидтың йәмғиәттә йәшәү процесында формалашҡан үҙенсәлеге булып тора).*

**ЛО́НГИТЮ́ДНОЕ ИССЛЕ́ДОВАНИЕ** [ингл. *longitude* — оҙонлоҡ] **оҙайлы тикшереү** *(кеше ғүмеренең үҫеш циклы фазаларында йәш үҙенсәлектәренең һәм индивидуаль үҙгәрештәрҙе билдәләү өсөн бер үк кешеләрҙе оҙайлы һәм системалы рәүештә күҙәтеү, тикшереү).*

**ЛЮБО́ВЬ** мөхәббәт, яратыу, һөйөү *(1) башҡалар араһынан объектты айырып алып, субъекттың тормош ихтыяждары һәм мәнфәғәттәре үҙәгенә ҡуйыусы эмоциональ ыңғай мөнәсәбәттең юғары кимәле.* **ЛЮБО́ВЬ К РОДИ́ТЕЛЯМ** ата-әсәгә мөхәббәт. **ЛЮБО́ВЬ К ДЕ́ТЯМ** балаларға мөхәббәт. **ЛЮБО́ВЬ К ИСКУ́ССТВУ** сәнғәткә мөхәббәт; *2) ике енес кешеләре араһындағы яратыу хисе; субъекттың көслө, киҫкен һәм сағыштырмаса тотороҡло хис тойғоһо, физиологик яҡтан сексуаль ихтыяждары һәм социаль яҡтан формалашыуға бәйле үҙенең шәхси мөһим һыҙаттары менән икенсе кешенең тормошонда максималь тулылыҡта сағылыш алыу, уның да шулай уҡ көслө, киҫкен яуап тойғоларын уятыу өсөн ынтылышы).*

# М

**МАЛОКОМПЛЕ́КТНАЯ ШКО́ЛА** **аҙ комплектлы мәктәп** *(уҡыусылар һаны аҙ булыу сәбәпле, параллель синыфтары булмаған мәктәп. Был термин уҡытыусылар һаны синыфтар һанынан кәм булып, бер уҡытыусы 2—3—4 синыфты (15 кеше) берләштереп, бер синыф — комплект итеп уҡытҡан башланғыс мәктәпкә бәйле ҡулланыла. 70-се йылдарҙан аҙ комплектлы мәктәп төшөнсәһе балалар һаны аҙ булған тулы һәм тулы булмаған мәктәптәргә лә ҡулланыла).*

**МАСТЕРСКИ́Е ШКО́ЛЬНЫЕ** мәктәп оҫтаханаһы *(балаларҙы техник хеҙмәткә өйрәтеү, факультатив һәм түңәрәк дәрестәрен үткәреү өсөн махсус ҡорамалдар менән йыһазландырылған мәктәп бүлмәһе).*

**МЕ́ДИА-ОБРАЗОВА́НИЕ** медиа-белем *(педагогикала уҡыусыларға киң мәғлүмәт саралары (кино, матбуғат, телевидение, радио, видео һ. б.) ҡанундарын өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйған йүнәлеш. Медиа-белемдең төп маҡсаты — яңы быуынды хәҙерге шарттарҙа тормошҡа, төрлө мәғлүмәттәрҙе ҡабул итергә, аңларға, төшөнөргә әҙерләү).*

**МЕДИТА́ЦИЯ** [лат. *meditatio* — уйлау] медитация *(интенсив, тәрән уйланыу, иғтибарҙы бер объектҡа ғына йүнәлтеү, уны тарҡатҡан тышҡы (тауыш, яҡтылыҡ) һәм эске (физик, эмоциональ һәм башҡа көсөргәнештәр) бөтә факторҙарҙы бөтөрөп, аҡыл менән предметҡа, идеяға һ.б. үтеп инеү. Медитация — мәҙәни-тарихи даирәгә ҡарап, төрлө формалар алыусы психик күнекмәләр алымы).*

**МЕЖГРУППОВА́Я ДИСКРИМИНА́ЦИЯ** [лат. *discriminatio* — айырыу] **төркөм-ара дискриминация, төркөм-ара кәмһетеү** *(үҙ һәм башҡа төркөмдәр араһында айырмалар табыу. Йыш ҡына был процесс төркөм-ара ҡабул итеүгә хас булған асыҡ сағылышлы баһалау төҫөн ала).*

**МЕЖГРУППОВЫ́Е ОТНОШЕ́НИЯ** *(психологияла)* **төркөм-ара мөнәсәбәттәр** *(социаль төркөмдәрҙә барлыҡҡа килгән күп төрлө бәйләнештәрҙең субъектив сағылышын ҡылыҡһырлаған социаль-психологик күренештәр йыйылмаһы, шулай уҡ төркөмдәрҙең үҙ-ара бәйләнеш алымдары).*

**МЕЖЛИ́ЧНОСТНЫЕ ОТНОШЕ́НИЯ** шәхес-ара **мөнәсәбәттәр** *(кешеләр араһындағы уртаҡ хеҙмәт процесында, аралашҡанда бер-береһенә йоғонто яһау алымдарында, характерында объектив сағылыш алған, субъектив кисерелгән бәйләнештәр).*

**МЕЖПРЕДМЕ́ТНЫЕ СВЯ́ЗИ** предмет-ара бәйләнештәр *(дидактик принцип һәм төрлө уҡыу предметтары араһында үҙ-ара бәйләнеш булдырыу шарты).*

**МЕЖЭТНИ́ЧЕСКИЕ ОТНОШЕ́НИЯ** этник-ара мөнәсәбәттәр *(төрлө милләт, этник төркөм кешеләре араһындағы субъектив кисерелгән мөнәсәбәттәр).*

**МЕЛАНХО́ЛИК** [гр. *melas* — ҡара, *chole* — үт] **меланхолик** *(дүрт темпераменттың береһенә эйә булған, психик*

*әүҙемлеге түбән кимәлдә булыуы, әкрен хәрәкәт, баҫынҡы телмәр, бойоҡлоҡ, хәлһеҙлек менән ҡылыҡһырланған субъект. Меланхоликтар юғары эмоциональ тойғоло була, ғәҙәттә, уларҙа кире эмоциялар өҫтөнлөк итә. Эске кисерештәренең тәрәнлеген һәм тотороҡлолоғон улар тыштан һиҙҙермәй).*

**МЕ́ТОД ОБУЧЕ́НИЯ** уҡытыу алымы *(уҡытыусы һәм уҡыусыларҙың белем йөкмәткеһен үҙләштереүгә булышлыҡ иткән эҙмә-эҙлекле, үҙ-ара бәйләнешле эш системаһы. Уҡытыу алымы өс билдә менән ҡылыҡһырлана: уҡытыу маҡсатын, үҙләштереү ысулын, уҡыусыларҙың үҙ-ара йоғонтоһон билдәләй).*

**МЕ́ТОД ПРОЕ́КТОВ** проекттар алымы *(уҡытыу системаһы. Планлаштырыу һәм яйлап ҡатмарлаша барған ғәмәли биремдәрҙе — проекттарҙы үтәү барышында уҡыусыларға белем биреү һәм һәләт үҫтереү алымы).*

**МЕТО́ДИКА УЧЕ́БНОГО ПРЕДМЕ́ТА** уҡыу предметы методикаһы *(айырым дидактика, билдәле бер предметты уҡытыу теорияһы).*

**МЕТОДИ́ЧЕСКАЯ РАБО́ТА** методик эш *(Рәсәй Федерацияһының белем биреү учреждениеларында уҡытыусыларҙың һәм тәрбиәселәрҙең өҙлөкһөҙ белем алыу системаһы бүлеге. Методик эш маҡсаты: уҡыусыларҙы уҡытыуҙа һәм тәрбиәләүҙә айырыуса рациональ методтарҙы һәм алымдарҙы үҙләштереү; уҡытыусының дөйөм педагогик кимәлен күтәреү, уҡытыу-тәрбиәүи эштәрҙе алып барыуға әҙерләү; тәжрибә уртаҡлашыу, актуаль педагогик тәжрибәне асыҡлау һәм пропагандалау).*

**МЕ́ТОДЫ ВОСПИТА́НИЯ** тәрбиә алымдары *(тәрбиәүи мәсьәләләрҙе сисеүҙә һәм үҙ-ара тәрбиәүи йоғонто яһауҙа дөйөм алымдарҙың, тәрбиәселәрҙең һәм тәрбиәләнеүселәрҙең үҙ-ара бәйле эшмәкәрлек алымдарының йыйылмаһы).*

**МЕ́ТОДЫ ИССЛЕ́ДОВАНИЯ ЛИ́ЧНОСТИ** шәхесте өйрәнеү алымдары *(кеше шәхесенең психологик асылын өйрәнеү алымдары һәм ысулдары йыйылмаһы. Улар үткәреү формаһы һәм шарттары буйынса төрлө: эксперименталь һәм эксперименталь булмаған (мәҫ., биография анализы һ.б.), лаборатор һәм клиник, тура һәм тура булмаған, өйрәнеү һәм тикшереү (психологик диагностика).*

**МИ́МИКА** [гр. *mimikos* — эйәреү, оҡшатыу] мимика *(психик хәлдең (бигерәк тә эске кисерештәрҙең) бит, йөҙ мускулдарының хәрәкәте аша сағылышы).*

**МИ́МИКА АДЕКВА́ТНАЯ** эскерһеҙ мимика *(хисте ысынлап (дөрөҫ) сағылдыра торған мимика).*

**МИ́МИКА НЕАДЕКВА́ТНАЯ** яһалма мимика *(ысын хисте йәшерергә ынтылған мимика).*

**МИННЕСО́ТСКИЙ МНОГОФА́ЗНЫЙ ЛИ́ЧНОСТНЫЙ ОПРО́СНИК (MMPI)** күп яҡлы Миннесота шәхсиәт һораулығы *(шәхестең индивидуаль үҙенсәлектәрен һәм психик хәлен тикшереүҙә ҡулланылған, шәхси һораулыҡ категорияһына ҡараған психологик диагностика алымы. 40-сы йылдар аҙағында Америка ғалимдары С. Хатеуэйем һәм Дж. Маккинли тарафынан шәхестең сиренә хас үҫеш синдромдарын клиник өйрәнеү алымы булараҡ эшләнелгән).*

**МИРОВОЗЗРЕ́НИЕ** донъяға ҡараш *(объектив донъя, кешенең ундағы урыны, уны уратҡан ысынбарлыҡҡа һәм үҙенә мөнәсәбәте хаҡында ҡараштар системаһы, шулай уҡ кешеләрҙең ошо ҡараштарға бәйле тормош позициялары, уларҙың ышанысы, идеалдары, танып белеү, эшмәкәрлек принциптары, ҡиммәттәрҙе баһалау йүнәлештәре).*

**МОЗГ** мейе *(кеше һәм хайуандарҙа нервы системаһының үҙәк бүлеге, психиканың төп ағзаһы).*

**МОНИТО́РИНГ ОБРАЗОВА́ТЕЛЬНЫЙ** белем мониторингыһы *(белем биреү маҡсаттарын, бурыстарын һәм уларҙы хәл итеү сараларын оптималь һайлау өсөн педагогик процестарҙың хәлен, үҫешен өҙлөкһөҙ фәнни нигеҙле диагностик-прогностик күҙәтеү барышы).*

**МОТИ́В** [фр. *motif* — этеү] мотив, сәбәп, нигеҙ *(1) субъекттың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү менән бәйле эшмәкәрлеккә йүнәлтеү; субъекттың әүҙемлеген көсәйтеүсе, уның йүнәлешен билдәләүсе эске һәм тышҡы шарттар йыйылмаһы; 2) нимәнелер үтәү өсөн эшмәкәрлек йүнәлешен һайлауға этәреүсе һәм билдәләүсе (матди йәки идеаль) предмет; 3) шәхес һайлаған эштең һәм ҡыланыштың нигеҙендә ятыусы сәбәп).*

**МОТИВА́ЦИЯ** мотивация *(организмдың әүҙемлеген барлыҡҡа килтереүсе һәм уның йүнәлешен билдәләүсе сәбәптәр).*

**МОТО́РНАЯ ПА́МЯТЬ** хәрәкәт хәтере *(хәрәкәтте, уның күләмен, амплитудаһын, тиҙлеген, темпын, эҙмә-эҙлелеген*

*хәтерләү, һаҡлау һәм яңынан ҡабатлау. Хәрәкәт хәтере эштә, уҡыуҙа, көнкүрештә, спортта оҫталыҡты, күнекмәләрҙе формалаштырыуҙа һәм эшләүҙә мөһим роль уйнай).*

**МУ́ЖЕСТВО** батырлыҡ, ҡыйыулыҡ (*ҡатмарлы, ҡурҡыныс мәлдә тәүәккәл, аҡыллы эш итеү һәләтендә сағылған шәхси сифат: ихтыярһыҙ ынтылыштарҙы тотоу, мөмкин булған ҡурҡыу, икеләнеү тойғоларын еңеү, маҡсатҡа ирешеү өсөн бөтә көстө туплай белеү. Ҡыйыулыҡтың юғары сағылышы — ҡаһарманлыҡ*).

**МУЗЕ́Й ШКО́ЛЬНЫЙ** мәктәп музейы (*мәктәптең уҡытыу-тәрбиә бурыстарына ярашлы тупланып, күргәҙмәгә ҡуйылған тарих, тәбиғәт һәм йәмғиәт ҡомартҡыларының йыйылмаһы*).

**МУЗЫКА́ЛЬНАЯ ПА́МЯТЬ** музыкаль хәтер (*музыкаль материалды таныу һәм ҡабатлау һәләте*).

**МУЗЫКА́ЛЬНОЕ ВОСПИТА́НИЕ** музыкаль тәрбиә (*балаларҙың музыкаль һәләттәрен маҡсатлы һәм даими үҫтереү, музыкаға эмоциялы ынтылыш, уның йөкмәткеһен аңлау һәм тәрән кисереү һәләте тәрбиәләү; эстетик тәрбиәнең бер өлөшө*).

**МУЗЫКА́ЛЬНОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** музыкаль белем (*музыка сәнғәте өлкәһендә — композиторҙар, музыка белгестәре, башҡарыусылар (йырсылар һәм инструменталистар, хор һәм оркестр дирижерҙары), төрлө музыкаль белемле педагогтар әҙерләү системаһы*).

**МУЛЯ́Ж УЧЕ́БНЫЙ** уҡыу-уҡытыу муляжы, өйрәтеү муляжы (*предметтың өс үлсәмле пластик һынын күҙ алдына килтергән (күберәге тәбиғәт объекттары), натураль ҙурлыҡтағы, уның формаһын, структураһын, төҫөн дөрөҫ итеп биргән күргәҙмә материал*).

**МУТИ́ЗМ** [лат. *mutus* — телһеҙ] мутизм (*тирәяҡтағыларҙың һөйләүен аңлап та, мейеләге һөйләү үҙәктәренең органик кәмселектәре булмауына ҡарамаҫтан, оҙаҡ ваҡыт һөйләшмәү*).

**МЫШЛЕ́НИЕ** фекерләү (*индивидтың аңында объектив ысынбарлыҡтың дөйөмләштерелгән һәм туранан-тура булмаған сағылышы, танып белеү эшмәкәрлеге процесы. Психология фәне фекерләүҙе, танып белеү эшмәкәрлеге булараҡ, дөйөмләштереү кимәленә, ҡулланылған алымдар характерына, уларҙың субъект өсөн яңылыҡ булыуына, уның әүҙемлегенә, ысынбарлыҡ менән фекерләүҙең тура килеүенә бәйле төрҙәргә бүлеп өйрәнә*).

# Н

**НАБЛЮДА́ТЕЛЬНОСТЬ** күҙәтеүсәнлек *(кешенең тирә-яҡтағы предметтарҙың төп, мөһим, үҙҙәренә генә хас, шул иҫәптән артыҡ күҙгә ташланмаған үҙенсәлектәрен дә күрә алыу һәләте).*

**НАБЛЮДЕ́НИЕ** күҙәтеү *(психологик тикшеренеүҙәрҙең төп эмпирик (тәжрибә) алымдарының береһе. Психик күренештәрҙең билдәле бер шарттарҙа үҙенсәлекле үҙгәрештәрен өйрәнеү, был күренештәрҙең мәғәнәһен табыу маҡсатында аңлы, системалы, маҡсатҡа йүнәлешле һәм планлы рәүештә ҡарау, тикшереү менән билдәләнә).*

**НАБЛЮДЕ́НИЕ ВЫ́БОРОЧНОЕ** һайлап күҙәтеү.

**НАБЛЮДЕ́НИЕ НАУ́ЧНОЕ** фәнни күҙәтеү.

**НА́ВЫК** күнекмә, таһыл, оҫол *(юғары үҙләштереү кимәле һәм даими ҡабатлау юлы менән формалашҡан оҫол; аңлы рәүештә бөртөкләп яйға һалыу, тикшереү кәрәкмәгәнлек менән ҡылыҡһырланған хәрәкәт, тәжрибә).*

**НА́ВЫКИ ДВИ́ГАТЕЛЬНЫЕ** хәрәкәт күнекмәләре.

**НА́ВЫКИ ОРИЕНТИРО́ВОЧНЫЕ** юҫыҡланыш күнекмәләре.

**НА́ВЫКИ ПРОФЕССИОНА́ЛЬНЫЕ** профессиональ күнекмәләр.

**НА́ВЫКИ РИСОВА́НИЯ** һүрәт төшөрөү күнекмәләре.

**НАВЯ́ЗЧИВЫЕ СОСТОЯ́НИЯ** бәйләнсек, йөҙәткес, баштан сыҡмай торған хәл *(кешенең ихтыярынан тыш аңында ауыр уйҙар, күҙаллауҙар барлыҡҡа килеп, уны ниндәйҙер буталсыҡ эш-хәрәкәткә йүнәлткән сәбәп).*

**НАГЛЯ́ДНОСТЬ В ОБУЧЕ́НИИ** уҡытыуҙағы күргәҙмәлелек, күргәҙмәле уҡытыу *(уҡыусыларҙа образлы күҙаллауҙар булдырыу, төшөнсәләр формалаштырыу, абстракт бәйләнештәрҙе, мөнәсәбәттәрҙе аңлатыу өсөн күргәҙмә материалдар ҡулланыу — дидактиканың мөһим положениеларының береһе).*

**НАГЛЯ́ДНЫЕ УЧЕ́БНЫЕ ПОСО́БИЯ** күргәҙмә уҡыу әсбаптары *(уҡытыу маҡсатында предметтарҙың, күренештәрҙең махсус булдырылған һүрәте йәки күләмле кәүҙәләнеше, етештереү һәм тәбиғәт объекттарының тәбиғи йәки яһалма ҡиәфәте).*

**НАДЕ́ЖДА** өмөт *(субъект тарафынан ниндәйҙер ваҡиғаларҙы ныҡ теләп көткәндә барлыҡҡа килгән һәм уның*

*киләсәктә реаль үтәлеү мөмкинлеген алдан һиҙеүҙе, ышаныс-ты белдергән тойғо).*

**НАДЁЖНОСТЬ ТЕ́СТА** тест ышаныслылығы *(тестың сифатында психологик үлсәүҙәрҙең дөрөҫлөгөн билдәләүсе критерийҙарҙың береһе).*

**НАДСОЗНА́ТЕЛЬНОЕ** аңдан юғарылыҡ, өҫтөнлөк *(ижади мәсьәләләрҙе хәл иткәндә шәхси аң, ихтыяр контроленә бирелмәгән психик әүҙемлек кимәле (ижади процестың юғары этабы)).*

**НАКАЗА́НИЕ** (уҡытыу һәм тәрбиә системаһында) яза, яза биреү *(хата ебәргән тәрбиәләнеүсегә йәки балалар коллективына тәьҫир итеү сараһы. Был осраҡта яза биреүҙең төп маҡсаты — тәрбиәләү).*

**НАМЕ́РЕНИЕ** ниәт *(күҙ алдында тотолған һөҙөмтәгә ирешеү маҡсатында алға ҡуйылған теләк, эш-хәрәкәтте билдәле программаға ярашлы тамамлауға аңлы ынтылыш).*

**НАПРА́ВЛЕННОСТЬ ЛИ́ЧНОСТИ** шәхестең тотҡан йүнәлеше *(шәхестең эшмәкәрлеген билдәләүсе тотороҡло мотивтар йыйылмаһы. Шәхестең тотҡан йүнәлеше уның донъяға ҡарашы сағылған ҡыҙыҡһыныуҙары, ынтылыштары, мауығыуҙары, инаныуҙары, идеалдары менән ҡылыҡһырлана).*

**НАПРЯЖЁННОСТЬ ПСИХИ́ЧЕСКАЯ** психик көсөргәнешлелек *(психик көсөргәнешлелек дөйөм дискомфорт, хафа, ҡайһы ваҡыт ҡурҡыу ҙа тыуҙыра, әммә, хафанан айырмалы рәүештә, ситуацияны ҡулға алыуға, унда нисек эш итеүгә әҙерлекте лә, ҡаршылыҡлы мөнәсәбәттәрҙән ҡотолоу өсөн талап ителгән ҙур көс һәм иғтибарҙы ла үҙ эсенә алған тойғоларҙы берләштерә).*

**НАРО́ДНАЯ ПЕДАГО́ГИКА** халыҡ педагогикаһы *(тәрбиә маҡсаттарында һәм бурыстарында халыҡта өҫтөнлөк алған ҡараштарҙы сағылдырған, халыҡтың быуаттар буйына йыйылған белемен, һәләтен, тәрбиәләү һәм уҡытыу алымдарын ҡулланған тәжрибә).*

**НАРО́ДНОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** халыҡ мәғарифы *(илдәге, өлкәләге, ҡалалағы, райондағы бөтә халыҡты хеҙмәтләндереүгә тәғәйенләнгән белем-тәрбиә биреү учреждениелары).*

**НАРО́ДНЫЕ ЧТЕ́НИЯ** халыҡ уҡыуҙары *(революцияға тиклемге Рәсәйҙә мәктәптән тыш дөйөм, профессиональ һәм ғәмәли белемдең башланғыс нигеҙҙәрен халыҡҡа аңлатыу маҡсатында ойошторолған уҡыу-уҡытыу системаһының бер төрө).*

**НАСТО́ЙЧИВОСТЬ** **ныҡышмалылыҡ, ныҡышлыҡ** *(ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға ҡарамай, ҡуйылған маҡсатҡа ирешеүгә йүнәлтелгән ихтыяр үҙенсәлеге).*

**НАСТРОЕ́НИЕ** **кәйеф (күңел)** *(индивид тормошондағы ыңғай йәки кире тойғолар менән билдәләнгән психик хәл. Айырым хәлдәргә бәйле эмоцияларҙан һәм аффекттарҙан айырмалы рәүештә, кәйеф теге йәки был ваҡиғаларҙың туранан-тура нәтижәһенә түгел, ә кешенең дөйөм йәшәү пландарында, мәнфәғәттәрендә, өмөттәрендә уларҙың әһәмиәтенә яуап булып тора).*

**НАСТРОЕ́НИЕ АПАТИ́ЧНОЕ** **күңел төшөнкөлөгө.**

**НАСТРОЕ́НИЕ БО́ДРОЕ** **күтәренке кәйеф.**

**НАСТРОЕ́НИЕ ПЕССИМИСТИ́ЧЕСКОЕ** **пессимистик (өмөтһөҙ) кәйеф (күңел).**

**НАСТРОЕ́НИЕ ОБЩЕ́СТВЕННОЕ** **йәмғәтселек кәйефе** *(билдәле бер ваҡыт дәүерендә теге йәки был социаль төркөмдәрҙә өҫтөнлөк иткән тойғолар һәм фекерҙәр сағылышы).*

**НАУЧЕ́НИЕ** **өйрәтеү** *(индивидуаль тәжрибә булдырыу процесы һәм нәтижәһе. «Өйрәтеү» төшөнсәһе беренсе тапҡыр зоопсихологияла Америка психологы Э. Л. Трондайка һ.б. хеҙмәттәрендә ҡулланыла).*

**НАУ́ЧНОСТЬ ОБУЧЕ́НИЯ** **уҡыу-уҡытыуҙың фәннилеге** *(уҡыусылар тарафынан фәнни белемде үҙләштереүҙе тәьмин итеүсе, донъяға ҡараштарын формалаштырыуға булышлыҡ итеүсе мөһим дидактик принциптарҙың береһе).*

**НАУ́ЧНО-ПРАКТИ́ЧЕСКАЯ КОНФЕРЕ́НЦИЯ** **фәнни-ғәмәли конференция** *(халыҡ мәғарифы хеҙмәткәрҙәренең алдынғы педагогик тәжрибәһен дөйөмләштереү һәм таратыуҙың бер формаһы).*

**НАЧА́ЛЬНАЯ ШКО́ЛА** **башланғыс мәктәп** *(кесе мәктәп йәшендәге балаларға башланғыс дөйөм белем биреүсе уҡытыу-тәрбиә учреждениеһы).*

**НЕВРО́ЗЫ** [гр. *neuron* — нервы] **невроз** *(үҙенең тәбиғәте буйынса психогенлы, нигеҙендә шәхес һәм ысынбарлыҡтың шәхес өсөн әһәмиәтле яҡтары араһындағы ҡаршылыҡтарҙың уңышлы хәл ителмәүе менән бәйле барлыҡҡа килгән ауыр кисерештәр, ҡәнәғәтләндерелмәгән талаптар, тормошҡа ашмаған маҡсаттар, бер нәмә менән дә алмаштырып булмаған юғалтыуҙар ятҡан нервы-психик*

*бозолоуҙарҙың иң таралған төркөмө; функциональ нервы ауырыуы).*

**НЕВРОТИ́ЗМ** невротизм *(эмоциональ тотороҡһоҙлоҡ, хәүеф, үҙ-үҙеңде хөрмәтләүҙең түбән булыуы, күңел бушлығы менән билдәләнгән хәл. Невротизмды невроз менән бутарға ярамай, сөнки невротик симптомдар һау кешелә лә булырға мөмкин. Невротизм, ҡағиҙә булараҡ, махсус шкалалар йәки шәхси һораулыҡтар ярҙамында билдәләнә).*

**НЕГАТИВИ́ЗМ** [лат. *negatio* — кире ҡағыу] **негативизм, кирелек, тиҫкәрелек** *(субъекттың башҡа кешеләрҙең һәм социаль төркөмдәрҙең талаптарына, өмөттәренә аңлы рәүештә ҡаршы эшләнгән эштәрендә сағылған нигеҙһеҙ ҡылығы).*

**НЕГАТИВИ́ЗМ УСТО́ЙЧИВЫЙ** тотороҡло тиҫкәрелек.

**НЕГАТИВИ́ЗМ ЭПИЗОДИ́ЧЕСКИЙ** ваҡытлыса кирелек.

**НЕЙРО́Н** [гр. *neuron* — нервы] **нейрон** *(нервы системаһының төп структура берәмеге булып торған нервы күҙәнәге, уның бөтә үҫентеләре).*

**НЕЙРОПСИХОЛО́ГИЯ** нейропсихология *(психология фәнендә психология, медицина (неврология, нейрохирургия) һәм физиология фәндәре киҫелешендә барлыҡҡа килгән,юғары психик функцияларҙы мейенең билдәле бер өлөшө зарарланыуы материалдарында мейе эшмәкәрлегенә бәйле рәүештә өйрәнә торған тармаҡ).*

**НЕ́НАВИСТЬ** нәфрәт *(кешенең үҙ талаптарына, инаныуҙарына, ихтыяжына, донъяға ҡарашына ҡаршы килеүсе күренештәргә йүнәлтелгән хаслыҡ, көслө дошманлыҡ тойғоһо).*

**НЕ́РВНАЯ СИСТЕ́МА** [гр. *neuron* — нервы, *systema* — өлөштәрҙән торған бөтөн] **нервы системаһы** *(кешелә һәм хайуандарҙа организмға тәьҫир итеүсе ҡуҙғытҡыстарҙы ҡабул итеп, был ваҡытта барлыҡҡа килгән ярһыу импульстарына йоғонто яһап, яуап реакцияларын формалаштырыуға булышлыҡ иткән нервылар йыйылмаһы. Нервы системаһы организмдың бер бөтөн булараҡ эшләүен тәьмин итә. Нервы системаһы үҙәк, периферик һәм вегетатив нервыларҙы үҙ эсенә ала).*

**НО́РМЫ ГРУППОВЫ́Е** [лат. *norma* — өлгө, теүәл күрһәтмә] **төркөм нормалары** *(төркөм ағзаларының тәртибен, аралашыу һәм бәйләнешен көйләүҙә мөһим роль уйнаған ҡағиҙәләр һәм талаптар йыйылмаһы).*

**НРА́ВСТВЕННОЕ ВОСПИТА́НИЕ** әхлаҡи тәрбиә *(әхлаҡи аңды маҡсатҡа ярашлы итеп формалаштырыу, әхлаҡи тойғоларҙы үҫтереү, әхлаҡҡа мөнәсәбәтле, яҡшы тәртип ғәҙәттәрен һәм ҡылыҡтарын тәрбиәләү).*

**НРА́ВСТВЕННОЕ ПОВЕДЕ́НИЕ** әхлаҡи тәртип *(билдәле йәмғиәттә кешеләрҙең мөнәсәбәтен, үҙ-үҙен тотошон көйләүсе әхлаҡи нормаларға һәм принциптарға бәйле тәртип).*

**НРА́ВСТВЕННЫЕ ЦЕ́ННОСТИ** әхлаҡи ҡиммәттәр *(социаль төркөмдәрҙә, индивидта йәмғиәт күренештәрен, кешеләрҙең эштәрен һәм ҡылыҡтарын баһаларға мөмкинлек биргән ориентирҙар, уларҙың әхлаҡи яҡтан яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ тураһында күҙаллауҙары).*

# О

**ОБОБЩЕ́НИЕ** дөйөмләштереү, йомғаҡлау *(донъяны танып белеүҙә ысынбарлыҡтағы күренештәрҙең һәм предметтарҙың дөйөм, мөһим үҙенсәлектәрен уй менән айырып алып, бергә йыйып, дөйөмләштереп, уртаҡ һөҙөмтә сығарыуҙан ғибәрәт булған бер алым).*

**О́БРАЗ** образ *(даирә киңлеген, субъекттың үҙен, башҡа кешеләрҙе һәм ваҡиғаларҙың ваҡыт арауығындағы эҙмә-эҙлелеген эстә алған донъяның йәки уның өлөшөнөң аңда субъектив сағылышы. Донъяны танып белеүҙә марксистик ҡараш буйынса, образ — объектив ысынбарлыҡтың сағылыш формаһы).*

**О́БРАЗ МИ́РА** донъя образы *(кешенең донъя, ундағы кешеләр, үҙе һәм үҙенең эшмәкәрлеге тураһында төрлө яҡлы һәм тулы кимәлдәге күҙаллауҙар системаһы).*

**О́БРАЗНАЯ ПА́МЯТЬ** образлы хәтерләү, хәтерҙең образлы тибы *(хәтерҙең ниндәйҙер күргәҙмә эстәлекте — предмет һәм күренеш образдарын, уларҙың ниндәйҙер бер конкрет үҙенсәлеген күҙ алдына килтереүҙе, иҫкә төшөрөүҙе аңлатҡан төрө).*

**ОБРАЗОВА́НИЕ** белем, мәғариф, белем биреү *(кешене тормошҡа, хеҙмәткә әҙерләү өсөн системалы рәүештә белем, оҫталыҡ күнекмәләрен үҙләштереү процесы һәм һөҙөмтәһе).*

**ОБРАЗОВА́НИЕ ВСЕСТОРО́ННЕЕ** төрлө яҡлы белем.

**ОБРАЗОВА́НИЕ ОБЯЗА́ТЕЛЬНОЕ** мәжбүри белем.

**ОБРАЗОВА́НИЕ ПОЛИТЕХНИ́ЧЕСКОЕ** политехник белем *(хәҙерге етештереүҙең фәнни нигеҙе тураһындағы белем системаһын үҙләштереү процесы һәм һөҙөмтәһе, ҡул һәм механикалаштырылған хеҙмәт ҡорамалдары менән эшләү оҫталығы булдырыу, техник һәләт, хеҙмәткә ижади мөнәсәбәт тәрбиәләү).*

**ОБРАЗОВА́НИЕ ПРОФЕССИОНА́ЛЬНОЕ** профессиональ белем.

**ОБРАЗОВА́НИЕ СРЕ́ДНЕЕ** урта белем.

**ОБРАЗОВА́НИЕ СРЕДНЕ-СПЕЦИА́ЛЬНОЕ** махсус урта белем.

**ОБУЧА́ЕМОСТЬ** үҙләштереүсәнлек, үҙләштереү һәләте *(уҡыу процесында һәр индивидтың белем, һәләт, күнекмәләрҙең асылына төшөнөп, зиһененә ҡабул итә алыу, үҙләштереү тиҙлегенең һәм сифатының индивидуаль күрһәткестәре).*

**ОБУЧЕ́НИЕ** уҡытыу, өйрәтеү *(кешенең үҙлөкһөҙ белем алыуын тормошҡа ашырыу өсөн ижтимағи-тарихи тәжрибәне билдәле бер маҡсатҡа йүнәлешле тапшырыу процесы. Белем, һәләт һәм күнекмәләр формалаштырыуҙы ойоштороу).*

**ОБУЧЕ́НИЕ ВИТАГЕ́ННОЕ** витаген уҡытыу (өйрәтеү) *(дидактикала шәхес хәтерендәге тормош тәжрибәһен туплаған мәғлүмәтте белем биреү маҡсатында киләсәктә файҙаланыу өсөн актуалләштереүгә ҡоролған инновацион йүнәлеш).*

**ОБУЧЕ́НИЕ ЗАО́ЧНОЕ** ситтән тороп уҡыу.

**ОБУЧЕ́НИЕ НАГЛЯ́ДНОЕ** күргәҙмәле уҡытыу.

**ОБУЧЕ́НИЕ ПРОБЛЕ́МНОЕ** проблемалы уҡытыу.

**ОБУЧЕ́НИЕ РАЗВИВА́ЮЩЕЕ** (фекерләүҙе) үҫтереүсе уҡытыу.

**ОБУЧЕ́НИЕ ТРУДОВО́Е** хеҙмәткә өйрәтеү.

**О́БЩАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** дөйөм психология *(дөйөм психологик ҡанундарҙы, психологияның теоретик принциптарын, методтарын, уның төп төшөнсәләрен һәм категорияларын төҙөлөшөн асыҡлаған теоретик һәм эксперименталь тикшеренеүҙәр. Психология фәненең бөтә тармаҡтары үҫешендә дөйөм психология фундаменталь нигеҙ булып тора).*

**О́БЩЕЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** дөйөм белем *(кешегә һәр яҡлап үҫешеү өсөн кәрәк булған белем, оҫталыҡ, күнекмәләр менән тәьмин иткән мәғрифәт).*

**ОБЩЕ́НИЕ** аралашыу *(1) уртаҡ эшмәкәрлек ваҡытында кешеләр араһында мәғлүмәттәр алмашыу, башҡа кешене*

*аңлау, төшөнөү, берҙәм стратегия, контакттар булдырыу һәм киңәйтеү ихтыяжы арҡаһында барлыҡҡа килгән ҡатмарлы һәм күп яҡлы процесс; 2) субъекттарҙың уртаҡ эшмәкәрлеге арҡаһында барлыҡҡа килгән һәм партнерҙың хәлен, тәртибен, шәхси сифаттарын үҙгәртеүгә йүнәлтелгән үҙ-ара бәйләнеше).*

**ОБЩЕ́НИЕ ФАТИ́ЧЕСКОЕ** [лат. *fatuus* — йүләр] **фатик (мәғәнәһеҙ)** аралашыу *(коммуникатив сараларҙы фәҡәт аралашыу процесын дауам иттереү маҡсатында ғына файҙаланған маҡсатһыҙ, эстәлекһеҙ аралашыу).*

**ОБЩЕ́СТВЕННОЕ МНЕ́НИЕ йәмәғәтселек фекере** *(социаль төркөмдәрҙең дөйөм мәнфәғәткә ҡағылған социаль тормош проблемаларына йәки күренештәренә ҡарата билдәле бер фекерҙәр, идеялар һәм күҙаллауҙар формаһында сағылған мөнәсәбәте).*

**ОБЪЕ́КТ** [лат. *objectum* — предмет] **объект** *(субъекттың ғәмәли һәм танып белеү эшмәкәрлеге йүнәлтелгән ысынбарлыҡтағы нәмә).*

**ОБЪЯСНИ́ТЕЛЬНОЕ ЧТЕ́НИЕ аңлатмалы уҡыу** *(башланғыс синыф уҡыусыларына аңлы, дөрөҫ, тасуири һәм йүгерек уҡыу, уларҙың фекерләү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү маҡсатын ҡуйған уҡытыу алымы).*

**ОБЫ́ДЕННОЕ СОЗНА́НИЕ ғәҙәти аң** *(социаль төркөмдә өҫтөнлөк иткән кешеләрҙең туранан-тура көндәлек тәжрибәһенә нигеҙләнгән күҙаллау, белем, йүнәлеш һәм стереотиптар йыйылмаһы).*

**ОДАРЁННЫЕ ДЕ́ТИ һәләтле балалар** *(дөйөм йәки махсус музыкаға, һүрәт төшөрөүгә, техникаға һ. б.) һәләтлелек күрһәткән балалар).*

**ОДИНО́ЧЕСТВО яңғыҙлыҡ** *(кешенең кешеләр менән аралашмауҙан үҙен ҡыйырһытылған, ситләтелгән итеп тойоуға сәбәп булған шарттарҙағы эмоциональ хәленә йогонто яһаусы психоген фактор).*

**ОДНОКОМПЛЕ́КТНАЯ ШКО́ЛА бер комплектлы мәктәп** *(уҡыу-уҡытыу эштәре фәҡәт бер уҡытыусы тарафынан ғына алып барылған башланғыс мәктәп).*

**ОЛИГОФРЕНОПЕДАГО́ГИКА** [гр. *oligos* — бәләкәй, әҙ, *phrēn* — аҡыл] **олигофренопедагогика** *(педагогика фәнендә аҡылға зәғиф балаларҙы тәрбиәләү, уҡытыу, уларҙың үҫешендәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү юлдарын өйрәнеүсе тармаҡ).*

**ÓНО (ИД)** ашҡын (ярһыу) хис, мауыҡ, «оно» *(З. Фрейд теорияһындағы шәхес структураһы компоненттарының береһе. Субъекттың ысынбарлыҡҡа ҡарамай, кисектермәй ҡәнәғәтләндереүгә ынтылған, аңһыҙ рәүештә, инстинкт буйынса барлыҡҡа килгән йә сексуаль, йә агрессив теләктәрен сағылдыра. «Óно» бер ниндәй әхлаҡ, яҡшылыҡ, яуызлыҡ баһаларын танымай).*

**ОНТОГЕНÉЗ** [гр. *ontos* — ысын, *genesis* — тыуыу, барлыҡҡа килеү] **онтогенез** *(организмдың индивидуаль үҫеш процесы. Психологияла онтогенез — бала саҡта индивид психикаһының төп структуралары формалашыуы. Онтогенезды өйрәнеү балалар психологияһы фәненең төп бурысы).*

**ОПÉКА И ПОПЕЧИ́ТЕЛЬСТВО** **опека һәм попечителлек, ҡарау һәм тәрбиәләү** *(ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балиғ булмаған балаларҙы, шулай уҡ ауырыу йәки ҡартлыҡ һөҙөмтәһендә ярҙамға мохтаж кешеләрҙе ҡарау, тәрбиәләү өсөн билдәләнгән саралар системаһы).*

**ОПРÓС УЧА́ЩИХСЯ** **уҡыусыларҙан һорау** *(үткән материалдарҙы нығытыу һәм яңы белемде ҡабул итергә әҙерләү маҡсатында уҡыусыларҙың белем кимәлен телдән тикшереү формаһы).*

**ОПРÓСНИКИ ЛИ́ЧНОСТНЫЕ** **шәхсиәт һораулығы** *(шәхестең айырым сифаттарын, ҡылыҡтарын өйрәнеү һәм баһалау буйынса психодиагностик методтар йыйылмаһы. Методиканың һәр береһе һөйләмдәр йыйылмаһынан торған, стандартлаштырылған анкетанан ғибәрәт. Уларҙың йөкмәткеһе менән һыналыусы (тикшерелеүсе) ризалашырға йәки ризалашмаҫҡа мөмкин).*

**ÓПЫТ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКИЙ** **педагогик тәжрибә** *(практик уҡытыу-тәрбиә эштәре барышында уҡытыусы тарафынан тупланған белем, оҫталыҡ һәм хеҙмәт күнекмәләре).*

**ОТБÓР ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКИЙ** **психологик һайлау** *(психологик һәм психофизиологик тикшереүҙәр һөҙөмтәһен иҫәпкә алып, кандидаттарҙың уҡыу йәки профессиональ эшмәкәрлеккә яраҡлы булыуы тураһында ҡарар ҡабул итеү).*

**ОТВÉТСТВЕННОСТЬ** **яуаплылыҡ** *(субъект эшмәкәрлегенә йәмғиәттә ҡабул ителгән нормалар һәм ҡағиҙәләрҙе үтәү йәһәтенән үткәрелгән төрлө формалағы контроль. Башҡарған эштәре, уның үтәлеше, ҡылған ҡылыҡтары өсөн субъекттың яуап тотоу бурысы).*

**ОТКЛОНЯ́ЮЩЕЕСЯ ПОВЕДЕ́НИЕ** (норманан) тайпылышлы тәртип *(йәмғиәттә ҡабул ителгән хоҡуҡи йәки әхлаҡи нормаларға ҡаршы килгән ҡыланыш һәм айырым ҡылыҡтар системаһы).*

**ОТКРЫ́ТЫЙ УРО́К** асыҡ дәрес *(башҡа уҡытыусылар һәм саҡырылған кешеләр ҡатнашҡан дәрес).*

**ОТЧУЖДЕ́НИЕ** ситләшеү *(субъекттың донъя менән тормош мөнәсәбәттәрендә башҡа индивидтар һәм билдәле бер нормалар, күрһәтмәләр, ҡиммәттәр йөрөтөүсе социаль төркөмдәр уға ҡаршы (оҡшамауҙан күрә алмауға, дошманлыҡҡа тиклем) тигән уйҙың барлыҡҡа килеүе. Был субъекттың айырымлыҡ, яңғыҙлыҡ, ҡыйырһытылғанлыҡ, «Мин»ен юғалтыу кеүек кисерештәрендә сағыла. Психологияла ситләшеү төшөнсәһе беренсе тапҡыр З. Фрейд тарафынан шәхестең үҙенең ысын тәбиғәте өсөн ят һәм дошманлыҡлы мәҙәниәттә норманан тайпылып үҫешеүен аңлатыу өсөн файҙаланыла).*

**ОЦЕ́НКА УСПЕВА́ЕМОСТИ УЧА́ЩИХСЯ** уҡыусыларҙың өлгәшен баһалау *(мәктәп программаһы буйынса ҡуйылған талаптарға ярашлы уҡыусылар тарафынан белем һәм күнекмәләрҙең үҙләштерелеү кимәлен билдәләү).*

**ОЩУЩЕ́НИЕ** тойоу *(объектив ысынбарлыҡтағы нәмәләрҙең үҙсәнлектәрен һиҙеү ағзалары менән ҡабул итеп белеү).*

**ОЩУЩЕ́НИЕ БОЛЕВО́Е** ауыртыуҙы тойоу.

**ОЩУЩЕ́НИЕ ВКУСОВО́Е** тәм тойоу.

**ОЩУЩЕ́НИЕ ГОЛОВОКРУЖЕ́НИЯ** баш әйләнеү тойғоһо.

**ОЩУЩЕ́НИЕ ОБОНЯ́ТЕЛЬНОЕ** еҫ һиҙеү тойғоһо.

**ОЩУЩЕ́НИЕ ОСЯЗА́ТЕЛЬНОЕ** тән менән тойоу, тактиль тойғо.

# П

**ПА́МЯТЬ** хәтер *(булған тәжрибәне ныҡытыуҙан, һаҡлауҙан һәм һуңынан иҫкә төшөрөүҙән ғибәрәт булған психик сағылдырыу формаһы).*

**ПА́МЯТЬ ДОЛГОВРЕ́МЕННАЯ** оҙайлы хәтер *(белем, оҫталыҡ, күнекмәләрҙе оҙаҡ (сәғәт, йыл, унар йыл) һаҡлап*

*ҡалыуҙы тәьмин иткән һәм һаҡланған мәғлүмәттең ҙур күләме менән билдәләнгән хәтер подсистемаһы).*

**ПА́МЯТЬ КРАТКОВРЕ́МЕННАЯ** **ҡыҫҡа ваҡытлы хәтер** *(һиҙеү ағзалары аша һәм оҙайлы хәтерҙән алған мәғлүмәттәрҙе тиҙ генә тотоп алыуҙы, үҙгәртеүҙе тәьмин иткән хәтер подсистемаһы).*

**ПА́МЯТЬ СЕНСО́РНАЯ** [лат. *sensus* — тойғо, тойоу] **тойоу хәтере** *(һиҙеү ағзалары тойоуы аша үҙләштерелгән мәғлүмәттәр нәтижәһен әҙ генә ваҡыт (ғәҙәттә, 1 секундтан да әҙ) эсендә тотоп алыуҙы тәьмин иткән, гипотезаға (фаразға) нигеҙләнгән хәтер подсистемаһы).*

**ПА́НИКА МА́ССОВАЯ** [гр. *panikon* — ығы-зығылы ҡурҡыныс] **күмәк кеше паникаһы** *(төркөм тәртибенең бер төрө. Ысынбарлыҡтағы йәки фараз ителгән хәүеф-хәтәрҙән күмәкләп, бер-береңә йоғонто яһау арҡаһында тағы ла нығыраҡ ҡурҡыу, хәлде аҡыл менән баһалау, ихтыяр көсөн туплау һәм бергәләп ҡаршы тороуҙы ойоштороу һәләтенең юҡҡа сығыуы менән билдәләнгән психик хәл).*

**ПАНТОМИ́МИКА** **пантомимика** *(хәрәкәттәр, мимика аша эске кисерештәрҙең тышҡы сағылышы).*

**ПАРАМНЕ́ЗИЯ** [гр. *para* — тирәһе, самаһы, *mnesia* — хәтерләү] **парамнезия, хәтер алдауы** *(ғәҙәттә, ошо мәлдәге хәлде ҡасандыр кисергән, таныш булған кеүек күренгән хәтер тарҡалыуын парамнезия тип әйтәләр).*

**ПАРАПСИХОЛО́ГИЯ** **парапсихология** *(аңлатмалары фәнни яҡтан нигеҙләнмәгән, ғәҙәттә, экстрасенсор тойғо тип йөрөтөлгән, һиҙеү ағзаларының функцияһы менән бәйләнмәгән (телепатия, күрәҙәселек) психик күренештәргә ҡараған гипотезаларҙы һәм күҙаллауҙарҙы, донъяны һүҙ, теләк, уй менән үҙгәртеү ынтылыштарын өйрәнеүсе психологик ағым).*

**ПАТОПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *pathos* — ғазап, ауырыу] **патопсихология** *(медицина психологияһында психик эшмәкәрлектең һәм шәхес үҫәнлектәренең боҙолоу, тарҡалыу ҡанундарын тикшерә, психиканың норманан тайпылыштарын өйрәнә торған бүлек).*

**ПЕДАГО́Г** [гр. *paidagogos* — *paidos* — бала, *ago* — тәрбиәләйем] **педагог** *(1) уҡытыу һәм тәрбиә эштәре алып барыусы кеше; 2) педагогика проблемаларын фән булараҡ өйрәнеүсе ғилми хеҙмәткәр).*

**ПЕДАГО́ГИКА** [гр. *paidagogike*] **педагогика** *(шәхес формалаштырыу буйынса маҡсатҡа йүнәлешле, системалы*

*рәүештә махсус ойошторолған эшмәкәрлек; уҡытыу, тәрбиәнең йөкмәткеһе, формаһы һәм алымдары тураһындағы фән).*

**ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ ПРА́КТИКА** педагогик практика *(студенттарға педагогик эшмәкәрлектә педагогика, психология һәм башҡа фәндәрҙе өйрәнеүҙән алынған фәнни-теоретик белемде, ғәмәли күнекмәләрҙе ижади ҡулланырға өйрәтеү маҡсатында ойошторолған уҡыу процесының өлөшө).*

**ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** педагогик психология *(психологияла уҡытыу һәм тәрбиәләүҙәге психологик проблемаларҙы өйрәнә торған тармаҡ).*

**ПЕДАГОГИ́ЧЕСКИЙ СОВЕ́Т** педагогтар советы *(мәктәп етәкселегенең коллектив органы).*

**ПЕДАГОГИ́ЧЕСКОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** педагогик белем *(политехник мәктәптәр, профессиональ-техник һәм махсус урта уҡыу йорттары өсөн уҡытыу-тәрбиә эше буйынса педагогик кадрҙар әҙерләү. Педагогик белем — уҡытыу-тәрбиә эштәрен алып барыуға мөмкинлек биргән дөйөм теоретик педагогика, махсус белем һәм ғәмәли күнекмәләр йыйылмаһы).*

**ПЕРЕВОСПИТА́НИЕ** яңынан тәрбиәләү *(педагогтың дөрөҫ формалашмаған шәхесте үҙгәртеүгә, йәмғиәт талаптарына, нормаларына ҡаршы килгән сифаттарҙы төҙәтеүгә йүнәлтелгән тәрбиәүи йоғонтолар системаһы).*

**ПЕРЕЖИВА́НИЕ** *(психологияла)* кисереш *(1) субъект тарафынан кисерелгән эмоциональ хәл һәм үҙ тормош ваҡиғаһы булараҡ ҡабул ителеп, туранан-тура уның аңында сағылған ысынбарлыҡ күренеше; 2) шәхескә үҙ тормошондағы хәл-ваҡиғаларҙы төшөнөргә, үҙ эшмәкәрлегенең маҡсатын, сәбәбен билдәләргә булышлыҡ иткән ынтылыш, теләктәр; 3) субъект тарафынан уның тормошондағы төп маҡсаттарға өлгәшә алмағанда, идеалдар һәм ҡиммәттәр емерелгәндә барлыҡҡа килгән, уны йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйланырға мәжбүр иткән, психологик донъяһын үҙгәртеүгә ҡоролған әүҙемлек формаһы).*

**ПЕРСОНАЛИЗА́ЦИЯ** [лат. *persona* — шәхес] шәхесләштереү *(субъекттың башҡа кешеләр эшмәкәрлегендә идеаль итеп яҡтыртылыуы һөҙөмтәһендә йәмғиәт тормошонда шәхес булараҡ сығыш яһарға мөмкинлек алыу процесы).*

**ПЕРЦЕПТИ́ВНЫЕ ДЕ́ЙСТВИЯ** перцептив хәрәкәттәр *(кешелә үҙләштереү, ҡабул итеү процесының структур*

*бирәмектәре. Һиҙеү органдары аша үҙләштерерлек хәлдәрҙең ниндәйҙер бер яғын (аспектын) аңлы рәүештә айырып алырға, шулай уҡ донъя әйберҙәренә һәм эшмәкәрлек процестарына тура килгән образдар тыуҙырырлыҡ итеп, сенсор мәғлүмәттәрҙе үҙгәртергә мөмкинлек бирә).*

**ПЕРЦЕ́ПЦИЯ** [лат. *perceptio* — восприятие] *ҡара:* **ВОСПРИЯ́ТИЕ.**

**ПЕРЦЕ́ПЦИЯ СОЦИА́ЛЬНАЯ** [лат. *perceptio* — ҡабул итеү, *socialis* — йәмғиәт, ижтимағи] **социаль перцепция, социаль һиҙемләү (ҡабул итеү)** *(кешенең социаль объекттарҙы (башҡа кешеләрҙе, үҙҙәрен, төркөмдәрҙе, социаль берлек һ. б.) ҡабул итеүе, аңлауы һәм баһалауы).*

**ПЛАН УЧЕ́БНЫЙ** уҡыу планы *(билдәле уҡыу йортонда өйрәнелгән предметтар составын, һәр предметҡа аҙнаға, йылға бүленгән ваҡытты һәм уларҙың уҡыу йылдарына бүленешен, ошоға бәйле — уҡыу йылы структураһын билдәләүсе документ).*

**ПОВЕДЕ́НИЕ** тәртип, үҙеңде тотоу *(тере йән эйәләренең уларға хас булған тышҡы (хәрәкәт) һәм эске (психик) әүҙемлек аша тирә-яҡ мөхит менән бәйләнеше).*

**ПОВЕДЕ́НИЕ АГРЕССИ́ВНОЕ** үҙеңде агрессив тотоу *(кеше эш-хәрәкәтенең көс өҫтөнлөгөн күрһәтеү йәки субъекттың кешегә йә кешеләр төркөмөнә зарар килтереү маҡсатында көс ҡулланыуы менән ҡылыҡһырланған специфик формаһы).*

**ПОВЕДЕ́НИЕ ДЕВИА́НТНОЕ** [лат. *deviato* — тайпылыу] *ҡара:* **ОТКЛОНЯ́ЮЩЕЕСЯ ПОВЕДЕ́НИЕ.**

**ПОДВИ́ЖНОСТЬ** хәрәкәтсәнлек *(нервы системаһының тирә-яҡ мөхит үҙгәрешенә тиҙ яуап биреү һәләте).*

**ПОДРАЖА́НИЕ** оҡшатыу *(кешенең йәки берәй нәмәнең ниндәйҙер яғына эйәреп, шуға тап килтерергә тырышыу).*

**ПОДРОСТКО́ВЫЙ ВО́ЗРАСТ** (отро́чество) үҫмерлек (осоро) *(балалыҡтан үҫмерлеккә күсеү йылдарына тура килгән онтогенез осоро (10-11 йәштән — 15 йәшкә тиклем).*

**ПОДСОЗНА́НИЕ** *ҡара:* **БЕССОЗНА́ТЕЛЬНОЕ**

**ПОЗИ́ЦИЯ** [лат. *positio*] позиция *(1) ысынбарлыҡтың билдәле яҡтарына кешенең үҙ-үҙен тотошонда, ҡылығында сағылған ныҡлы мөнәсәбәттәр системаһы; 2) индивидтың төркөм эсендәге урынын билдәләүҙә берҙәм, мөмкин тиклем дөйөмләштерелгән фекер).*

**ПОЗИ́ЦИЯ СОЦИА́ЛЬНАЯ** социаль позиция *(1) индивидтың йәки төркөмдөң йәмғиәттәге мөнәсәбәттәр систе-*

*маһында тотҡан урыны. Ул тәртип стилендәге үҙенсәлекле сифаттар һәм үҙ-үҙеңде тотоуҙы тәртипкә һалыу, сикләүҙәр менән билдәләнә; синоним төшөнсә — статус; 2) шәхестең үҙ йәшәү эшмәкәрлеге шарттары тураһында референт төркөм алдында яҡланған, тормошҡа ашырылған күҙаллауҙары, йүнәлештәре, ҡараштары).*

**ПОЛ** енес *(1) биологик — бер төрлө заттың ҡапма-ҡаршы сифаттар йыйылмаһы; 2) ижтимағи — индивидҡа шәхси, ижтимағи һәм хоҡуҡи яҡтан ир йәки ҡатын статусы биргән тән, репродукция, ижтимағи-мәҙәни һәм үҙ-үҙен тотоу ҡылыҡһырламалары йыйылмаһы).*

**ПО́ЛЕ** *(психологияла)* **урата, уратылыш, уратым** *(субъект кисергән һәм уның әүҙемлеген тыуҙырған актуаль («ошо урында» һәм «ошо мәлдә» әһәмиәтле) этәргестәр йыйылмаһы; теге йәки был конкрет ситуацияла субъект ҡабул иткән йүнәлешкә бәйле уның үҙ-үҙен тотошон нигеҙләй).*

**ПОЛЕВО́Е ИССЛЕ́ДОВАНИЕ** **уратала тикшереү** *(кешеләр коллективын — билдәле бер социаль шарттарҙа, хайуандар көтөүен тәбиғи йәшәү шарттарында тикшереү).*

**ПОЛЕНЕЗАВИ́СИМОСТЬ** **урата иреклеге** *(тышҡы донъяны сағылдырыуҙа уға тура килмәгән формаларҙы көсләп тағыу шарттарында субъекттың тышҡы тәьҫораттарҙы эске эталонға өҫтөнлөк биреп тәртипкә килтереүен белдергән төшөнсә).*

**ПОЛИТЕХНИ́ЧЕСКОЕ ОБУЧЕ́НИЕ** **политехник уҡыу** *(етештереүҙең төп тармаҡтары, фәнни принциптары тураһында һәм етештереү хеҙмәтендә ҡатнашыу өсөн кәрәк булған дөйөм техник оҫталыҡ менән тәьмин итеүсе белем биргән уҡыу).*

**ПОЛИТИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** **сәйәси психология** *(психологияла йәмғиәттең сәйәси тормошонда милләттең, синыфтың, социаль төркөмдөң, хөкүмәттең, айырым кешеләрҙең аң кимәлендә формалашҡан һәм конкрет сәйәси эштәрҙә тормошҡа ашырылған психологик компоненттарҙы (кәйеф, фекер, тойғо һ.б.) өйрәнеүсе бүлек).*

**ПОЛОВА́Я ДИФФЕРЕНЦИА́ЦИЯ** **енси бүленеш** *(аталыҡ һәм инәлек енесен айырыу нигеҙендә ятҡан генетик, морфологик һәм физиологик үҙенсәлектәр йыйылмаһы).*

**ПОЛОВА́Я ИДЕНТИ́ЧНОСТЬ** **енси берҙәйлек** *(индивидтың үҙ-үҙен билдәле бер енескә индергән һәм шул енси ролгә*

*ярашлы талаптарҙы үтәүгә йүнәлеш биргән тәртип һәм үҙаң берлеге. Беренсе енси берҙәйлек балала бер йәш ярымда формалаша, ә өс-дүрт йәштәргә енескә ҡарағанлыҡ билдәле тән һәм тәртип үҙенсәлектәре менән бәйләнә).*

**ПОЛОВО́Е ВЛЕЧЕ́НИЕ** енси ынтылыш, шәһүәт *(дөйөм енси теләкте, билдәле бер кеше менән тән яҡынлығына булған ынтылышты һәм енси мауығыу сәбәптәре аспекттарын аңлатҡан күп мәғәнәле термин).*

**ПОЛОВО́Е ВОСПИТА́НИЕ** енси тәрбиә *(мәктәп һәм ғаиләлә дөйөм тәрбиәүи эштәрҙең балаларҙа, йәштәрҙә әхлаҡи, физик, аң һәм эстетик яҡтан дөрөҫ енси үҫеш тәьмин иткән бер өлөшө).*

**ПОЛОВЫ́Е РО́ЛИ** енси ролдәр *(индивидтарҙың енесенә ҡарап, эшмәкәрлек, статус, хоҡуҡ һәм бурыстарҙың бүленеше).*

**ПОЛЯ́РНЫХ ПРО́ФИЛЕЙ МЕ́ТОД** [гр. *polos* — үҙәк, ҡотоп; итал. *profilo* — һыҙат] ҡапма-ҡаршы ҡуйылыш ысулы *(анализланыусы объекттарҙы (төшөнсәләрҙе) ҡаршы ҡуйып бирелгән сифаттар, исемдәр йәки киңәйтелгән текстарҙан төҙөлгән биполяр шкалалар ярҙамында тасуирлау алымы).*

**ПОНИМА́НИЕ** аңлау, төшөнөү *(1) нимәнеңдер мәғәнәһен, әһәмиәтен төшөнөү һәләте һәм шул арҡала ирешелгән һөҙөмтә; 2) аңдың тышҡы һәм эске тәьҫир арҡаһында барлыҡҡа килгән специфик хәле; субъект тарафынан хәтергә төшөрөлгән элекке кисерештәр менән әлеге тәьҫирҙең берҙәйлеген теркәгән ныҡлы ышаныс).*

**ПОНИМА́НИЕ НЕПОСРЕ́ДСТВЕННОЕ** туранан-тура аңлау.

**ПОНИМА́НИЕ ОПОСРЕ́ДСТВЕННОЕ** нимәлер арҡаһында аңлау.

**ПОНИМА́ЮЩАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** аңлау психологияһы *(XIX быуат аҙағы — XX быуат баштарындағы, психологик тикшеренеүҙәрҙең төп бурысы кешенең рухи тормош сәбәптәрен аңлатыу түгел, ә уның кисерештәренең мәҙәни-тарихи ҡиммәттәр донъяһы менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен билдәләү, аңлау тип һанаған немец психологияһы йүнәлеше. Нигеҙ һалыусыһы — немец философы В. Дильтей. Ул «тәбиғәтте беҙ аңлатабыҙ, ә рухи тормошто аңлайбыҙ» тип иҫбатлай. Был идея тәбиғәт фәндәрен йәмғиәт тураһындағы фәндәргә ҡаршы ҡуйыу һәм кеше психикаһының со-*

*циаль-тарихи шарттарға бәйлелеген объектив, шул иҫәптән, эксперименталь һәм фәнни ысулдар ярҙамында өйрәнеү мөмкинлеген кире ҡағыуға нигеҙләнгән).*

**ПОНЯ́ТИЕ** төшөнсә *(фекерләүҙең логик формаларының береһе, тел-логик фекерләүгә хас булған дөйөмләштереүҙең юғары кимәле).*

**ПОНЯ́ТИЕ АБСТРА́КТНОЕ** абстракт төшөнсә.

**ПОНЯ́ТИЕ АДЕКВА́ТНОЕ** адекват (тура килгән) төшөнсә.

**ПОНЯ́ТИЕ КОНКРЕ́ТНОЕ** конкрет төшөнсә.

**ПОНЯ́ТИЯ ПРОТИВОРЕЧИ́ВЫЕ** ҡапма-ҡаршы төшөнсәләр.

**ПОРО́Г ОЩУЩЕ́НИЯ** тойоу сиге *(ҡуҙғытҡыстың тойоуҙы барлыҡҡа килтерә йәки уны үҙгәртә торған дәүмәле. Ҡуҙғытҡыстың тойоуҙы тәүләп барлыҡҡа килтерә башлаған иң бәләкәй дәүмәле түбәнге абсолют тойоу сиге тип атала. Юғары абсолют тойоу сиге тип тойоуҙың йәки бөтөнләй юғалған, йәки сифаты яғынан үҙгәреүен (мәҫ., таушты, яҡтылыҡты артыҡ көсәйткәндә ауыртыу тойғоһо барлыҡҡа килә) барлыҡҡа килтергән ҡуҙғытҡыс дәүмәленә әйтәләр. Тойоуҙың әҙ генә һиҙелерлек үҙгәрешен барлыҡҡа килтергән ҡуҙғытҡыс дәүмәленең иң бәләкәй үҫеше айырма (йәки дифференциаль) тойоу сиге тип атала. Күрһәтелгән тойоу сиктәренең ҡиммәттәре яраҡлашыу процесында һәм төрлө факторҙар (ваҡыт-ара шарттарынан алып күҙәтеүсенең функциональ хәленең индивидуаль үҙенсәлектәренә тиклем) йоғонтоһонда үҙгәрә).*

**ПОСТУ́ПОК** ҡылынған эш, ҡылыҡ *(кешенең әхлаҡи үҙбилдәләнештә башҡа кешегә, үҙ-үҙенә, төркөм йәки йәмғиәткә, дөйөм алғанда, тәбиғәткә булған мөнәсәбәтендә үҙен шәхес буларак раҫлауы тип баһалаған аңлы эшхәрәкәте. Эш (ҡылыҡ) — ижтимағи тәртиптең төп берәмеге. Унда кешенең шәхесе формалаша. Эш-ҡылыҡты баһалағанда билдәле йәмғиәттәге ижтимағи нормалар системаһы иҫәпкә алына).*

**ПОСТУ́ПОК БЕЗРАССУ́ДНЫЙ** уйламайынса эшләнгән эш.

**ПОСТУ́ПОК ВОЛЕВО́Й** ихтыяр менән ҡылынған эш.

**ПОСТУ́ПОК РАЗУ́МНЫЙ** аҡыл менән эшләнгән эш.

**ПОТРЕ́БНОСТЬ** *(психологияла)* **ихтыяж** *(индивидтың йәшәүе, үҫеүе өсөн кәрәкле һәм уның әүҙемлек сығанағы булған*

*объекттарға мохтажлыҡ кисергәнлектән тыуған хәле. Ихтыяж — кешеләрҙең хеҙмәт эшмәкәрлегенең генә түгел, ә танып белеүҙең дә тәүшарты һәм һөҙөмтәһе. Шуға күрә ул шәхестең тәртибен яйлаусы, фекер, тойғо, ихтыяр-йүнәлештәрен билдәләүсе булып тора. Кешенең ихтыяжы уның тәрбиә процесы менән тығыҙ бәйләнгән. Ихтыяж — шәхестең әүҙемлек сығанағы. Маҡсатҡа ирешкәндә генә ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү мөмкин икәненә кеше инана).*

**ПОТРЕ́БНОСТИ ДУХО́ВНЫЕ** рухи ихтыяждар.

**ПОТРЕ́БНОСТИ ЕСТЕ́СТВЕННЫЕ** тәбиғи ихтыяждар.

**ПОТРЕ́БНОСТИ КУЛЬТУ́РНЫЕ** мәҙәни ихтыяждар.

**ПОТРЕ́БНОСТИ ПОЗНАВА́ТЕЛЬНЫЕ** (интеллектуальные) белемгә ихтыяждар.

**ПОЭТА́ПНОГО ФОРМИРОВА́НИЯ У́МСТВЕННЫХ ДЕ́ЙСТВИЙ КОНЦЕ́ПЦИЯ** аҡыл эшенең этаплап формалашыу концепцияһы *(яңы тәьҫирҙәр, образдар һәм төшөнсәләр барлыҡҡа килеү менән бәйле кешеләге ҡатмарлы, күп яҡлы үҙгәрештәр тураһында П.Я. Гальперин тәҡдим иткән тәғлимәт).*

**ПРА́КТИКУМ В ШКО́ЛЕ** мәктәптәге практикум *(дөйөм белем биреү мәктәбендә юғары синыфтарҙа үткәрелгән лаборатор эштәрҙең бер төрө).*

**ПРАЛОГИ́ЧЕСКОЕ МЫШЛЕ́НИЕ** пралогик (ябай) фекерләү *(Л. Леви-Брюль тарафынан фекерләүҙең тәүге этабын билдәләү өсөн индерелгән төшөнсә: әле уның төп логик закондарының формалашыуы тамамланмаған, сәбәп-нәтижә бәйләнештәренең булыуы танып беленгән, ләкин уларҙың асылы аңлайышһыҙ, серле формала).*

**ПРЕДМЕ́ТНО-РЕФЛЕ́КСИВНЫЕ ОТНОШЕ́НИЯ** предметлы рефлексия мөнәсәбәттәре *(субъекттың башҡа кешеләр менән рефлексив бәйләнештәрҙә башҡа кешенең позицияһын йәки уларҙың предметты (объектты, проблеманы) үҙенсә күреү үҙенсәлектәрен, күҙаллауҙарын аңлау һәләтенә нигеҙләнгән система).*

**ПРЕДРАССУ́ДОК** *ҡара:* **ПРЕДУБЕЖДЕ́НИЕ.**

**ПРЕДСТАВЛЕ́НИЯ** күҙаллауҙар *(предметтарҙың, күренештәрҙең һәм ваҡиғаларҙың иҫкә төшөрөү йәки нәтижәле фараз нигеҙендә барлыҡҡа килгән образдары).*

**ПРЕДСТАВЛЕ́НИЯ ВООБРАЖЕ́НИЯ** хыялдағы күҙаллауҙар.

**ПРЕДСТАВЛЕ́НИЯ ЕДИНИ́ЧНЫЕ** берәм бөртөк күҙаллауҙар.

**ПРЕДСТАВЛЕ́НИЯ ЦЕ́ЛОСТНЫЕ** бөтөн (тулы) күҙаллауҙар.

**ПРЕДУБЕЖДЕ́НИЕ** (алдан уҡ) тиҫкәре фекер *(алдан уҡ барлыҡҡа килгән насар ҡараш, тиҫкәре мөнәсәбәт. Хәбәр йәки эш-хәрәкәтте дөрөҫ ҡабул итергә ҡамасаулаған йүнәлеш).*

**ПРЕПОДАВА́НИЕ** уҡытыу, дәрес биреү *(педагогтың уҡыусыларға белем биреү һәм үҙ аллы эштәренә етәкселек итеү эшмәкәрлеге).*

**ПРЕСТИ́Ж** [фр. *prestige* — абруй, йоғонто] мәртәбә, абруй, дәрәжә *(индивид хеҙмәтенең йәмғиәт тарафынан хөрмәтләнеү дәрәжәһе; субъекттың әһәмиәтле ҡылыҡтарын был йәмғиәттә формалашҡан ҡиммәттәр баһаһы менән сағыштырыу нәтижәһе).*

**ПРЕСТУ́ПНОСТЬ ДЕ́ТСКАЯ** балалар енәйәтселеге *(балиғ булмағандарҙың йәмғиәттә енәйәтселек закондары буйынса яуаплылыҡ ҡаралған хәүефле эштәре).*

**ПРИВЫКА́НИЕ** *(психофизиологияла)* күнегеү, өйрәнеү *(билдәле бер стимулға реакция булмаған тиҫкәре сифат).*

**ПРИВЫ́ЧКИ** ғәҙәттәр, ҡылыҡ *(шәхестең билдәле шарттарҙа, теге йәки был этник төркөмгә хас булғанса барлыҡҡа килгән, урынлашҡан, өйрәнелгән тәртип алымдары, кешенең тәбиғи һыҙатына әйләнгән сифаттары).*

**ПРИВЫ́ЧКИ ВРЕ́ДНЫЕ** зарарлы (зыянлы) ғәҙәттәр.

**ПРИВЫ́ЧКИ КУЛЬТУ́РНОГО ПОВЕДЕ́НИЯ** үҙеңде әҙәпле тотоу ғәҙәттәре.

**ПРИВЫ́ЧКИ ОТРИЦА́ТЕЛЬНЫЕ** тиҫкәре ҡылыҡ (ғәҙәт).

**ПРИВЫ́ЧКИ ПОЛОЖИ́ТЕЛЬНЫЕ** ыңғай ҡылыҡ, яҡшы ғәҙәттәр.

**ПРИНЦИП ОТРАЖЁННОЙ СУБЪЕ́КТНОСТИ** шәхеслекте сағылдырыусы принцип *(башҡа кешеләрҙең эшмәкәрлегендә идеаль субъект итеп күрһәтелгән индивид шәхесен тикшереүгә эксперименталь ҡараш).*

**ПРИ́НЦИП РЕА́ЛЬНОСТИ** реаллек (тормошсанлыҡ) принцибы *(психик тормошта теләкте ҡәнәғәтләндереүҙә реаль шарттарҙы һәм мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алыуҙы һәм йыш ҡына ҡәнәғәтләнеүҙең төрлө алымдарынан баш тартыуҙы сағылдырыусы көйләү принцибы (З. Фрейд). «Мин» теләге реаллек принцибына буйһона).*

**ПРИ́НЦИП УДОВО́ЛЬСТВИЯ** ләззәт принцибы *(психик тормоштоң ризаһыҙлыҡтан ҡасыу һәм ләззәтте сикләмәй алырға тырышыуҙан торған көйләү принцибы).*

**ПРИНЯ́ТИЕ РЕШЕ́НИЯ** ҡарар ҡабул итеү *(маҡсатҡа ирешеү өсөн билдәһеҙлек ситуацияһында башланғыс мәғлүмәтте үҙгәртеү нигеҙендә эштең эҙмә-эҙлелеген формалаштырыуҙағы ихтыяр акты. Ҡарар ҡабул итеү структураһы маҡсаттан, һөҙөмтәнән, нәтижәгә ирешеү алымдарынан, баһалау критерийҙарынан һәм һайлау ҡағиҙәләренән тора).*

**ПРИПОМИНА́НИЕ** иҫкә төшөрөү *(оҙайлы хәтерҙән эҙләү, хәтерләү һәм күҙ алдына килтереү эше).*

**ПРОБЛЕ́МНАЯ СИТУА́ЦИЯ** [гр. *problema* — бурыс, мәсьәлә; лат. *situatio* — хәл] **проблемалы ситуация** *(1) индивид йәки төркөм эшмәкәрлегендә барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡлы, бер төрлө генә хәл итеп булмаған хәлдәр һәм шарттар мөнәсәбәте; 2) танып белеүгә ихтыяж нигеҙендә барлыҡҡа килгән фекерләү шарттарының психологик моделе, субъекттың танып белеү объекты менән бәйләнеш формаһы).*

**ПРОБЛЕ́МНОЕ ОБУЧЕ́НИЕ** проблемалы уҡытыу *(уҡытыусы тарафынан субъектты уҡытыуҙа проблемалы күренгән йөкмәткегә әүҙем йәлеп итеү ысулы. П. у. барышында субъект фәнни белемдең объектив ҡаршылыҡтары һәм уларҙы хәл итеү алымдары менән таныша, фекерләргә, белемде ижади үҙләштерергә өйрәнә).*

**ПРОГНО́З ПЕДАГОГИ́ЧЕСКИЙ** педагогик фараз (күҙаллау, прогноз) *(алдағы көндәрҙә, төрлө ваҡыт перспективаларында башланыу мөмкинлеген күҙаллап, киләсәк тураһындағы белемгә алып килгән танып белеү эшмәкәрлеге).*

**ПРОГРА́ММА УЧЕ́БНАЯ** уҡыу-уҡытыу программаһы *(һәр уҡытылған фәндең йөкмәткеһен һәм белем, үҙләштерелә торған күнекмәләр, оҫталыҡ кимәлен билдәләгән, шулай уҡ темаларҙың ҡыҫҡаса эстәлеген уҡытыу йылдарына бүлгән, методологик йүнәлеште күрһәткән документ).*

**ПРОГРЕССИ́ВНОЕ (ВНУ́ТРЕННЕЕ) ТОРМОЖЕ́НИЕ** *ҡара:* **ТОРМОЖЕ́НИЕ РЕТРОАКТИ́ВНОЕ.**

**ПРОЕКТИ́ВНЫЙ МЕ́ТОД** [лат. *projectio* — алға ташлау] **проекция ысулы** *(шәхесте тикшереү алымдарының береһе. Эксперимент мәғлүмәттәрендә проекцияларҙы асыҡлауға һәм һуңынан аңлатып биреүгә нигеҙләнгән).*

**ПРОЕ́КЦИЯ** [лат. *projectio* — алға ташлау] **проекция** *(субъект тарафынан үҙенең үҙенсәлектәрен, хәлен аңлы йәки аңһыҙ рәүештә тышҡы объекттарға күсереү нигеҙендә ҡиммәттәрҙе аңлау һәм барлыҡҡа килтереү процесы, уның һөҙөмтәһе. Ул субъекттың юғары ихтыяждары, маҡсаттары һәм баһалары тәьҫирендә тормошҡа ашырыла).*

**ПРОФЕССИОНА́ЛЬНАЯ ОРИЕНТА́ЦИЯ** [лат. *professio* — эш, шөғөл төрө; фр. *orintation* — йүнәлеш] **профессиональ йүнәлеш** *(теләк, ынтылыш һәм формалашҡан һәләттәрҙе, халыҡ хужалығында, дөйөм йәмғиәттә белгестәргә булған ихтыяжды иҫәпкә алып эшкә урынлаштырыу процесын яйлауға йүнәлтелгән психологик, педагогик һәм медицина саралары комплексы).*

**ПРОФЕССИОНА́ЛЬНАЯ ПОДГОТО́ВКА** **профессиональ әҙерлек** *(билдәле профессия буйынса уңышлы эшләү мөмкинселеген тәьмин итеүсе махсус белем, һәләт, күнекмә, сифат, эш тәжрибәһе һәм тәртип нормалары йыйылмаһы).*

**ПРОФЕССИОНА́ЛЬНАЯ ПРИГО́ДНОСТЬ** **профессиональ яраҡлылыҡ** *(кешенең ниндәйҙер профессияла йәмғиәт ҡабул итерҙәй уңыштарға өлгәшеү өсөн етерлек һәм кәрәк булған психик, психофизиологик үҙенсәлектәр йыйылмаһы).*

**ПРОФЕССИОНА́ЛЬНОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** **профессиональ белем** *(уҡыу йорттарында фән, техника һәм мәҙәниәттең төрлө тармаҡтары өсөн юғары, урта һәм түбән квалификациялы белгестәр әҙерләү. Профессиональ белем — хеҙмәт эшмәкәрлегенең билдәле бер өлкәһендә эшләү өсөн кәрәк булған белем, күнекмә, һәләт һәм оҫталыҡтар йыйылмаһы).*

**ПРОФЕССИОНА́ЛЬНЫЙ ОТБО́Р** **профессиональ һайланыш** *(психологик һайлауҙың бер төрө. Хәүефле шарттарҙа башҡарылған һәм кешенән ҙур яуаплылыҡ, һаулыҡ, юғары һәләт, эмоциональ яҡтан тотороҡло ихтыяр талап иткән эшмәкәрлеккә кешенең яраҡлы булыуын бирелгән нормалар буйынса алдан баһалау юлдары системаһы).*

**ПСИ** [ ψ ] **пси** *(психологияны билдәләү өсөн эмблема сифатында ҡулланылған грек алфавитының хәрефе).*

**ПСИ́ХИКА** [гр. *psychikos* — күңелсәк, рухи] **психика** *(юғары ойошҡан материяның субъект тарафынан объектив донъяны әүҙем сағылдырыуҙан һәм ошо нигеҙҙә үҙенең тәртибен, эшмәкәрлеген көйләүҙән торған системалы үҙсәнлеге, рухи эшсәнлеге).*

**ПСИХИ́ЧЕСКАЯ АНЕСТЕЗИ́Я** психик анестезия *(күңел бушлығы, яҡын кешеләргә мөхәббәттең һүнеүе, тирә-яҡтағы хәл-ваҡиғаларға эмоциональ реакциялар булмауы менән ҡылыҡһырланған патологик хәл).*

**ПСИХИ́ЧЕСКАЯ РЕАБИЛИТА́ЦИЯ** [лат. *re* — яңынан, *hab□ilis* — уңайлы, яйлы] психик реабилитация *(ауырыуҙарҙың, инвалидтарҙың, шулай уҡ ауырыу үткәреп, ижтимағи мөнәсәбәттәр, тормош шарттары үҙгәреү һөҙөмтәһендә психик травмалар кисергән кешеләрҙең зарарланған психик функцияларын, хәлдәрен, шәхси һәм социаль хеҙмәт статусын тергеҙеүгә, төҙәтеүгә йәки яраҡлаштырыуға йүнәлтелгән медико-психологик, педагогик, ижтимағи саралар системаһы).*

**ПСИХИ́ЧЕСКИЕ БОЛЕ́ЗНИ** психик ауырыуҙар.

**ПСИХИ́ЧЕСКИЕ ПРОЦЕ́ССЫ** психик процестар.

**ПСИХИ́ЧЕСКИЕ ФУ́НКЦИИ** психик функциялар *(мейенең сағылдырыу эшмәкәрлегенең төрлө формалары: тойғо, һиҙеү, хәтер, фекерләү, хис, ихтыяр һ. б.).*

**ПСИХИ́ЧЕСКИЕ ЯВЛЕ́НИЯ** психик күренештәр .

**ПСИХИ́ЧЕСКОЕ ЗДОРО́ВЬЕ** психик сәләмәтлек *(көслө психик кисерештәрҙең булмауы һәм тәртипте, эшмәкәрлекте тирә-яҡ ысынбарлыҡ шарттарына тура килтереп көйләүҙе тәьмин итеүсе күңел тыныслығы).*

**ПСИХИ́ЧЕСКОЕ КАК ПРОЦЕ́СС** процесс булараҡ психика *(С.А. Рубинштейн һәм уның уҡыусыларының И.М. Сеченов теорияһын артабан үҫтереүсе һәм психиканың төп йәшәү рәүешен асыусы концепция. Уның йәнле, һығылмалы, өҙлөкһөҙ булыуы, бер ҡасан да алдан тулыһынса бирелмәгән һәм, шунлыҡтан, формалашып, үҫешеп, ниндәйҙер нәтижәләр (психик хәл, образ, төшөнсә, тойғо һ. б.) барлыҡҡа килтереүсе процесс булыуы иҫбатлана).*

**ПСИХИ́ЧЕСКОЕ СОСТОЯ́НИЕ** психик хәл *(психиканың динамик яғын айырып күрһәтеүсе «психик процесс» төшөнсәһенән һәм индивид психикаһы сағылыштарының тотороҡло булыуын, уларҙың шәхес структураһында нығыныуын, ҡабатланыуын күрһәтеүсе «психик үҙсәнлек» төшөнсәһенән айырмалы рәүештә, индивид психикаһының сағыштырмаса статик яғын шартлы айырыу өсөн файҙаланылған төшөнсә).*

**ПСИХОАНА́ЛИЗ** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *analysis* — тарҡатыу, таратыу] психоанализ *(1) психотерапевтик*

*маҡсатта кешенең аңлашылмаған сәбәптәр арҡаһында борсолоу һәм үҙ-үҙен тотоу үҙенсәлектәрен асыҡлау алымдарының йыйылмаһы; 2) З. Фрейд һәм уның шәкерттәре тарафынан булдырылған йүнәлеш).*

**ПСИХОБИОГРА́ФИЯ** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *biographia* — тормош юлын яҙыу] **психобиография** *(конкрет шәхестәрҙе, бигерәк тә сәйәси эшмәкәрҙәрҙе, психологик анализлау алымы).*

**ПСИХОГЕНЕ́ТИКА** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *genetikos* — барлыҡҡа килеүгә, тыуыуға бәйләнешле] **психогенетика** *(психологияның генетика менән сиктәш тармағы).*

**ПСИХОГЕ́НИИ** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *genesis* — барлыҡҡа килеү] **психогении** *(психиканың психик травма тәьҫирендә патологик, ләкин ҡайтмалы боҙолоуы).*

**ПСИХОДИАГНО́СТИКА** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *diagnostikos* — белергә (һиҙергә) һәләтле] **психодиагностика** *(психология фәнендә шәхестең индивидуаль-психологик үҙенсәлектәрен асыу һәм билдәләү алымдарын эшләгән өлкә).*

**ПСИХОДРА́МА** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *drama* — эш, хәрәкәт] **психодрама** *(ысынбарлыҡҡа тап килмәгән эмоциональ реакцияларҙы бөтөрөү, социаль тормошто дөрөҫ сағылдырырға өйрәнеү, үҙеңде тәрәнерәк танып белеү маҡсатында үткәрелгән төркөм психотерапияһы төрө: пациенттар алмашлап актер һәм тамашасы сифатында сығыш яһай, уларҙың ролдәре ҡатнашыусылар өсөн шәхси мәғәнәгә эйә булған тормош ситуацияларын моделләштереүгә йүнәлтелә).*

**ПСИХО́З** [гр. *psyche* — йән, рух] **психоз** (психик ауырыу) *(психиканың ысын тормошто сағылдырыуҙағы, уны танып белеүҙәге боҙоуҙарҙа, кешенең үҙен тотошоноң һәм тирә-яҡтағыларға мөнәсәбәтенең үҙгәреүендә күренгән тәрән ҡаҡшауы).*

**ПСИХОЛИНГВИ́СТИКА** [лат. *lingua* — тел] **психолингвистика** *(халыҡ психологияһы менән тел һәм телмәр процестарының бәйлелеген өйрәнеүсе фән).*

**ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ ПО́МОЩЬ** **психологик ярҙам** *(психологияның кешеләрҙең социаль психологик белемен күтәреүгә һәм айырым кешегә, төркөмгә, ойошмаға психологик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән ғәмәли файҙаланыу өлкәһе).*

**ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ СЛУ́ЖБА ШКО́ЛЫ** **мәктәптә психологик хеҙмәт** *(халыҡ мәғарифы системаһында махсуслаштырылған бүлек, уның төп маҡсаты — һәр баланың шәхси психик үҫешенә булышлыҡ итеүсе шарттар булдырыу, сөнки уларҙың*

*боҙолоуы уҡыусыларҙың индивидуаль мөмкинлектәрен ваҡытында тормошҡа ашырыуға ҡамасаулай, психолого-педагогик яҡтан төҙәтеү кәрәклеген килтереп сығара).*

**ПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *psyche* — рух, йән һәм *logos* — тәғлимәт, фән] психология *(психиканы йәшәү эшмәкәрлегенең айырым бер формаһы тип билдәләп, уның үҫеше һәм эшмәкәрлеге ҡанундарын өйрәнеүсе фән).*

**ПСИХОЛО́ГИЯ АНАЛИТИ́ЧЕСКАЯ** аналитик (тасуирлы) психология *(был йүнәлеш психология фәненең бурысын психик күренештәрҙе анализлау, системалаштырыу һәм классификациялауға ғына ҡайтарып ҡалдыра, уларға фәнни аңлатма биреүҙе үҙенең бурысы тип һанамай).*

**ПСИХОЛО́ГИЯ БОЛЬНО́ГО** ауырыу кеше психологияһы.

**ПСИХОЛО́ГИЯ ВОЕ́ННАЯ** хәрби психология *(психологияның хәрби эш менән бәйләнешле мәсьәләләрен өйрәнә).*

**ПСИХОЛО́ГИЯ НАРО́ДОВ** халыҡтар психологияһы *(айырым халыҡтарҙың психологик үҙенсәлектәрен өйрәнә).*

**ПСИХОЛО́ГИЯ СЛЕПОГЛУХОНЕМЫ́Х** *ҡара:* **ТИФЛОПСИХОЛО́ГИЯ.**

**ПСИХОЛО́ГИЯ СТРУКТУ́РНАЯ** структур психология *(һәр психик процестың теге йәки был кешеләге үҙенсәлеге шәхестең эске төҙөлөшө, структураһы менән билдәләнеүен иҫбатлай).*

**ПСИХОЛО́ГИЯ ЭТНИ́ЧЕСКАЯ** (этнопсихоло́гия) этник психология, халыҡ психологияһы *(ижтимағи-тарихи үҫеш шарттары менән бәйләнештә төрлө халыҡтарҙың психик үҙенсәлектәрен өйрәнә).*

**ПСИХОПА́ТИЯ** [гр. *psyche* — рух, йән һәм *pathos* — ғазап, ауырыу, яфа] психопатия *(субъекттың социаль мөхиткә дөрөҫ яраҡлашыуына ҡамасаулай торған сифаттарының көсәйеүендә күренеп, холоҡтоң норманан тайпылышы. Сәбәптәре: 1) ауырыуҙар (баш мейеһенең зарарланыуы, инфекция, психотравмалар һ.б.); 2) нервы системаһының тыумыштан кәмселекле булыуы).*

**ПСИХОСЕКСУА́ЛЬНАЯ ОРИЕНТА́ЦИЯ** психосексуаль йүнәлеш *(енси ынтылыш һәм уны тормошҡа ашырыу формаларының йүнәлеше. Психосексуаль йүнәлештең формалашыуы пубертат (12—18 йәш) һәм күсеү (16—26 йәш) сексуаллек осорҙарын эсенә ала. Психосексуаль үҫештең формалашып бөтөү этабында платоник, эротик һәм сексуаль шәһүәт бар-*

*лыҡҡа килә. Психосексуаль йүнәлештең тайпылышы (енси боҙоҡлоҡ, аҙғынлыҡ) социоген, психоген һәм соматоген факторҙар арҡаһында барлыҡҡа килеүе мөмкин).*

**ПСИХОТЕРАПИ́Я** [гр. *psyche* — йән, рух һәм *therapeia* — дауалау] психотерапия *(күп психик, нервы һәм психосоматик ауырыуҙарҙы кешенең эмоцияларына, фекерләүенә, үҙаңына һүҙ ярҙамында йәки башҡаса тәьҫир итеп (гипноз, аңлатыу, ышандырыу һ.б.) комплекслы дауалау).*

**ПСИХОТЕРАПИ́Я ГРУППОВА́Я** төркөм психотерапияһы *(кешене дауалау һәм физик, психик именлегенә өлгәшеү өсөн төркөмдәге шәхес-ара бәйләнештәрҙең ҡанундарын файҙаланыу. Улар төрлө була, мәҫәлән, ғаилә психотерапияһы бер юлы бала, ата-әсә һәм туғандар менән эшләүҙе күҙ уңында тота).*

## Р

**РАБОТОСПОСО́БНОСТЬ** эшкә һәләтлелек *(кешегә ниндәйҙер эште үтәү өсөн кәрәк булған көстөң кимәле һәм дауамлылығы, уның ял, йоҡо ярҙамында тергеҙелеү мөмкинлеге менән ҡылыҡһырланған хәл).*

**РА́ДОСТЬ ПОЗНА́НИЯ** белем һөйөнөсө *(уҡыусыларҙа һәм педагогтарҙа яңы тема өйрәнгәндә булған белемде файҙаланып, донъяны танып белеүҙә үҙҙәренең шәхси ролен аңлауҙан тыуған хис).*

**РАЗВИ́ТИЕ ЛИ́ЧНОСТИ** шәхес үҫеше *(кешенең социаль аң үҫеше һәм тәрбиә һөҙөмтәһендә шәхес булараҡ формалашыу процесы).*

**РАЗВИ́ТИЕ ПСИ́ХИКИ** психика үҫеше *(психик процестарҙың ваҡыт үтеү менән һан, сифат яғынан һәм структур төрләнештәрҙә сағылып, законлы эҙмә-эҙлелектә үҙгәреше).*

**РАЗВИ́ТИЕ РЕ́ЧИ В ШКО́ЛЕ** мәктәптә телмәр үҫтереү *(уҡыусыларҙа дөрөҫ тасуири телмәр һәм яҙма телмәрҙе фекер үҫеше менән берлектә формалаштырыуҙы, камиллаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған уҡытыу ысулдары һәм алымдары системаһынан торған педагогик процесс).*

**РАЗДА́ТОЧНЫЙ МАТЕРИА́Л** таратма материал *(яҡындан танышыу йәки ғәмәли (лаборатор) эштәр өсөн уҡыусыларға таратылған тәбиғи йәки етештерелгән әйберҙәр йыйылмаһы).*

**РАЗДРАЖИ́МОСТЬ** ярһыусанлыҡ, ҡуҙғыусанлыҡ *(бөтөн организмдың, уның ағзаларының, туҡымаларының йәки күҙәнәктәренең, физиологик хәленең ҡуҙғытҡыстар тарафынан яһалған тышҡы тәьҫир арҡаһында үҙгәреүе).*

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ** ярһытҡыс, ҡуҙғытҡыс *(аңлы йәки аңһыҙ рәүештә организм хәленең үҙгәрешен барлыҡҡа килтереүсе тышҡы йәки эске тәьҫир).*

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ ЗВУКОВО́Й** тауышлы ярһытҡыс.

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ ОРГАНИ́ЧЕСКИЙ** органик ҡуҙғытҡыс.

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ БОЛЕВО́Й** ауырттырыусы ярһытҡыс.

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ СВЕТОВО́Й** яҡтылыҡ ярһытҡысы.

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ СЛОВЕ́СНЫЙ** һүҙле ярһытҡыс.

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ УСЛО́ВНЫЙ** шартлы ҡуҙғытҡыс.

**РАЗДРАЖИ́ТЕЛЬ ХИМИ́ЧЕСКИЙ** химик ҡуҙғытҡыс.

**РАЙОНИ́РОВАНИЕ ШКОЛ** мәктәптәрҙе районлаштырыу *(административ райондар, ҡала һәм башҡа торлаҡ урындарын бер мәктәп хеҙмәтләндергән микрорайондарға бүлеп, мәктәп селтәрҙәре төҙөү алымы).*

**РАППО́РТ** [фр. *rapport* — бәйләнеш, мөнәсәбәт] раппорт *(1. киң мәғәнәлә — сит ил әҙәбиәтендә: а) фекер, мәнфәғәттәрҙең һәм тойғоларҙың юғары дәрәжәлә уртаҡ булыуына нигеҙләнгән яҡын шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙе; б) психологик эксперимент ваҡытында тикшереүсе һәм тикшерелеүсе араһында барлыҡҡа килгән дуҫтарса яҡшы мөнәсәбәтте аңлата; 2. тар мәғәнәлә — гипноз ваҡытындағы гипнозсы һәм гипнозланыусы кеше араһындағы бәйләнеш: был бәйләнеш гипнозланған кешенең гипнозсы менән һөйләшеүенән, уның бойороҡтарын үтәүҙән ғибәрәт).*

**РАССЕ́ЯННОСТЬ** иғтибарһыҙлыҡ, тарҡаулыҡ *(маҡсатлы, йүнәлешле эшмәкәрлек һәләтенең функциональ һәм органик боҙолоуы).*

**РАССУ́ДОК И РА́ЗУМ** аҡыл һәм аң *(логик фекерләүҙең ике тибы).*

**РАЦИОНАЛИЗА́ЦИЯ** рационализация *(субъекттың «идеаль мин образы»на тап килтереү, үҙ-үҙеңде хөрмәтләү, дәрәжәне һаҡлау теләгенә бәйле, ғәйепләү йәки оялыу кисерештәренә ирек бирмәй, үҙ эшенең, уйының, тойғоларының ысын сәбәптәрен үҙ-үҙенән йәшереү функцияһын үтәгән һаҡлау механизмы).*

**РЕАКТИ́ВНОСТЬ** реактивлыҡ *(ярһытҡыстарға реакция биреү һәләте).*

**РЕАКТИ́ВНЫЕ ДЕПРЕ́ССИИ** реактив төшөнкөлөк *(реактив хәлдең төрө: кеше психик травма һөҙөмтәһендә бойоҡ, әҙ хәрәкәтле, һорауға тоноҡ тауыш менән ҡыҫҡа ғына яуап бирә, ә фекере үтә ауыр кисерелгән ваҡиғаға бәйле).*

**РЕАКТИ́ВНЫЕ СОСТОЯ́НИЯ** [лат. *re* — кире, *actio* — хәрәкәт] реактив хәл *(психик травма һөҙөмтәһе сағылған айырым ауырыу хәл).*

**РЕАКТОЛО́ГИЯ** [лат. *re* — кире, *actio* — хәрәкәт һәм *lógos* — тәғлимәт] реактология *(совет психологияһында тере йән эйәләренең (шул уҡ ваҡытта кешенең) психик эшмәкәрлеген өйрәнеү бурысы уның тышҡы ярһытҡыстарға бирә торған реакцияларын, тиҙлеген, көсөн һәм формаһын өйрәнеү тип һанаған йүнәлеш).*

**РЕА́КЦИЯ** *(психологияла)* [лат. *re* — кире, *actio* — хәрәкәт] реакция *(организмдың эске йәки тышҡы тәьҫиргә яуабы: айырым күҙәнәктең биохимик реакцияһынан шартлы рефлексҡа тиклем).*

**РЕА́КЦИЯ ДВИ́ГАТЕЛЬНАЯ** хәрәкәт реакцияһы.

**РЕА́КЦИЯ ИНСТИНКТИ́ВНАЯ** инстинктив реакция.

**РЕА́КЦИЯ ОТРИЦА́ТЕЛЬНАЯ** кире реакция.

**РЕА́ЛЬНОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** реаль белем *(уҡыусыларға ғәмәли файҙалы белем биреүҙе нигеҙ итеп алған дөйөм урта белем төрө. Беренсе урын тәбиғәт, математика фәндәре циклына бирелә).*

**РЕГИОНАЛИЗА́ЦИЯ ОБРАЗОВА́НИЯ** уҡытыуҙы регионлаштырыу *(урындағы социаль, иҡтисади, милли үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алған һәм ошо төбәктәге бөтә социаль төркөмдәрҙең белем ихтыяждарына тура килгән уҡытыу системаһын булдырыу һәм үҫтереү).*

**РЕГРЕССИ́ВНОЕ ТОРМОЖЕ́НИЕ** *ҡара:* **ТОРМОЖЕ́НИЕ ПРОАКТИ́ВНОЕ.**

**РЕГРЕССИО́ННЫЙ АНА́ЛИЗ** *(психологияла)* [лат. *regressio* — кире хәрәкәт] регрессион анализ *(статистикала ниндәйҙер дәүмәлдең уртаса ҡиммәтенең бер йәки бер нисә дәүмәл вариацияһына бәйлелеген өйрәнергә мөмкинлек биргән математик ысул).*

**РЕГРЕ́ССИЯ ПОВЕДЕ́НИЯ** бала холҡона ҡайтыу, кире ҡыланыш *(элекке, бала саҡтағы тәртип типтарына, психик үҫештең үткән кимәлдәренә ҡайтыу һәм шул ваҡыттағы ре-*

*акция ысулдарын актуалләштереү ярҙамында психологик һакланыу формаһы).*

**РЕГУЛЯ́ЦИЯ ПОВЕДЕ́НИЯ тәртипкә килтереү, тәртип урынлаштырыу** *(социаль төркөмдөң шәхескә төркөмдәге процестарҙа, дөйөм эшмәкәрлектә ҡатнашыуын ниндәйҙер кимәлдә үҙгәртергә саҡырған тәьҫир итеү алымы).*

**РЕДУКЦИОНИ́ЗМ** [лат. *reductio* — күсереү] **редукционизм, яҙлыҡтырыу** *(аңлы йәки аңһыҙ рәүештә бер төрлө күренеште сифаты яғынан икенсе типтағы күренешкә бороуға йүнәлтелгән методологик күрһәтмә. Мәҫ., психик күренеште физиологик, биохимик, биофизик күренештәргә).*

**РЕЖИ́М ШКО́ЛЬНЫЙ мәктәп режимы** *(мәктәптә балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең төрлө уҡыу төрҙәрен, эштәрен, ялдарын бәйләп һәм аралаштырып алып барыу тәртибе).*

**РЕ́ЙТИНГ** [лат. *rating* — баһа, тәртип, төркөмләү] **рейтинг** *(ниндәйҙер күренешкә билдәле шкала буйынса бирелгән субъектив баһаны аңлатҡан термин).*

**РЕ́ЙТИНГ-ШКАЛИ́РОВАНИЕ** [лат. *rating* — баһа, *scoling* масштаб билдәләү] **рейтинг шкалаһы төҙөү** *(тикшерелгән объекттар араһындағы бәйләнеште үлсәү өсөн эксперт баһалауы (рейтинг) нигеҙендә шкала төҙөү алымы).*

**РЕ́КТОР** [лат. *rector* — идара итеүсе] **ректор** *(юғары уҡыу йортоноң етәксеһе).*

**РЕЛАКСА́ЦИЯ** [лат. *relaxatio* — көсөргәнеште әҙәйтеү, кәметеү] **релаксация** *(көслө кисерештән йәки физик көсөргәнештән һуң субъекттың хәлһеҙләнеп тәне ауырайыу, тынып ҡалыу хәле).*

**РЕЛЬЕ́ФНЫЙ ШРИФТ рельефлы (ҡалҡыу) шрифт** *(һуҡырҙарға уҡыу, яҙыу өсөн яҫылыҡ өҫтөндә ҡалҡып торған шрифт).*

**РЕМИНИСЦЕ́НЦИЯ** *(психологияла)* [лат. *reminiscentia* — иҫкә төшөрөү] **реминисценция, иҫкә төшөрөү** *(элек үҙләштерелеп, онотолған тип уйлаған нәмәне, ваҡыт үткәс хәтерҙе тулыраҡ һәм теүәлерәк итеп яңыртыу күренеше. Был термин серб ғалимы В. Урбанчич тарафынан 1907 йылда тәҡдим ителгән).*

**РЕСПОНДЕ́НТ** [ингл. *respondent* — яуап биреүсе] **респондент, яуап биреүсе** *(социаль-психологик тикшеренеүҙәрҙә һорауға яуап биреүсе ролендә ҡатнашыусы).*

**РЕФЕРА́Т** [лат. *referre* — һөйләп биреү, хәбәр итеү] **реферат** *(ғилми хеҙмәттең, китаптың һ.б. ҡыҫҡаса йөкмәткеһе*

*һөйләп йәки яҙып бирелгән эш. Әҙәби һәм башҡа сығанаҡтарҙы күҙәтеүгә нигеҙләнеп яҙылған ҡыҫҡа сығыш).*

**РЕФЕРЕ́НТНАЯ ГРУ́ППА** *ҡара:* **ГРУ́ППА РЕФЕРЕ́НТНАЯ.**

**РЕФЕРЕ́НТНОСТЬ** [лат. *referens* — хәбәр итеүсе] **референтлыҡ, үрнәк, өлгө** *(субъектты башҡа кеше йәки төркөм менән берләштереүсе мөһимлек бәйләнеше. Был төшөнсәне беренсе булып Америка психологы Г. Хаймен ҡулланған. Е.В. Щедрин был төшөнсәнең аңлатмаһы нигеҙенә субъект тарафынан үҙенең йүнәлештәрен, фекерҙәрен, позицияларын билдәләгәндә мөһим булған һайлау моментын һалған. Шуға ярашлы референтлыҡ субъект шәхесенең икенсе кеше йәки төркөм өсөн уның мөһимлеге менән билдәләнгән айырым сифаты булараҡ аңлатыла. Өлгө объекты булып айырым кеше йәки уйҙағы идеал, әҙәби герой ҙа торорға мөмкин).*

**РЕФЕРЕНТОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ МЕ́ТОД** *йәки* **РЕФЕРЕНТОМЕ́ТРИЯ** [лат. *referens* — хәбәр итеүсе; гр. *metreo* — үлсәйем] **референтометрия алымы** *(төркөм ағзаһы булып торған һәр индивидтың референтлығын билдәләү алымы. Ул ике процедураны эсенә ала: 1) һораулыҡ ярҙамында мөһим объект, хәл, кеше хаҡында һәр ағзаның позицияһы (фекере, баһаһы, мөнәсәбәте) асыҡлана; 2) башҡа һыналыусыларға бик ҡыҙыҡлы тип табылған позициялы кешеләрҙе асыҡлау. Былар бөтәһе лә һыналыусыға төркөмдә үҙе өсөн мөһим позициялы шәхесте һайлауҙа ныҡ уйланырға мәжбүр итә. Референтометрия алымы төркөмдә шәхес-ара ярашыу һәм кемгәлер бирелгән өҫтөнлөктөң сәбәптәрен асыҡлай).*

**РЕФЛЕ́КС** [лат. *reflexus* — кире ҡайтарылған] **рефлекс** *(тере организмдың тышҡы тәьҫиргә үҙәк нервы системаһы ҡатнашлығында яһаған яуап реакцияһы).*

**РЕФЛЕ́КС БЕЗУСЛО́ВНЫЙ** **шартһыҙ рефлекс** *(нәҫелдән нәҫелгә, ата-бабаларҙан әҙер килеш бирелә торған рефлекс).*

**РЕФЛЕ́КС ЗАЩИ́ТНЫЙ һаҡланыу рефлексы.**

**РЕФЛЕ́КС УСЛО́ВНЫЙ** *ҡара:* **УСЛО́ВНЫЙ РЕФЛЕ́КС.**

**РЕФЛЕ́КСИЯ** [лат. *reflexio* — кире боролоу, ҡайтарылған] **рефлексия** *(субъекттың үҙ эске психик хәлен, кисерештәрен өйрәнеү процесы).*

**РЕЦЕ́ПТОР** [лат. *recipere* — алыу] **рецептор, нервы бөтөмө** *(тышҡы тәьҫирҙе (ярһыуҙы) һиҙә, нервы системаһының сигналдарына әйләндерә торған нервы осо (бөтөмө).*

**РЕЦЕ́ПТОРЫ БОЛЕВЫ́Е** ауыртыу рецепторҙары.

**РЕЦЕ́ПТОРЫ ВКУСОВЫ́Е** тәм рецепторҙары.

**РЕЦЕ́ПТОРЫ ВНЕ́ШНИЕ** тышҡы рецепторҙар.

**РЕЦЕ́ПТОРЫ ДИСТА́НТНЫЕ** дистант рецепторҙар *(ниндәйҙер алыҫлыҡта тәьҫир итеүсе ярһытҡыстарҙы тойоу өсөн хеҙмәт итә торған нервы остары; улар күҙҙә, ҡолаҡта, танауҙа урынлашҡан).*

**РЕЦЕ́ПТОРЫ КОНТА́КТНЫЕ** контакт рецепторҙары *(организм менән туранан-тура контактланыусы ярһытҡыстарҙы тойоу өсөн хеҙмәт итә торған нервы остары; улар тиреләә, ауыҙҙа, эске ағзаларҙа урынлашҡан).*

**РЕЦЕПИЕ́НТ** [лат. *recepientis* — алыусы] рецепиент *(уға адресланған хәбәрҙе ҡабул итеүсе субъект).*

**РЕЧЬ** һөйләү, тел, телмәр, һүҙ *(кешеләрҙең тел ярҙамында аралашыу процесы; йыш ҡына айырым эшмәкәрлек төрө тип ҡарала).*

**РЕЧЬ ВНУ́ТРЕННЯЯ** эске һөйләү (телмәр).

**РЕЧЬ ДАКТИ́ЛЬНАЯ** бармаҡ хәрәкәте менән һөйләү.

**РЕЧЬ ДЕ́ТСКАЯ** балалар телмәре.

**РЕЧЬ ЖЕСТОВА́Я** ымлап, ишара ярҙамында һөйләү.

**РЕЧЬ У́СТНАЯ** һөйләү теле.

**РЕЧЬ ЭГОЦЕНТРИ́ЧЕСКАЯ** үҙ алдыңа (үҙ–үҙеңә) һөйләү.

**РЕЧЬ ЭКСПРЕССИ́ВНАЯ** экспрессив (йәнле, тәьҫирле) телмәр.

**РЕШИ́ТЕЛЬНОСТЬ** тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ, баҙнатлыҡ *(кешенең үҙ аллы яуаплы ҡарарҙар ҡабул итеү һәм уларҙы тайпылышһыҙ тормошҡа ашырыу һәләте).*

**РИГИ́ДНОСТЬ** *(психологияла)* [лат. *regidus* — ҡатҡан, ҡатып ҡалған] ригидлыҡ *(объектив шарттар талап итһә лә, субъекттың билдәләнгән эшмәкәрлек программаһын үҙгәртеүҙә ауырлыҡ кисереүе, хатта тулыһынса һәләтһеҙ булыуы; хәрәкәт һәм психик һәләттең ваҡытлыса тотҡарланыуы, ҡатып ҡалыуы).*

**РИСК** 1. хәүеф, хәтәр *(һөҙөмтәһе билдәһеҙ, уңышһыҙ, кире нәтижә килеп сығыу мөмкинлеге булған эшмәкәрлек);* 2. тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ *(эш итеүҙә мөмкин булған ике варианттың береһен нәтижәһе икеле йәки насар һөҙөмтә биреү ихтималлығына ҡарамай һайлау).*

**РИТУА́Л** йола, тәртип *(билдәле йәмғиәттә мәҙәниәттең бер өлөшөн тәшкил иткән, ғөрөф-ғәҙәт менән тығыҙ бәйләнеп, ҡағиҙәгә әйләнеп киткән эш-ҡылыҡ тәртибе).*

**РОДИ́ТЕЛЬСКИЙ КОМИТЕ́Т** ата-әсәләр комитеты *(мәктәптә уҡыусыларҙың ата-әсәләре менән даими һәм тығыҙ бәйләнеш булдырыу өсөн төҙөлгән ата-әсәләр йәмғәтселегә ойошмаһы).*

**РОДНО́Й ЯЗЫ́К** туған тел, әсә теле *(дөйөм милли мәктәптәрҙә балаларға үҙ халҡының дөйөм әҙәби телен өйрәтеүҙе, телмәр үҫтереүҙе төп маҡсат итеп ҡуйған фән һәм төп белем биреү теле).*

**РОЛЬ** [фр. *role* — *роль*] *(социаль психологияла)* роль *(шәхестең социаль функцияһы; йәмғиәттә, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙә кешеләрҙең статусына, позицияһына бәйле тейешле нормалар буйынса үҙ-үҙҙәрен тотоуҙары).*

**РОЛЕВА́Я ТЕРАПИ́Я** роль терапияһы *(социаль психологиялағы концепцияларҙың береһе. Уның буйынса кеше йәмғиәттә социаль һәм шәхес-ара мөнәсәбәттә үҙенең статусына бәйле үҙ-үҙен тотороҡло тотоу һәләтенә эйә).*

**РУКОВО́ДСТВО** *ҡара:* **ЛИ́ДЕРСТВО.**

# С

**САМОАКТУАЛИЗА́ЦИЯ** [лат. *actualis* — ысын, хәҙерге] үҙен танытыу, үҙен күрһәтеү *(кешенең үҙ-үҙен мөмкин тиклем тулыраҡ күрһәтергә һәм үҙенең шәхси мөмкинлектәрен үҫтерергә тырышыуы).*

**САМОВОСПИТА́НИЕ** үҙ-үҙеңде тәрбиәләү, үҙтәрбиә *(кешенең аңлы рәүештә үҙ шәхесен ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы формалаштырыуы).*

**САМОВОСПИТА́НИЕ ВО́ЛИ** үҙеңдә ихтыяр тәрбиәләү.

**САМОВОСПИТА́НИЕ ХАРА́КТЕРА** үҙеңдә характер тәрбиәләү.

**САМОВНУШЕ́НИЕ** үҙ-үҙеңде ышандырыу *(үҙ-үҙеңә йүнәлдерелгән инандырыу процесы; үҙең менән идара итеү кимәлен күтәрә, иғтибар, хәтер, эмоциональ реакцияларҙы тәртипкә һала).*

**САМОВОСПРИЯ́ТИЕ** *ҡара:* **ВОСПРИЯ́ТИЕ МЕЖЛИ́ЧНОСТНОЕ.**

**САМОДЕТЕРМИНА́ЦИИ ПРИ́НЦИП** үҙ детерминация принцибы *(психофизиологияның теоретик-методологик принцибы. Уға ярашлы, үҙеңде тотоу сәбәбе булып айырым*

*тышҡы мөхит тәьҫире түгел, ә был тәьҫирҙәрҙе үҙ-үҙен тотошонда сағылдырған тере организм һанала).*

**САМОКОНТРО́ЛЬ** үҙ-үҙеңде күҙәтеү (тикшереү), үҙконтроль *(субъект тарафынан үҙ эшен, психик хәлен баһалау, аңлау һәм тәртипкә һалыу. Уның барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше кеше тәртибенә ҡарата йәмғиәт талаптары менән билдәләнә).*

**САМОНАБЛЮДЕ́НИЕ** үҙ-үҙен күҙәтеү *(субъекттың үҙенең психик хәлен, ҡылыҡтарын күҙәтеүе).*

**САМООБЛАДА́НИЕ** үҙ-үҙеңде ҡулға алыу, үҙ-үҙеңә хужа булыу *(кешенең эмоциональ сфераһына тәьҫир итеп, тәртипһеҙлеккә этәргән ситуацияларҙа, аңлы рәүештә ихтыяр көсө менән психик процесты көйләп, эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыу һәләте).*

**САМООБРАЗОВА́НИЕ** үҙ алдыңа уҡыу (белем алыу) *(уҡыу йорттарынан тыш, үҙ аллы уҡып белем алыу).*

**САМООПРЕДЕЛЕ́НИЕ КОЛЛЕКТИВИ́СТСКОЕ** коллективтағы үҙбилдәләнеш *(коллективтағы шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙең айырым формаһы. Индивидтың конкрет берлектәге тәьҫирҙәрҙе һайлау мөнәсәбәте: ул ҡайһы бер төркөм йоғонтоһон ҡабул итә, ә ҡайһыларын ниндәйҙер фактор, баһа, идеал, ҡараштарға бәйле кире ҡаға).*

**САМООПРЕДЕЛЕ́НИЕ ЛИ́ЧНОСТИ** шәхес үҙбилдәләнеше *(ҡатмарлы ситуацияларҙа аңлы рәүештә үҙ позицияңды билдереү һәм раҫлау).*

**САМООТЧЁТ** *ҡара:* **САМОКОНТРО́ЛЬ; САМОНАБЛЮДЕ́НИЕ; САМООПРЕДЕЛЕ́НИЕ ЛИ́ЧНОСТИ.**

**САМООЦЕ́НКА** үҙеңде баһалау, үҙбаһа *(шәхестең үҙ-үҙен, үҙенең мөмкинлектәрен, сифаттарын, башҡа кешеләр араһындағы урынын баһалауы. Үҙ-үҙеңде баһалау кешенең үҙенә тәнҡитле, талапсан ҡарашы менән бәйле, уның тәртибен көйләй, башҡалар менән мөнәсәбәтен яйлай һәм шәхес булараҡ формалашыуында ҙур роль уйнай).*

**САМОСТОЯ́ТЕЛЬНОСТЬ** үҙаллылыҡ *(шәхес сифаттарының береһе. Ул ике фактор менән билдәләнә: 1) шәхес эйә булған белем, оҫталыҡ, таҫыллыҡ берлеге; 2) шәхестең эшмәкәрлек процесына, уның һөҙөмтәләренә һәм бойомға ашырыу шарттарына мөнәсәбәте, шулай уҡ эшмәкәрлек процесында башҡа кешеләр менән урынлашҡан бәйләнештәре).*

**САМОУПРАВЛЕ́НИЕ ДЕ́ТСКОЕ** балалар үҙидараһы *(балаларҙың үҙ коллективындағы эштәр менән идара итеүҙә, етәкселек итеүҙә ҡатнашыуы).*

**САМОЧУ́ВСТВИЕ** кәйеф, хәл-әхүәл *(эске рухи хәл, күңел торошонда физиологик һәм психологик уңайлылыҡ тойоу).*

**САНГВИ́НИК** [лат. *sanguis* — ҡан] **сангвиник** *(темпераменттың төп дүрт тибының береһенә эйә булған кеше. Юғары психик әүҙемлек, егәрлелек, эшкә һәләтлелек, хәрәкәт етеҙлеге, мимика байлығы һәм төрлөлөгө, шәп һөйләү темпы менән билдәләнә).*

**СВЕРХЦЕ́ННЫЕ ИДЕ́И** юғары баһалы идеялар *(субъекттың аңында үҙҙәренә лайыҡ булмаған өҫтөнлөклө урын алған фекерҙәр, идеялар, күҙаллауҙар. Эмоциональ кисерештәр менән үтә. Ысынбарлыҡҡа тура килмәгән һаташыуҙан айырмалы рәүештә, реаль ваҡиғаларға тәбиғи (йыш ҡына һуңға ҡалған) реакцияларҙың патологик үҙгәреше. Юғары баһалы идеялар барлыҡҡа килгәндә аңдың тәрән боҙолоуы, шәхестең үҙгәреүе күҙәтелмәй).*

**СВЕРХ-Я́** (супер эго) **ғәжәйеп-мин** *(З. Фрейд теорияһында шәхес структураһы компоненттарының береһе. Ғәжәйеп-мин тәрбиә йоғонтоһонда бала саҡтан уҡ барлыҡҡа килеп «Мин» субъектының тәртипкә, холоҡҡа булған талаптарының һәм тойғоларының әхлаҡ системаһын тәшкил итә. Уның формалашыу механизмы булып ата-әсәләр, тәрбиәселәр менән ғәжәйеп минден оҡшашлығы тора. Шуға күрә ул — үҙгәртеүе ауыр булған, быуындан быуынға бирелгән традициялар һәм ҡиммәттәр эйәһе. Ғәжәйеп-мин бер-береһенә бәйле булған бер нисә функцияны берләштерә: намыҫ функцияһы, үҙ-үҙеңде күҙәтеү функцияһы һәм «Мин-идеал»ды формалаштырыу функцияһы).*

**СВО́ЙСТВА НЕ́РВНОЙ СИСТЕ́МЫ нервы системаһы үҙсәнлектәре** *(нервы системаһының кешенең индивидуаль психологик үҙәлектәренә тәьҫир итеүсе тотороҡло үҙенсәлектәре).*

**СДВИГ К РИ́СКУ хәүеф артыу** *(төркөм йәки индивидуаль ҡарарҙарҙың, күмәкләп бәхәсләшкәндән һуң, төркөм ағзаларының беренсе ҡарарҙары менән сағыштырғанда хәүефлелеге көсәйеү).*

**СЕГРЕГА́ЦИЯ** [лат. *segregatio* — айырыу, ситләшеү] **сегрегация** *(йәмғиәттә кешеләрҙе, социаль статус айырмаһына*

*ҡарап, төркөмдәр араһындағы бәйләнештәрҙе өлөшләтә йәки тулыһынса тыйып, эшмәкәрлек сфераһын сикләүҙе талап итеп категорияларға бүлеү).*

**СЕКСОЛО́ГИЯ** [лат. *sexus* — енес, гр. *logos* — фән] сексология *(енси айырмалыҡ, енси тәрбиә һәм енси яҡтан үҙ-үҙеңде тота белеү тураһындағы фән).*

**СЕКСТЕРАПИ́Я** секстерапия *(енси проблемалары булған (ир-ле-ҡатынлы) иштәргә үткәрелгән психотерапия төрө. Уның нигеҙендә кешенең үҙ-үҙен тотошон тик физиологик реакцияға ғына ҡайтарып ҡалдырған бихевиористик йүнәлеш ята).*

**СЕКСУА́ЛЬНАЯ СОВМЕСТИ́МОСТЬ** енси ярашлыҡ, енси яҡтан тап килеү *(партнерҙарҙың социаль, психологик, социаль-психологик һәм биологик йәһәттән үҙ-ара йоғонто яһауын, берләшеүен тәьмин иткән енси ихтыяж һәм интим мөнәсәбәттә үҙҙәрен тотоуҙары буйынса тура килеше).*

**СЕКСУА́ЛЬНОЕ ПОВЕДЕ́НИЕ** енси ҡылыҡ *(индивидтарҙың, шәхес-заттарҙың йәмғәт, ғаилә һәм шәхси тормош сфераһында мөһим күренеш булған енси ихтыяжға нигеҙләнгән бәйләнеш формалары).*

**СЕМА́НТИКА** мәғәнә, семантика *(тел берәмектәренең — һүҙҙең, һөйләмдең, тексттың мәғәнәһе).*

**СЕМЕ́ЙНОЕ ВОСПИТА́НИЕ** ғаилә тәрбиәһе *(йәмғиәттә йәш быуынды тәрбиәләү формаларының береһе: ата-әсәләрҙең балаларға көндәлек ғаилә тормошондағы йоғонтоһон маҡсатлы педагогик эш менән берләштерә).*

**СЕНЗИТИ́ВНОСТЬ** [лат. *sensus* — тойғо, тойоу] тойоусанлыҡ (төрлө тәьҫирҙе тиҙ тойоу).

**СЕНЗИТИ́ВНОСТЬ ВОЗРАСТНА́Я** йәшкә бәйле тойоусанлыҡ *(билдәле йәш осорона хас булған билдәле бер психик үҙенсәлектәрҙе, процестарҙы үҫтереү өсөн иң уңайлы шарттар. Йәшкә бәйле тойоусанлыҡ осоронан алдараҡ йәки һуңыраҡ уҡытыу кәрәкле нәтижә бирмәй, психика үҫешенә тиҫкәре йоғонто яһарға мөмкин).*

**СЕНСИБИЛИЗА́ЦИЯ** [лат. *sensibilis* — һиҙгер] **һиҙгерләндереү** *(билдәле бер ҡуҙғытҡыстар тәьҫирендә нервы үҙәктәренең тойоу һәләтен күтәреү)*

**СЕНСОМОТО́РНЫЙ ПСИХОСИ́НТЕЗ** сенсомотор психосинтезы *(инандырыу маҡсатындағы махсус диалог процесында субъекттың аңы менән идара итеү).*

**СЕНСО́РНАЯ ДЕПРИВА́ЦИЯ** [лат. *sensus* — тойғо, тойоу һәм *deprivatio* — мәхрүм итеү] сенсор депривация, тойоуҙан мәхрүм итеү *(кешене эксперимент үткәреү маҡсатында оҙайлы, бер ни тиклем тулыраҡ кимәлдә тойғолар тәьҫиренән мәхрүм итеү).*

**СЕНСО́РИКА** сенсорика *(тойоуҙы, һиҙеүҙе һәм үҙләштереүҙе дөйөмләштергән төшөнсә).*

**СЕНСО́РНЫЙ** сенсор *(тойоу ағзаларына ҡағылышлы).*

**СЕНСО́РНЫЙ ДЕФЕ́КТ** сенсор дефект, тойоу ағзаларының кәмселеге.

**СЕНСУАЛИ́ЗМ** *(психологияла)* сенсуализм *(психик тормош нигеҙен хисле тәьҫораттар тәшкил итә тигән һәм тойғоларҙы донъяны танып белеүҙең берҙән-бер сығанағы тип ҡараған тәғлимәт).*

**СИГНА́ЛЬНЫЕ СИСТЕ́МЫ** [лат. *signum* — билдә, гр. *systema* — бөтөн, берләшмә] сигнал системалары *(беренсе һәм икенсе сигнал системалары — тереклектең тирә-яҡ донъя, уның үҙсәнлектәрен баш мейеһендә сигнал булараҡ йәки еҫ, төҫ, тауыш һ.б.-ҙы һиҙеү ағзалары аша (1-се с.с.), йәки кешегә генә хас тел тамғалары системаһы аша (2-се с. с.) ҡабул итеп, үҙ-үҙен тотошон көйләү ысулы).*

**СИ́ЛА ВО́ЛИ** ихтыяр көсө *(маҡсатҡа ирешеүгә йүнәлтелгән көсөргәнешле ынтылыш).*

**СИ́ЛА НЕ́РВНОЙ СИСТЕ́МЫ** нервы системаһының көсө *(нервы системаһының баш мейеһе ҡабығы күҙәнәктәренең юғары дәрәжәләге эшкә һәләтлелеген, йәғни уларҙың, тотҡарланыу хәленә күсмәйенсә, йә бик көслө, йә бик көслө булмаһа ла оҙайлы ярһыуға сыҙау һәләтен сағылдырған төп үҙсәнлектәренең береһе).*

**СИ́МВОЛ** [гр. *symbolon* — шартлы тамға] символ *(башҡа образдарҙың, йөкмәтке һәм мөнәсәбәттәрҙең вәкиле, шартлы билдәһе булып хеҙмәт иткән образ).*

**СИМПА́ТИЯ** [гр. *sympatheia* — ынтылыш, эске ылығыу] симпатия, яратыу хисе *(кешенең башҡаларға, уларҙың төркөмөнә, ижтимағи күренешкә ҡарата иғтибар, ярҙам күрһәтеүгә, аралашыуға дәртләндергән алсаҡлыҡта, изгелектә, һоҡланыуҙа сағылған тотороҡло йылы тойғоло мөнәсәбәте).*

**СИМУЛЯ́ЦИЯ** [лат. *simulatio* — тышҡы күренеш, хәйлә] симуляция *(алдау маҡсатында ауырыу булып ҡыланыу ғәҙәте).*

**СИНДРО́М** [гр. *syndrome* — тупланма, йыйылыу] синдром *(ниндәйҙер күренешкә хас булған, берҙәм механизм буйынса барлыҡҡа килеүҙәре менән берләштерелгән билдәләрҙең билдәле бер йыйылмаһы. «С.» термины патопсихологияла берәй ауырыу билдәләре йыйылмаһы булараҡ ҡулланыла).*

**СИНЕСТЕЗИ́Я** [гр. *synaistesis* — берләшкән тойғо, бер юлы тойоу] синестезия *(төрлө тойғоларҙың үҙ-ара бәйләнеше, йәғни ике тойғоноң бергә кисерелеүе (ишетеү һәм күреү, ишетеү һәм төҫ һ.б.).*

**СИНКРЕТИ́ЗМ** *(психологияла)* [гр. *synkretismos* — тоташтырыу, берләштереү] синкретизм *(бала үҫешенең башланғыс осоронда психик функцияларҙың бүлгеләнмәүе, айырылмауы, бөтөнлөгө. Синкретизм балалар фекерләүендә төрлө күренештәрҙе, тейешле нигеҙ булмаһа ла, бергә бәйләргә тырышыуында сағыла).*

**СИ́НТЕЗ** [гр. *synthesis* — тоташтырыу, берләштереү, туплау] синтез *(берҙәм аналитик-синтетик фекерләү процесында өлөштәрҙән бөтөнгә күсеүгә килтергән фекерләү операцияһы. Нәмә һәм күренештәрҙе бер бөтөн көйө, уның өлөштәренең берҙәмлегендә һәм үҙ-ара бәйләнешендә өйрәнеү этабы).*

**СИСТЕМАТИ́ЧНОСТЬ И ПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬНОСТЬ В ОБУЧЕ́НИИ** уҡытыуҙа системалылыҡ һәм эҙмә-эҙлелек *(дидактик принциптарҙың береһе. Системалылыҡ белем, күнекмә, оҫталыҡты үҙләштереүҙә билдәле бер логик бәйләнеш булыуын талап итә. Эҙмә-эҙлелек материалды өйрәнгәндә бөгөнгөһөнөң быға тиклем үткәненә нигеҙләнеүен һәм киләһе баҫҡысҡа нигеҙ булыуын талап итә).*

**СИСТЕ́МНЫЙ ПОДХО́Д** *(психологияла)* системалы мөнәсәбәт *(психиканы уның элементтарының ябай ҡушылдығы тип түгел, ә ҡатмарлы берлек тип ҡарауҙы талап иткән принцип).*

**СИСТЕ́МНО-СТРУКТУ́РНЫЙ АНА́ЛИЗ** *ҡара:* **СТРУКТУ́РА.**

**СИТУА́ЦИЯ** [фр. *situation* — хәл] ситуация *(субъектҡа мөнәсәбәтле, уның әүҙемлеген көсәйтеүсе йәки һүлпәнәйтеүсе тышҡы шарттар системаһы).*

**СИТУА́ЦИЯ КОНФЛИ́КТНАЯ** конфликтлы ситуация.

**СИТУА́ЦИЯ ПРОБЛЕ́МНАЯ** проблемалы ситуация.

**СКЛО́ННОСТЬ** әүәҫлек, ынтылыш *(индивидтың берәй эш менән ысын күңелдән мауығып, шуның менән шөғөлләнергә ниәтләгән йүнәлеше).*

**СЛУ́ЖБА ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ** психологик хеҙмәт *(етештереү, халыҡ мәғарифы, медицина, тәртип һаҡлау һ. б. өлкәләрҙә консультация, диагностика, психологик экспертизаларҙың комплекслы мәсьәләләрен ғәмәли файҙаланыу системаһы).*

**СЛУ́ХИ** хәбәр *(шәхес-ара аралашыуҙа ниндәйҙер кимәлдә реаль йәки уйҙырма хәлдәрҙең киң аудиторияла билдәле булыуы).*

**СНОВИДЕ́НИЯ** төш күреү *(шәхси кисерелгәндәрҙең йоҡо ваҡытында (башлыса «тиҙ» йоҡо ваҡытында) күрелгән төрлө күренештәре).*

**СО́ВЕСТЬ** намыҫ, выждан *(шәхестең үҙен тотошонда, эшендә, тәртибендә әхлаҡи нормаларға таянып эш итеүе, уларҙы үтәүҙе талап итеп, үҙе ҡылған эштәрҙе баһалауы, күңел инсафлығынан килгән яуаплылыҡ тойғоһо; шәхестең әхлаҡи үҙаңының бер сағылышы).*

**СОВМЕСТИ́МОСТЬ ГРУППОВА́Я** төркөмдәге килешеүсәнлек, үҙ-ара һыйышыу *(төркөм ағзаларының бергә эшләгәндә ҡаршылыҡһыҙ аралашыу һәм үҙ-ара аңлашып эш итеү мөмкинлеген, йәғни төркөм берҙәмлеген, сағылдырған ижтимағи-психологик күрһәткес).*

**СОВМЕСТИ́МОСТЬ МЕЖЛИ́ЧНОСТНАЯ** шәхес-ара килешеүсәнлек, һыйышыу *(бергә эшләгән йәки аралашҡан партнерҙарҙың ҡиммәттәрҙе аңлау, баһалау, ҡыҙыҡһыныу, характер, темперамент, талаптарҙың, психофизиологик реакцияларҙың темпы, ритмы һәм башҡа шәхес-ара берләшеүҙә мөһим булған индивидуаль-психологик ҡылыҡһырламаларҙың тап килеүенә нигеҙләнгән бәйләнеш).*

**СОВМЕ́СТНАЯ ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** *(социаль психологияла)* **берҙәм эшмәкәрлек** *(матди йәки рухи мәҙәниәт объекттарын етештереүҙе маҡсат итеп берләшкән индивидтарҙың әүҙемлеген ойошторған система).*

**СОГЛА́СИЕ ГРУППОВО́Е** **төркөмдәге килешеү** *(төркөмгә берләшкән кешеләрҙең ҡараштар, фекерҙәр берлеге).*

**СОЗНА́НИЕ** аң *(ижтимағи-тарихи зат булараҡ, тик кешегә генә хас булған психик сағылыштың юғары кимәле; кешенең ысынбарлыҡты төшөнөү, белеү, фекер итеү һәләте).*

**СОЗНА́НИЕ ОБЩЕ́СТВЕННОЕ** ижтимағи аң.

**СОЗНА́НИЕ ПРАВОВО́Е** хоҡуҡи аң.

**СОЗНА́ТЕЛЬНОСТЬ И АКТИ́ВНОСТЬ УЧА́ЩИХСЯ В ОБУЧЕ́НИИ** уҡытыуҙа уҡыусыларҙың аңлылығы һәм әүҙемлеге *(дидактик принцип. Аңлылыҡ өйрәнгән материалды*

*аңлауҙа, төшөнөүҙә сағыла. Әүҙемлек фән ҡаҙаныштары менән ҡыҙыҡһыныу, уларҙы аңлау һәм танып белеү эшмәкәрлеге нигеҙендә үсешә).*

**СОМНАМБУЛИ́ЗМ** [лат. *somnus* — йоҡо, *ambulare* — йөрөү] **илереү** *(ҡатмарлы, тыштан ҡарағанда маҡсатҡа йүнәлешле, әммә йоҡонан гипнозға оҡшаш хәлгә күскәндә барлыҡҡа килгән аңһыҙ ҡылыҡ, йәғни йоҡола һаташып тороп йөрөүҙән ғибәрәт патологик хәл. Ғәҙәти ҡулланылышта уның синонимы — лунатизм).*

**СОН йоҡо** *(билдәле бер ваҡыт араһында ҡабатланып торған һәм аң эшмәкәрлегенең тулыһынса йәки өлөшләтә туҡталып тороуы менән бәйләнешле физиологик яҡтан тынyслыҡ, организмдың ял итеү хәле).*

**СОПЕРЕЖИВА́НИЕ кисерештә уртаҡлашыу, бергәләп кисереү** *(субъекттың эмоциональ хәле икенсе шәхестең (йәки социаль төркөмдөң) эмоциональ хәле менән оҡшашыуы, тап килеүе: был ваҡытта субъекттың индивидуаль аңында уның менән булған хәлгә икенсе кешенең (йәки соҡиаль төркөмдөң) мөнәсәбәте сағыла).*

**СОПРЯЖЕ́ННО-МОТО́РНАЯ МЕТО́ДИКА** [лат. *motor* — хәрәкәткә килтереүсе] **хәрәкәткә бәйләнгән алым** *(кешенең аффектлы реакцияһын тикшереү алымы. А.Р. Лурия тарафынан эшләнгән; тикшерелеүсегә ҡуҙғытҡыс рәүешендә бер нисә һүҙ тәҡдим ителә, һәр һүҙгә ул икенсе һүҙ менән яуап бирергә һәм бер үк ваҡытта уң һәм һул ҡул бармаҡтары менән пневматик асҡысҡа баҫырға тейеш. Һүҙ барлыҡҡа килтергән эмоциональ хәл телдән әйтелгән яуаптарҙа һәм хәрәкәт реакцияларының үҙгәрешендә теркәлә. Телмәр һәм хәрәкәт симптомдарының берләшеүе хис-тойғоноң үҙгәрешен тулыраҡ сағылдыра).*

**СОСРЕДОТО́ЧЕННОСТЬ** *ҡара:* **ВНИМА́НИЕ.**

**СОСТОЯ́НИЕ (ЧЕЛОВЕ́КА) (кешенең) хәле** *(кешенең физик һәм рухи кисереше, үҙен хис итеү рәүеше. Эстән күҙәтелгән хәл — билдәле ваҡытта тотош организмда йәки организмдың теге йәки был өлөшөндә тынyслыҡ (тынысһыҙлыҡ), уңайлыҡ (уңайһыҙлыҡ) тойоу. Тыштан күҙәтелгән хәл — был кешенең тышҡы билдәләрҙән күренгән тынyслыҡ (тынысһыҙлыҡ), уңайлыҡ (уңайһыҙлыҡ) кимәле).*

**СОХРАНЕ́НИЕ һаҡлау** *(ҡабул ителгән информацияны оҙаҡ ваҡыт йәшерен хәлдә тотоуҙы сағылдырған хәтер фазаһы).*

**СОЦИАЛИЗА́ЦИЯ** дөйөмләштереү *(индивидтың ижтимағи тәжрибәне үҙләштереү процесы һәм һөҙөмтәһе, уны үҙ эшмәкәрлегендә, аралашыуҙа әүҙем ҡабатлауы, файҙаланыуы).*

**СОЦИА́ЛЬНАЯ ЖЕЛА́ТЕЛЬНОСТЬ**[лат. *socialis* — ижтимағи] **ижтимағи теләк** *(үҙотчеттарҙы, атап әйткәндә, шәхсиәт һораулыҡтары пунктындағы яуаптарҙы, һыналыусылар фекеренсә, күңелгә яҡыныраҡ, ижтимағи яҡтан ярашлыраҡ, уларҙы яҡшыраҡ яҡтан күрһәтеүсе үҙотчеттарҙы йышыраҡ үткәреү юлы менән боҙоусы фактор).*

**СОЦИА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ социаль психология** *(психологияның төркөмдәргә берләшкән кешеләрҙең эшмәкәрлегендәге, үҙ-үҙҙәрен тотоуҙағы ҡанундарҙы өйрәнеүсе тармағы, шулай уҡ был төркөмдәргә хас психологик ҡылыҡһырлама).*

**СОЦИА́ЛЬНАЯ ПСИХОТЕРАПИ́Я** [гр. *psyche* — күңел, *therapeia* — дауалау] **социаль психотерапия** *(тәжрибә нигеҙендә барлыҡҡа килгән, ә ҡайһы бер илдәрҙә теоретик нигеҙләүҙәр тапҡан ижтимағи тәртипкә тәьҫир итеүсе мәрхәмәтһеҙ алымдар системаһы. Тәртипте үҙгәртеү маҡсатында әхлаҡи һәм хоҡуҡи яҡтан психологик ассоциациялар, ойошмалар тарафынан ғәйепләнгән психофармокология, гипноз, электрошок, айырып тотоу һәм нейрохирургия кеүек мәжбүри алымдар ҡулланыуҙы талап итә).*

**СОЦИА́ЛЬНАЯ СИТУА́ЦИЯ РАЗВИ́ТИЯ үҫештең социаль хәле** *(субъекттың социаль ысынбарлыҡта һәр йәш осорона хас булған, уның кисерештәрендә сағылған һәм башҡа кешеләр менән бергәләп эшләүҙә ғәмәлгә ашырылған мөнәсәбәттәр системаһы).*

**СОЦИА́ЛЬНО-ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ КОМПЕТЕ́НТНОСТЬ** [лат. *competens* — тейешле, һәләтле] **социаль-психологик компетентлыҡ** *(индивидтың шәхес-ара мөнәсәбәт системаһында уны ураҡан кешеләр менән үҙ-ара һөҙөмтәле тәьҫир итешеү һәләте).*

**СОЦИОГЕНЕ́З** *(психологияла)* [лат. *sociletas* — йәмғиәт, гр. *genos* — сығыш] **социогенез** *(шәхестең, шәхес-ара мөнәсәбәттең, юғары психик функцияларҙың төрлө мәҙәниәт, ижтимағи-иҡтисади формациялар үҙенсәлектәренә, ижтимағи шарттарға бәйле барлыҡҡа килеүе, үҫеше).*

**СОЦИОГРА́ММА** [лат. *societas* — йәмғиәт, гр. *gramma* — һыҙыҡ] **социограмма** *(бәләкәй төркөмдәрҙәге шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙе социометрик тест ярҙамында тикшергәндә алынған һөҙөмтәләрҙе математик яҡтан эшкәртеп, график ярҙамында сағылдырыу).*

**СОЦИОМЕ́ТРИЯ** [лат. *societas* — йәмғиәт, *metreo* — үлсәйем] **социометрия** *(ойошманың психологик теорияһы һәм шул уҡ ваҡытта төркөмдәрҙә шәхес-ара эмоциональ бәйләнеште баһалауҙа ҡулланылған социаль-психологик тест. Дж. Морено тарафынан эшләнгән).*

**СПАРТАКИА́ДА В ШКО́ЛЕ** **мәктәп спартакиадаһы** *(бер нисә спорт төрө буйынса уҡыусылар араһында үткәрелгән ярыш).*

**СПЕЦИА́ЛЬНАЯ ПЕДАГО́ГИКА** **махсус педагогика** *(аномаль балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу тураһындағы фән).*

**СПЕЦИА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** [лат. *specialis* — айырым] **махсус психология** *(психологияның нервы системаһының формалашыуында, эшләүендә тыумыштан йәки йәшәү процесында барлыҡҡа килгән кәмселектәр булыуға бәйле психикалары норманан тайпылышлы үҫешкән кешеләрҙе, атап әйткәндә, һуҡырҙар психологияһын (тифлопсихология), һаңғырауҙар психологияһын (сурдопсихология), аң үҫеше артта ҡалғандар психологияһын (олигофренопсихология), психик үҫеше ваҡытлыса тотҡарланған, телмәре боҙолған балаларҙы өйрәнеүсе тармағы).*

**СПЕЦИА́ЛЬНОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ** **махсус белем** *(профессиональ эшмәкәрлеккә әҙерләү).*

**СПЕЦИА́ЛЬНЫЕ ШКО́ЛЫ** **махсус мәктәп** *(хоҡуҡ боҙған йәки йәмғиәт өсөн хәүефле эштәр эшләгән балиғ булмаған 11-14 йәшлек балаларҙы енәйәт яуаплылығынан азат итеп, тәрбиәләү һәм төҙәтеү маҡсатында эш алып барған ябыҡ уҡытыу-тәрбиәләү учреждениеһы).*

**СПЕЦИА́ЛЬНЫЕ ШКО́ЛЫ ДЛЯ АНОМА́ЛЬНЫХ ДЕТЕ́Й** **аномаль балалар өсөн махсус мәктәп** *(физик һәм психик етешһеҙлектәре булған балалар өсөн ойошторолған дөйөм белем биреү мәктәбе).*

**СПЛОЧЁННОСТЬ ГРУППОВА́Я** **төркөм берҙәмлеге (тупланғанлығы)** *(төркөм динамикаһында ағзаларҙың төркөмгә тоғролоғоноң, берләшеү кимәлененң ҡылыҡһырламаһы).*

**СПОСО́БНОСТИ** **һәләтлелек, һәләт** *(шәхестең теге йәки был эште һөҙөмтәле башҡарырға мөмкинлек биргән индивидуаль-психологик үҙенсәлектәре).*

**СПОСО́БНОСТИ СПЕЦИА́ЛЬНЫЕ** [лат. *specialis* — айырым] **айырым (махсус) һәләтлелек** *(индивидтың айырым эш төрҙәрен (музыка, сәхнә, әҙәбиәт һ.б.) уңышлы башҡарырға мөмкинлек биргән психологик үҙенсәлектәре).*

**СРАВНЕ́НИЕ** **сағыштырыу** *(фекерләүҙә объекттар араһындағы оҡшашлыҡ һәм айырмалыҡтарҙы табыуға нигеҙләнгән логик операцияларҙың береһе).*

**СРАВНИ́ТЕЛЬНАЯ ПЕДАГО́ГИКА** **сағыштырма педагогика** *(педагогиканың сит илдәге тәрбиәләү, белем биреү системаһын һәм педагогик теорияларҙы сағыштырма планда өйрәнеүсе тармағы).*

**СРАВНИ́ТЕЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** **сағыштырма психология** *(психологияның антропогенез, аң үҫеше, кеше һәм хайуандарҙың психик эшмәкәрлегендә уртаҡ һәм айырмалы яҡтарҙы (кешенең үҙен тотошонда социаль һәм биологик сәбәптәргә бәйле мәсьәләләрҙе) өйрәнеү менән бәйле проблемаларҙы эсенә алған тармағы).*

**СТА́РОСТЬ** **ҡартлыҡ** *(кеше ғүмеренең һуңғы осоро; шартлы рәүештә уның башланыуы кешенең йәмғиәттәге файҙалы тормошта туранан-тура ҡатнашмай башлауы менән бәйле).*

**СТАТИСТИ́ЧЕСКИЕ МЕ́ТОДЫ** *(психологияла)* [лат. *status* — торош] **статистик алымдар** *(психологияла, нигеҙҙә, эксперимент һөҙөмтәләрен эшкәртеү өсөн файҙаланылған ғәмәли математик статистиканың ҡайһы бер алымдары).*

**СТА́ТУС** *(социаль психологияла)* [лат. *status* — урын, торош] **статус** *(шәхес-ара мөнәсәбәттәр системаһында субъекттың хоҡуҡтарын, бурыстарын һәм өҫтөнлөктәрен билдәләгән урыны).*

**СТЕРЕОТИ́П СОЦИА́ЛЬНЫЙ** [гр. *stereos* — ҡаты, *typos* — эҙ] **социаль стереотип** *(социаль объекттың (төркөм, кеше, хәл, күренеш һ. б.) информация етешмәү шарттарында шәхси тәжрибә һөҙөмтәһе һәм йыш ҡына йәмғиәттә ҡабул ителгән, алдан уҡ билдәле бер фекер буйынса төҙөлгән сағыштырмаса тотороҡло һәм ябай образы).*

**СТЕРЕОТИПИЗА́ЦИЯ** **стереотиплаштырыу** *(ижтимағи объекттарҙы (ваҡиғаларҙы) билдәле бер күҙаллауҙар нигеҙендә ҡабул итеү, төркөмләү һәм баһалау).*

**СТЕРЕОТИ́ПЫ ВОСПРИЯ́ТИЯ** *кара:* **СТЕРЕОТИ́П СОЦИА́ЛЬНЫЙ.**

**СТИЛЬ ЛИ́ДЕРСТВА** [гр. *stylos* — һүҙмә-һүҙ: яҙыу стержене; ингл. *leader* — етәксе, башлап барыусы] **лидер (етәксе) стиле** *(лидерҙың (етәксенең) ҡул аҫтындағы кешеләргә тәьҫир итеү алымдарының типик системаһы. К. Левин тарафынан лидер стиле өс төргә бүленә: авторитар, демократик, анархик).*

**СТИЛЬ ПЕДАГОГИ́ЧЕСКИЙ педагогик стиль** *(уҡытыусы тәжрибәһендә барлыҡҡа килгән педагогик оҫталыҡтың характерлы һыҙаттары).*

**СТИЛЬ ОБЩЕ́НИЯ аралашыу стиле** *(кешенең үҙ-ара бәйләнештең төрлө шарттарында (эш, шәхси мөнәсәбәттәрҙә, етәкселек стилендә) аралашыу тәртибендә барлыҡҡа килгән индивидуаль тотороҡло форма).*

**СТИ́МУЛ** [лат. *stimulus* – малды ҡыуа торған осло таяҡ] **стимул, этәргес көс** *(рецепторҙарҙа ҡуҙғытыу процесы барлыҡҡа килтереүсе (тышҡы һәм эске) тәьҫир).*

**СТРАСТЬ мауыҡ, дәрт, нәфсе** *(кешенең башҡа бөтә теләктәренән өҫтөн булған, мауығыу предметында уның бөтә ынтылышын, һәләтен туплаған, уны тулыһынса биләп алған көслө тойғо, теләк).*

**СТРЕСС** [ингл. *stress* — көсөргәнеш] **стресс** *(көслө тәьҫир арҡаһында барлыҡҡа килгән көсөргәнешле хәл).*

**СТРЕ́ССОР стрессор** *(стресс барлыҡҡа килтергән фактор).*

**СТРУКТУ́РА** [лат. *structura* — үҙ-ара урынлашыу, төҙөлөш] **структура** *(объекттың күп төрлө компоненттары араһында бөтөнлөктө һәм берҙәмлекте тәьмин итеүсе тотороҡло бәйләнештәр йыйылмаһы).*

**СТРУКТУ́РНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ структур психология** *(психологияның предметы тип аң элементтарын һәм улар араһындағы махсус күҙәтеүҙәр аша асыҡланған структур мөнәсәбәттәрҙе иҫәпләгән йүнәлеш).*

**СТЫД оят** *(кешенең үҙ ҡылыҡтарының, теге йәки был шәхси ҡыланыштарының был йәмғиәттә һаҡланған һәм уның тарафынан ҡабул ителгән нормаларға, әхлаҡ талаптарына тура килмәүен аңлау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән уңайһыҙланыу тойғоһо).*

**СУБЛИМА́ЦИЯ** [лат. *sublimare* — күтәреү, аштырыу] **сублимация** *(З. Фрейд психоанализында психологик яҡтан һаҡлауҙың бер механизмы. Конфликт ситуацияһында*

*көсөргәнешлелектә бөтөрөү өсөн психиканың инстинктив формаларын индивид һәм йәмғиәт ҡабул итерлек итеп үҙгәртеү, мәҫ., уйын-көлкөгә бороу).*

**СУБСЕНСО́РНОЕ ВОСПРИЯ́ТИЕ** [лат. *sub* — аҫҡа, *sensus* — тойоу, һиҙеү] субсенсор тойоу *(ысынбарлыҡты субъект тарафынан ҡайһы бер ҡуҙғытҡыстар тәьҫирендә уның аңынан тыш тәбиғи рәүештә психик сағылдырыу формаһы).*

**СУБЪЕ́КТ** [лат. *subjectum* – эйә] шәхес, субъект *(донъяны танып белгән һәм үҙгәртеүҙә әүҙем ҡатнашҡан кеше йәки төркөм).*

**СУБЪЕКТИ́ВНОЕ СЕМАНТИ́ЧЕСКОЕ ПРОСТРА́НСТВО** субъектив семантик арауыҡ *(индивидуаль аңдың категорияларҙан төҙөлгән моделе: унда ниндәйҙер объекттар, төшөнсәләр мәғәнәләрен анализлау юлы менән төркөмдәргә бүленә).*

**СУГГЕ́СТИЯ** [лат. *suggestio* — күңел һалыу, йоғонто яһау] *ҡара:* **ВНУШЕ́НИЕ.**

**СУДЕ́БНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** суд психологияһы *(хоҡуҡи психологияның суд эшенә ҡараған мәсьәләләрҙе өйрәнеүсе бүлеге).*

**СУДЕ́БНО-ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКАЯ ЭКСПЕРТИ́ЗА** [лат. *expertus* — тәжрибә] суд-психология экспертизаһы *(енәйәт эштәре процесында махсус психологик белемдәрҙе ғәмәли файҙаланыуҙың төп формаһы).*

**СУЕВЕ́РИЕ** хөрәфәт *(индивидтың ваҡиғаларҙы алдан белгертеүсе, уларға тәьҫир итеүсе күренмәгән көстәр булыуына ышаныуы).*

**СУЖДЕ́НИЕ** фекер, уй *(фекерләүҙең логик формаларының береһе. Субъект (эйә) менән предикат (хәбәр) төшөнсәләренең үҙ-ара бәйләнеше).*

**СУИЦИ́Д** [ингл. *suicide* — үҙ-үҙен үлтереү] суицид, үҙ-үҙен үлтереү *(кешенең психик ауырыу йәки күңел төшөнкөлөгө хәлендә үҙ-үҙен үлтереү акты: киҫкен психик травма шарттарында йәшәү мәғәнәһен юғалтып, аңлы рәүештә яҡты донъянан китеү).*

**СУРДОПЕДАГО́ГИКА** [лат. *surdus* — һаңғырау] сурдопедагогика *(педагогиканың һаңғырау балаларҙы уҡытыу-тәрбиәләү мәсьәләләре менән шөғөлләнгән махсус тармағы).*

**СУРДОПСИХОЛО́ГИЯ** [лат. *surdus* – һаңғырау] сурдопсихология *(социаль психологияның һаңғырау һәм насар ишетеүсе кешеләрҙең психик үҫешен, уҡытыу һәм тәрбиәләү ярҙамында уны төҙәтеү мөмкинлеген тикшереүсе бүлеге).*

# Т

**ТА́БЕЛЬ УЧЁТА УСПЕВА́ЕМОСТИ өлгәште билдәләү табеле** *(1-3/4) синыфтарҙа һәр сиректән һәм уҡыу йылынан һуң уҡыусыларға бирелә торған белем кимәлен, өлгәш һәм тәртипте күрһәткән мәктәп документы).*

**ТАЛА́НТ** [гр. *talanton* — һәләт кимәле] **талант** *(махсус һәләттең юғары үсеш кимәле; билдәле бер эшкә кешенең тәбиғәтенән килгән юғары һәләт).*

**ТВО́РЧЕСТВО ижад** *(яңы матди һәм рухи байлыҡтар тыуҙырыуҙа кеше эшмәкәрлеге әүҙемлегенең һәм үҙаллылығының юғары формаһы).*

**ТВО́РЧЕСТВО НАУ́ЧНОЕ фәнни ижад.**

**ТВО́РЧЕСТВО ТЕХНИ́ЧЕСКОЕ техник ижад.**

**ТВО́РЧЕСТВО ХУДО́ЖЕСТВЕННОЕ сәнғәт ижады.**

**Т-ГРУППА** [лат. *training group* — тренинг төркөмө] **тренинг төркөмө** *(шәхес-ара мөнәсәбәт системаһында ағзаларға йоғонто яһау, социаль-психологик яҡтан бер-береһен аңларға, аралашырға өйрәтеү һәм үҙ-ара бәйләнештәрҙе үҫтереү маҡсатында ойошторолған төркөм).*

**ТЕКСТ текст** *(билдәле бер бәйләнештә, эҙмә-эҙлекле итеп яҙылған, тамамланған, бөтөн телмәр).*

**ТЕО́РИЯ ИНФОРМА́ЦИИ информация (мәғлүмәт) теорияһы** *(бәйләнештәрҙең дөйөм теорияһы: элемтә каналдары буйынса тапшырылған йәки хәтерҙә ҡалған информация (мәғлүмәт) күләмен баһалай).*

**ТЕО́РИЯ УСТАНО́ВКИ йүнәлтелеш теорияһы** *(кешенең нимәгәлер мөнәсәбәтен аңһыҙ рәүештә алдан билдәләнеүен аңлатҡан дөйөм психологик күҙаллауҙар системаһы. Был теория күренекле психолог Д.Н. Узнадзе хеҙмәттәрендә нигеҙләнгән).*

**ТЕО́РИЯ ФУНКЦИОНА́ЛЬНЫХ СИСТЕ́М функциональ системалар теорияһы** *(тотош организмдағы процестарҙы тирә-яҡ мөхит менән үҙ-ара бәйлелектә ойоштороу концепцияһы. П.К. Анохин тарафынан эшләнгән).*

**ТЕСТ** [ингл. *test* — тикшереү] **тест** *(шәхестең билдәле психологик үҙенсәлектәре үсешенең кимәлен билдәләргә мөмкинлек биргән стандарт эштәр системаһы).*

**ТЕСТИ́РОВАНИЕ** тест үткәреү *(билдәле мәғәнә шкалалары булған стандарт һорауҙар һәм мәсьәләләр (тестар) файҙаланған психологик диагностика алымы).*

**ТЕ́СТЫ ДОСТИЖЕ́НИЙ** һөҙөмтә тестары *(психологик диагностикала һыналыусының конкрет белем, оҫталыҡ, таһыллыҡ кимәлен билдәләүсе бер алым).*

**ТЕ́СТЫ ИНТЕЛЛЕ́КТА** аҡыл тестары *(психологик диагностикала индивидтың аҡыл потенциалын билдәләгән алым).*

**ТЕ́СТЫ КРЕАТИ́ВНОСТИ** [лат. *creatio* — булдырыу, яһау, төҙөү] һәләт тестары *(шәхестең ижади һәләтен өйрәнеү һәм баһалау алымдарының йыйылмаһы).*

**ТЕ́СТЫ КРИТЕРИА́ЛЬНО-ОРИЕНТИРО́ВАННЫЕ** кимәл тестары *(һыналыусының билдәле йүнәлештәге уҡыу йәки һөнәр буйынса эштәрҙе үтәү өсөн кәрәк һәм етерлек булған белем, аҡыл күнекмәләрен тикшереү алымдары).*

**ТЕ́СТЫ ЛИ́ЧНОСТНЫЕ** шәхсиәт тестары *(психодиагностикала айырым шәхесте төрлө яҡлап (маҡсат, йүнәлеш, рухи байлыҡ, мөнәсәбәт, хис-тойғо, шәхес-ара үҙенсәлек, ҡылыҡ һыҙаттары буйынса) тикшереү).*

**ТЕ́СТЫ ПРОЕКТИ́ВНЫЕ** [лат. projectio — алға сығарыу] проекция (һүрәтләү) тестары *(шәхестәрҙең нимәнелер аңлатыу, һүрәтләү һөҙөмтәләренең психологик мәғәнәһенә нигеҙләнеп, уларҙы тулы өйрәнеү алымдарының йыйылмаһы, мәҫ., һүрәттәрҙе аңлатыу, башланған һөйләмде, хикәйәне тамамлау, һүрәт төшөрөү һ.б.).*

**ТЕ́ХНИКА ПЕДАГОГИ́ЧЕСКАЯ** педагогик оҫталыҡ *(педагогик яҡтан йоғонто яһау маҡсатында һайланған алымдарҙы ғәмәлдә эффектлы файҙаланыу өсөн педагогка кәрәк булған белем, һәләт, оҫталыҡтар комплексы).*

**ТЕХНИ́ЧЕСКИЕ СРЕ́ДСТВА ОБУЧЕ́НИЯ** уҡытыуҙың техник саралары *(уҡытыу процесында ҡулланылған төрлө яҡтылыҡ техникаһы, тауышлы әсбаптар һәм аппаратуралар комплексы).*

**ТЕХНОЛОГИ́ЧЕСКАЯ СТРУКТУ́РА ОБРАЗОВА́ТЕЛЬНОГО ПРОЦЕ́ССА** уҡытыу процесының технологик структураһы *(педагогик эшмәкәрлектең технологик кимәлгә сығарыу, йәғни кодлау, уҡытыу-тәрбиә сифатын юғалтмай формалләштереү мөмкин булған яҡтарын һүрәтләү).*

**ТИП ВЫ́СШЕЙ НЕ́РВНОЙ ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТИ** юғары нервы эшмәкәрлеге тибы *(нервы системаһының кеше эшмәкәрле-*

*гендәге һәм хайуан ҡылығындағы индивидуаль үҙенсәлектәрҙең физиологик нигеҙен тәшкил иткән үҙсәнлектәр йыйылмаһы).*

**ТИФЛОПЕДАГО́ГИКА** [гр. *typhlos* — һуҡыр] **тифлопедагогика** *(һуҡырҙарҙы йәки ныҡ насар күреүсе балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу фәне).*

**ТИФЛОПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *typhlos* — һуҡыр] **тифлопсихология** *(психологияның һуҡырҙар йәки насар күреүсе кешеләр психикаһының үҫешен, уҡытҡанда һәм тәрбиәләгәндә уны төҙәтеү юлдарын, алымдарын өйрәнеүсе махсус бүлеге).*

**ТОЛЕРА́НТНОСТЬ** [лат. *tolerantia* — түҙемлек] **сабырлыҡ, түҙемлек** *(ниндәйҙер кире факторҙарға уларҙың тәьҫирен тойоу кәмеү һөҙөмтәһендә иғтибар булмау йәки ҡаршы яуаптың көсһөҙләнеүе).*

**ТОЛПА́ халыҡ төркөмө** *(уртаҡ һәм аныҡ маҡсаттары булмаған, әммә иғтибар объекты уртаҡ һәм эске кисереш хәле буйынса оҡшаш кешеләр төркөмө).*

**ТОРМОЖЕ́НИЕ тотҡар, тотҡарлыҡ** *(ярһыу арҡаһында нервы үҙәгенең йәки ағзаларҙың эшмәкәрлеген тотҡарлаусы процесс).*

**ТОРМОЖЕ́НИЕ БЕЗУСЛО́ВНОЕ шартһыҙ тотҡар, шартһыҙ тотҡарланыу** *(шартлы тотҡарҙан айырмалы рәүештә, алдан билдәле булмаған ҡыҫҡа ваҡытлы тотҡар төрө).*

**ТОРМОЖЕ́НИЕ ЗАПРЕДЕ́ЛЬНОЕ** *ҡара:* **ТОРМОЖЕ́НИЕ БЕЗУСЛО́ВНОЕ.**

**ТОРМОЖЕ́НИЕ ПРОАКТИ́ВНОЕ** лат. *pro* — алдараҡ, *activus* — эшләй торған] **проактив тотҡар** *(материалдың бынан алдағы элементтарына яуаптарҙың унан һуңғы элементтарҙың яуаптарын тотҡарлауы һөҙөмтәһендә өйрәтеүҙе һүлпәнәйтеүсе дөйөм нервы процесы).*

**ТОРМОЖЕ́НИЕ РЕТРОАКТИ́ВНОЕ** [лат. *retro* — артҡа, *activus* — эшләй торған] **ретроактив тотҡар** *(материалдың һуңғы элементтарына яуаптар бынан алдағы элементтарҙың яуаптарын ятлауҙы тотҡарлаған, йәғни һуңғы ятлау тәьҫирендә әлек үҙләштерелгән материалды онотоу арҡаһында өйрәтеүҙе һүлпәнәйткән, дөйөм нервы процесы).*

**ТОРМОЖЕ́НИЕ УСЛО́ВНОЕ** *ҡара:* **ТОРМОЖЕ́НИЕ.**

**ТОТЕ́М тотем** *(конкрет кешеләр төркөмөнөң нәҫел башы, ырыу тергәге, кәрҙәш итеп табынған нәмә, йәнлек, үҫемлек йәки тәбиғәт күренеше).*

**ТРАДИ́ЦИЯ** [лат. *traditio* — тапшырыу, хикәйәләү] **традиция** *(тарихи нигеҙҙә барлыҡҡа килеп, быуындан быуынға тапшырылған эшмәкәрлек һәм ҡылыҡ формалары, төрлө йола, ғөрөф-ғәҙәт, рухи байлыҡ, күҙаллауҙар).*

**ТРАНС** [фр. *transir* — ҡатып ҡалыу] **транс** *(тирә-йүндәге ситуацияны һәм эшләгән эшеңдең маҡсатын аңламай бер нисә минут йәки оҙағыраҡ ваҡыт автоматик рәүештә ҡатмарлы шөғөлдө дауам итеүҙә сағылған аң буталыу күренеше).*

**ТРАНСА́КТНЫЙ АНА́ЛИЗ (трансакционный) трансакт анализы, трансакцион анализ** *(психологияла 50-се йылдарҙа Америка психологы һәм психиатры Э. Берн тарафынан эшләнгән йүнәлеш. Ул түбәндәгеләрҙе үҙ эсенә ала: 1) структур анализ («эго»-хәл теорияһы); 2) аралашҡан ике кешенең «эго»-хәлдәренең үҙ-ара тәьҫирләшеүен билдәләгән «трансакция» төшөнсәһенә нигеҙләнгән эшмәкәрлектең трансакт анализы; 3) психологик «уйын» анализы; 4) скриптоанализ («скрипт» — тормош сценарийы анализы). «Эго»-хәл теорияһында «эго» (мин) — субъекттың йәшәү алымы күҙ уңында тотола, ғәҙәттә, ул өс хәлгә бүленә: «ата-әсә», «бала», «өлкән». «Ата-әсә» хәле ике төрлө була — «хәстәрләү» (кәңәш, ҡайғыртыу, ярҙам) һәм «күҙәтеү» (тыйыу, талап, ҡағиҙә һ.б.). «Бала» хәле лә икегә бүленә: «ирекле» (күңелсәк, хәрәкәтсән, үҙен иркен тота), «яраҡлашҡан» (ул үҙе бер нисә төрлө: боласыл — ата-әсәгә ҡаршы сығыусан, ризалашыусан һәм ситләшеүсән). «Өлкән» хәле ситуацияны баһалау һәләте, белемлелек, тулы хоҡуҡлылыҡ, үҙаллылыҡ менән ҡылыҡһырлана. Трансакт анализының өсөнсөһө «уйын» — йәшерен сәбәбе, маҡсаты булған ҡылыҡ төрө. Бындай уйындарҙың ниәте һәйбәт һәм насар булыуы мөмкин. Һәр уйындың нигеҙендә скрипттар, йәғни бәләкәйҙән үк һалынған скрипт-программа, ята. Трансакт анализының һуңғы маҡсаты — кешеләге бөтә хәлдәрҙең үҙ-ара ярашҡан мөнәсәбәтен булдырып, гармониялы шәхес формалаштырыу).*

**ТРА́НСФЕР** [лат. *transfere* — күсереү] **трансфер** *(З. Фрейд психоанализында пациенттың үҙенең яҡын кешеләренә ҡарата хис-тойғоло мөнәсәбәтен психотерапевҡа күсереүҙе аңлатҡан термин, мәҫ., һөйөү, һоҡланыу, ихтирам (позитив трансфер), шулай уҡ дошманлыҡ, ҡурҡыу, нәфрәт (негатив трансфер) кеүек тойғолар бер ниндәй сәбәпһеҙ, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килеүе мөмкин).*

**ТРЕ́БОВАНИЕ** талап *(тәрбиәләнеүсенең ниндәйҙер айырым эшмәкәрлеген ҡеүәтләү йәки тотҡарлау маҡсатында уның аңына тәьҫир иткән педагогик тәрбиә алымы).*

**ТРЕВО́ГА** шом *(ваҡиғаларҙың кире, насар яҡҡа боролоуынан ҡурҡып хәүефләнгәндә барлыҡҡа килгән эске кисереш хәле).*

**ТРЕВО́ЖНОСТЬ** шомланыусанлыҡ *(индивидтың шомға бирелеүсәнлеге; шомланыу реакцияһы барлыҡҡа килеүҙең сиге бик түбән булыу менән ҡылыҡһырлана).*

**ТРЕМО́Р** [лат. *tremor* — ҡалтырау] **тремор, ҡалтырау** *(мускулдарҙың, кәүҙә, аяҡ-ҡулдың ҡалтырауын барлыҡҡа килтереп, ритмик рәүештә ихтыярһыҙ тартылыуы).*

**ТРЕ́НИНГ ДЕЛОВО́ГО ОБЩЕ́НИЯ** [ингл. *training* — махсус күнегеү режимы, тренировка] **эшлекле һөйләшеү күнекмәһе** *(профессиональ эшмәкәрлектә уңышлы аралашыу өсөн кәрәк булған белем алыу, оҫта һөйләү һәләтен формалаштырыу, үҫтереү һәм төҙәтеүгә йүнәлтелгән социаль-психологик күнекмә төрө).*

**ТРЕ́НИНГ ПЕРЦЕПТИ́ВНЫЙ** **аңлау (ҡабул итеү) күнекмәһе** *(үҙеңде, башҡа кешеләрҙе һәм аралашҡанда барлыҡҡа килгән мөнәсәбәттәрҙе дөрөҫ һәм тулыһынса аңлау һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән социаль-психологик күнекмә төрө).*

**ТРЕ́НИНГ СОЦИА́ЛЬНО-ПСИХОЛОГИ́ЧЕСКИЙ** **социаль-психологик күнекмә** *(аралашыуҙа компетентлыҡты үҫтереү маҡсатында төркөм менән психологик эштәр башҡарыу алымын әүҙем файҙаланыуға ҡоролған ғәмәли психология өлкәһе. Социаль-психологик күнекмәләрҙең төп алымдары — төркөмдә бәхәстәр ойоштороу һәм ролдәргә бүленеп уйнау).*

**ТРОПИ́ЗМЫ** [гр. *tropos* — боролош, йүнәлеш] **тропизм** *(биологик яҡтан мөһим ҡуҙғытҡыстар тәьҫирендә үҫемлек үҫешенең йүнәлеше үҙгәреү).*

**ТРУДОВО́Е ВОСПИТА́НИЕ** **хеҙмәт тәрбиәһе** *(балаларҙа һәм үҫмерҙәрҙә хеҙмәткә һөйөү, эш һөҙөмтәләренә яуаплылыҡ, эшмәкәрлеккә ижади мөнәсәбәт тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйған процесс).*

**ТРУДОВО́Е ОБУЧЕ́НИЕ В ШКО́ЛЕ** **мәктәптә хеҙмәткә өйрәтеү** *(уҡыусыларҙы техника, технология, ойоштороу, етештереү иҡтисады нигеҙҙәре менән таныштырған уҡыу*

*предметы. Ул уҡыусыларға хеҙмәт буйынса белем, оҫталыҡ, күнекмәләр биреүҙе, хеҙмәт мәҙәниәте формалаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуя).*

**ТРУДОЛЮ́БИЕ хеҙмәт һөйөү, хеҙмәт һөйөүсәнлек** *(шәхестең хеҙмәт эшмәкәрлегенә ыңғай мөнәсәбәтен сағылдырған холоҡ һыҙаты).*

# У

**УБЕЖДЕ́НИЕ 1. ышаныу, инаныу** *(шәхестең ниндәйҙер эш-маҡсатты күңелгә ярашлы, мөһим, әһәмиәтле тип һанаған аңлы ынтылышы. Күңелдә ныҡ тамырланған ҡараш);* **2.** *(метод)* **ышандырыу** *(тәрбиәләнеүселәрҙе уҡыу йә башҡа файҙалы йәмәғәт эшмәкәрлегенә ылыҡтырыу йәки насар эш-ҡылыҡтан ситләштереү маҡсатында уның аңына тәьҫир итеүсе педагогик тәрбиә алымы).*

**УБЕЖДЁННОСТЬ ышанғанлыҡ, инанғанлыҡ** *(шәхестең дөйөм эшмәкәрлек йүнәлешен, төп асылын, рухи байлыҡтарға мөнәсәбәтен билдәләгән һәм уның аңын биләгән, ҡылығын көйләгән айырым сифаты).*

**УДОВЛЕТВОРЁННОСТЬ ТРУДО́М эштән ҡәнәғәтлек (алыу)** *(шәхестең йәки төркөмдөң эшләгән эштәренә, уның шарттарына хис-тойғо баһаһы. Ф. Херцбергер теорияһы буйынса, эштән ҡәнәғәтлек ике факторҙан тора: 1) «мотивацион» — эш йөкмәткеһе, эштәге ҡаҙаныштар, тирәләге кешеләрҙең хөрмәте, квалификация яғынан үҫеү мөмкинлеге; 2) «гигиеник» — эш шарттары, эш хаҡы, хужалар тотҡан йүнәлеш, хеҙмәткәрҙәр араһындағы мөнәсәбәт).*

**УЗНАВА́НИЕ таныу** *(объектты ҡабаттан күргәндә хәтергә төшөрөү, яңынан күҙ алдына килтереү).*

**УЗНАВА́НИЕ ЛО́ЖНОЕ яңылыш таныу.**

**УЗНАВА́НИЕ НЕПО́ЛНОЕ тулы булмаған таныу.**

**УЗНАВА́НИЕ НЕПРОИЗВО́ЛЬНОЕ ихтыярһыҙ таныу.**

**УЗНАВА́НИЕ ПО́ЛНОЕ тулы таныу.**

**УЗНАВА́НИЕ ЧАСТИ́ЧНОЕ өлөшләтә таныу, сырамытыу.**

**УМ аҡыл** *(кешенең белем үҙләштереү мөмкинлектәренең (тойғо һәм ихтыярҙан айырмалы рәүештә) дөйөмләште-*

*релгән ҡылыҡһырламаһы. Тар мәғәнәлә — кешенең фекер йөрөтөү, уйлау һәләте).*

**УМЕ́НИЕ** белеү, оҫталыҡ *(билдәле бер эште башҡарыу һәләте).*

**УМОЗАКЛЮЧЕ́НИЕ** һығымта *(логик фекерләүҙең бер нисә фекерҙе йомғаҡлауҙан барлыҡҡа килгән бер формаһы).*

**У́МСТВЕННОЕ ВОСПИТА́НИЕ** аҡыл тәрбиәһе, аҡылға өйрәтеү *(аҡыл хеҙмәтенә мөхәббәт тыуҙырыу, интеллектуаль эшмәкәрлеккә ҡыҙыҡһыныу уятыу нигеҙендә аң үҫешенә, танып белеү һәләтенә етәкселек итеү).*

**У́МСТВЕННЫЕ ДЕ́ЙСТВИЯ** аҡыл эше *(тышҡы сараларға, телмәргә нигеҙләнмәй, кешенең эске аңында барлыҡҡа килгән фекер, башҡарылған эш).*

**УНИВЕРСИТЕ́Т** университет *(тәбиғәт, йәмғиәт һәм ижтимағи фәндәр өлкәһендә юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләүсе күп профилле юғары уҡыу йорто; киләсәккә тәрән теоретик белемле фәнни-ғәмәли һәм педагогик эшмәкәрлек буйынса кадрҙар әҙерләй).*

**УПРЯ́МСТВО** үҙһүҙлелек *(индивидтың кеше кәңәшенә, үтенесенә, төплө дәлилдәренә ҡолаҡ һалмай, бер нәмәгә ҡарамай, тик үҙенсә генә эшләргә ынтылыуын сағылдырған ихтыяр кәмселеге).*

**УРАВНОВЕ́ШАННОСТЬ НЕ́РВНЫХ ПРОЦЕ́ССОВ** нервы процестарының тыныслығы *(нервы системаһының ярһыу һәм тотҡарҙың үҙ-ара нисбәтен сағылдырған үҙсәнлеге).*

**У́РОВЕНЬ ГРУППОВО́ГО РАЗВИ́ТИЯ** төркөм үҫеше кимәле *(төркөм эсендә шәхес-ара мөнәсәбәттәр формалашыуҙың ҡылыҡһырламаһы).*

**У́РОВЕНЬ ПРИТЯЗА́НИЙ** дәғүә (ынтылыш) кимәле *(кешенең, үҙендә ҡатмарлыраҡ бурысты үтәрлек һәләт тойоп, маҡсатҡа ынтылышы).*

**У́РОВЕНЬ У́МСТВЕННОГО РАЗВИ́ТИЯ** аҡыл үҫеше кимәле *(яңы белем, һөнәр үҙләштереү нигеҙе булған, фекерләү процесында иркен ҡулланылған белем, һәләт йыйылмаһы).*

**УСВОЕ́НИЕ** үҙләштереү *(индивид тарафынан ижтимағитарихи тәжрибә туплауҙағы төп юл).*

**УСЛО́ВНАЯ ГРУ́ППА** шартлы төркөм (*кешеләрҙең ниндәйҙер сифат (йәш, профессия, енес) буйынса тупланған берләшмәһе).*

**УСЛО́ВНЫЙ РЕФЛЕ́КС** шартлы рефлекс *(юғары тереклек организмының ғүмере эсендә мотлаҡ баш мейеһенең ҙур ярымшарҙары ҡабығы ҡатнашлығында барлыҡҡа килгән рефлекс. Был термин И.П. Павлов тарафынан тәҡдим ителгән).*

**УСПЕВА́ЕМОСТЬ** өлгәш *(уҡыусыларҙың программаға ярашлы үҙләштергән белеменең тәрәнлек, тулылыҡ, аңлылыҡ кимәлен баһалау. Балл менән билдәләнә).*

**УСТА́ВЫ (ШКО́ЛЬНЫЕ И УНИВЕРСИТЕ́ТСКИЕ)** уставтар *(ҡайһы бер уҡыу йорттарының структураһын, бурыстарын, маҡсаттарын, уларҙың уҡытыу-тәрбиә эштәрен, ойоштороу-хужалыҡ эшмәкәрлеген билдәләгән ҡағыҙәләр йыйылмаһы).*

**УСТАНО́ВКА** йүнәлеш, йүнәлтелеш *(кешенең аңһыҙ рәүештә уны уратып алған кешеләрҙе йәки объекттарҙы нисек ҡабул итергә, баһаларға йәки эш итергә әҙерлек хәле).*

**УСЫНОВЛЕ́НИЕ** уллыҡҡа алыу *(баланы ғаиләгә уллыҡҡа алған кеше менән алынған бала араһында ата-әсә һәм бала араһындағы кеүек үк хоҡуҡ мөнәсәбәттәрен закон буйынса нығытып тәрбиәгә алыу).*

**УТОМЛЕ́НИЕ** талсығыу, йонсоу, арыу *(оҙаҡ көсөргәнешле эштән һуң эшкә ваҡытлыса һәләтлелек кәмеү).*

**УЧЕ́НИЕ** уҡыу *(индивид эшмәкәрлегендә белем алыу, уны нығытыу процесы һәм алымдары. Уҡыу һәр эшмәкәрлектең мөһим компоненты булараҡ, субъекттың үҙгәреү, үҫеш процесын сағылдыра).*

**УЧЁНЫЕ СТЕ́ПЕНИ И ЗВА́НИЯ** ғилми дәрәжә һәм (атаҡлы) исемдәр *(юғары белемле белгестәрҙең фәнни квалификацияһын билдәләп, фән, техника һәм мәҙәниәт үҫешендәге, юғары белемле фәнни белгестәр әҙерләүҙәге ҡаҙаныштары өсөн бирелә).*

**УЧЁНЫЙ СОВЕ́Т** ғилми совет *(ғилми учреждениеларҙың фәнни-тикшеренеү, вуздарҙың уҡытыу эшенең төп йүнәлештәрен билдәләүсе орган. Ғилми дәрәжә биреү советы, ғилми-тикшеренеү учреждениеларының һәм вуздарҙың советтары була).*

# Ф

**ФА́КТОР РИ́СКА** хәүеф факторы *(үҙгәргән сит шарттарҙа йәшәү өсөн ҡурҡыныслы психоген фактор).*

**ФА́КТОРНЫЙ АНА́ЛИЗ** [лат. *factor* – эшләүсе, яһаусы, ғәмәлдәге; гр. *analysis* — тарҡатыу, айырыу, бүлеү] **факторлы анализ** *(туранан-тура күҙәтеүҙән ниндәйҙер кимәлдә йәшеренеп ҡалған факторҙарҙы асыҡлау маҡсатында статистик яҡтан бәйле үҙсәнлектәрҙе өйрәнгәндә ҡулланыла торған математик статистика алымы).*

**ФАКУЛЬТАТИ́ВНЫЕ ЗАНЯ́ТИЯ (В ШКО́ЛЕ) (мәктәптәге) факультатив дәрестәр** *(уҡыусыларҙың теләге, ҡыҙыҡһыныуына ҡарап, айырым курс, тема йәки һорауҙар буйынса үткәрелгән мәжбүри булмаған дәрестәр).*

**ФАКУЛЬТЕ́Т** [лат. *facultas* — һәләт, мөмкинлек] **факультет** *(юғары уҡыу йортонда ниндәйҙер бер өлкәгә бәйле фәндәрҙе өйрәткән административ вазифалы бүлек).*

**ФАНАТИ́ЗМ** [лат. *fanatus* — шашыу, үҙ-үҙен онотоу] **фанатизм** *(индивидтың ниндәйҙер ҡарашҡа, фекергә мөкиббән булып, ныҡ инанып, башҡа ҡарашты инҡар итеүе. Был фекер уның эшмәкәрлегендә, аралашыуында сағылып, башҡаларҙың фекеренә түҙемһеҙлек күрһәтеүгә килтерә).*

**ФАНТА́ЗИЯ** [гр. *phantasia* — хыял] **фантазия, ижади хыял** *(нимәнелер уйлап сығарыу, күҙ алдына килтереү һәләте, хыял).*

**ФАНТО́МНЫЕ НАРУШЕ́НИЯ** [фр. *fantome* — шәүлә] **фантом тойғо** *(булмаған тән ағзаларының (мәҫ., киҫелгән аяҡ-ҡулдың) ялған ауыртыуы, ҡысыуы, ойоуы, ҡорошоуы һ.б.).*

**ФАЦИЛИТА́ЦИЯ СОЦИА́ЛЬНАЯ** [ингл. *facilitate* — еңеләйтеү] **сәмләшеү** *(индивидтың аңында уның менән ярышыусы йәки күҙәтеүсе икенсе кешенең (йәки төркөмдөң) образы актуалләшеүе һөҙөмтәһендә эшмәкәрлек тиҙлеге йәки һөҙөмтәлелегә артыу).*

**ФЕНОМЕНАЛИСТИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *phainomenon* — булған] *ҡара:* **ГУМАНИСТИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ.**

**ФЕНОТИ́П** [гр. *phaino* — табыу, күрһәтеү һәм *typos* — эҙ, форма, өлгө] **фенотип** *(организмдың күҙәтергә мөмкин булған үҙсәнлектәре, мәҫ., морфологик, физик, ҡылыҡ үҙсәнлектәре).*

**ФИЗИ́ЧЕСКОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ физика белеме** *(университет һәм пединституттарҙа физика һәм уға бәйле фән, техника өлкәһендә ғилми-тикшеренеү, уҡытыу эше өсөн юғары квалификациялы белгестәр әҙерләү системаһы).*

**ФИЛОГЕНЕ́З** [гр. *phyle* — ырыу, нәҫел, төр һәм *genos* — барлыҡҡа килеү, сығыш] **филогенез** *(организмдар*

*төркөмөнөң тарихи формалашыуы. Психологияла филогенез—хайуандарҙың психика һәм ғәҙәттәренең барлыҡҡа килеүе, тарихи үҫеше; кешелек тарихында аң формаларының барлыҡҡа килеүе һәм эволюция процесы булараҡ аңлатыла).*

**ФИЛОЛОГИ́ЧЕСКОЕ ОБРАЗОВА́НИЕ филология белеме** *(тел, әҙәбиәт буйынса уҡытыусы, ғилми тикшеренеүсе, тәржемәсе, мөхәррир һ.б. белгестәр әҙерләү системаһы).*

**ФЛЕГМА́ТИК** [гр. *phlegma* – лайла] **флегматик** *(төп дүрт төр темпераменттың береһенә эйә булған субъект: уның холҡо — вайымһыҙ, тыныс, яй, ауыр тәбиғәтле).*

**ФО́БИИ** [гр. *phobos* — ҡурҡыу] **фобия, ҡурҡыу кисереше** *(субъекттың билдәле бер шарттарҙа ҡурҡыу тойғоһо кисереүе һәм унан ҡотола алмауы; был саҡта организм функцияларының эшмәкәрлеге боҙолоуы күҙәтелә: йөрәк йыш ҡаға, һауа етмәй, ныҡ тирләтә һ.б.).*

**ФОНОХРЕСТОМА́ТИЯ фонохрестоматия** *(ниндәйҙер уҡыу предметы программаһы буйынса төҙөлгән төрлө телмәр, нәфис һүҙ, йыр һ.б. сығыштарҙың фонограммалары тупланған уҡыу әсбабы).*

**ФОРМИРОВА́НИЕ ЛИ́ЧНОСТИ шәхес тәрбиәләү** *(маҡсатлы тәьҫир һәм тирә-яҡ мөхит йоғонтоһо аша айырым бер кеше тәрбиәләү).*

**ФОРМИРУ́ЮЩИЙ ЭКСПЕРИМЕ́НТ** *ҡара:* **ЭКСПЕРИМЕ́НТ ФОРМИРУ́ЮЩИЙ.**

**ФРЕЙДИ́ЗМ фрейдизм** *(кешеләрҙең мәҙәниәт һәм ижтимағи тормошондағы хәлдәрҙе тик биологик инстинкт күренеше тип ҡараған Австрия ғалимы З. Фрейд тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән төрлө мәктәп, йүнәлештәр атамаһы).*

**ФРЕЙДОМАРКСИ́ЗМ фрейдомарксизм** *(психоанализда фрейдизм менән марксизмды, уларҙың ҡайһы бер положениеларындағы ялған «уртаҡлыҡтар»ға нигеҙләнеп берләштерергә тырышҡан ағым вәкилдәре).*

**ФРЕЙМ** [ингл. *frame* — ҡыҫан, рамка, һөлдә] **фрейм** *(1) ниндәйҙер бер күренеш, факт йәки объекттың төп үҙенсәлектәрен тасуирлау, уларҙың береһен генә алып ташлағанда ла был күренеш, факт йәки объектты танып, дөрөҫ төркөмләп булмай; 2) төркөмләнергә тейеш булған рәсемдәрҙе сағыштырыу өсөн ҡулланылған үрнәк, өлгө).*

**ФРЕНОЛО́ГИЯ** [гр. *phrenos* — рух, холоҡ һәм *logos* — тәғлимәт] **френология** *(кеше йәки хайуандың психик*

*үзенсәлектәре баш һөйәгенең формаһына бәйле булыуы тураһында Ф. Галле тарафынан тәҡдим ителгән тәғлимәт. Төп идеяһы: баш мейеһенең ҡабығында кешенең ниндәйҙер һәләтлектәре тупланған үҙәктәр урынлашҡан).*

**ФРИГИ́ДНОСТЬ** [лат. *frigidus* — һалҡын] **фригидлыҡ** *(енси тормошта ҡатын-ҡыҙҙарҙың һалҡынлығы; енси әүәҫлек, сексуаль ярһыу кәмеү йәки юғалыу, ләззәт тойғоһо булмау).*

**ФРУСТРА́ЦИЯ** [лат. *frustratio* — алдау, боҙолоу, пландар емерелеү] **фрустрация** *(маҡсатҡа ирешеүҙә, мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә еңеп сыға алмаҫлыҡ (йәки шулай тойолған) ауырлыҡтарға осраған кешенең психик хәле; психологик стрестың бер төрө. Фрустрация, ғәҙәттә, кире эмоциялар тыуҙыра: нәфрәтләнеү, асыуланыу, ярһыу, үҙ-үҙеңде ғәйепләү һ.б.).*

**ФУНКЦИОНА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** [лат. *functio* — башҡарыу, үтәү] **функциональ психология** *(аң процестарын организмдың тирә-яҡ мөхиткә ҡарап үҙгәреү, яраҡлашыу күҙлегенән өйрәнгән йүнәлеш).*

**ФУНКЦИОНА́ЛЬНОЕ СОСТОЯ́НИЕ функциональ хәл** *(кеше һәм хайуандың ниндәйҙер шарттарҙа үҙ-үҙен тотошонда нервы системаһының әүҙемлек кимәле, мейе эшенең, уның күп структураларының дөйөм хәлен күрһәткән, тулайым ҡылыҡһырламаһы).*

# Х

**ХАРА́КТЕР** [гр. *charakter* — мисәт, һыр] **характер, холоҡ** *(шәхестең эшмәкәрлектә, аралашыуҙа формалашҡан, ҡылыҡ-ғәҙәттәрендә сағылған үҙенә генә хас тотороҡло үҙенсәлектәр йыйылмаһы).*

**ХАРА́КТЕР ВОЛЕВО́Й ихтыярлы характер.**

**ХАРА́КТЕР ПАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ патологик характер.**

**ХАРА́КТЕР СИ́ЛЬНЫЙ көслө характер.**

**ХАРА́КТЕР СЛА́БЫЙ йомшаҡ характер.**

**ХАРАКТЕРОЛО́ГИЯ** [гр. *charakter* — мисәт, һыр һәм *logos* — тәғлимәт] **характерология** *(киң мәғәнәлә — кеше шәхесенең характеры тураһындағы тәғлимәт).*

**ХАРИ́ЗМА** [гр. *charisma* — бүләк] **харизма, аллалаштырыу** *(шәхескә табыныу һәм уның һәләтенә, көсөнә, мөмкинлектәренә инаныу тойғоһо булдырыу. Харизма экстремаль*

*тарихи ваҡиғаларҙа барлыҡҡа килә. Харизматик лидер яҡлыларҙың барлыҡ уңыштары тик уның уңыштары тип күрһәтелә, хатта уңышһыҙлыҡтары ла дан-шөһрәт менән ҡабул ителә (ҡасыу — ҡотолоу тип, юғалтыуҙар — кәрәкле ҡорбан тип, мәғәнәһеҙ раҫлауҙары — юғары кимәлдәге аҡыллылыҡ тип).*

**ХИРОМА́НТИЯ** [гр. *cheir* — ҡул, *manteia* — күрәҙәлек, әүлиәлек] **хиромантия** *(кешенең айырым шәхси үҙенсәлектәрен, уның характер һыҙаттарын, ул кисергән ваҡиғаларҙы һәм уның киләсәген усындағы һыҙаттарға ҡарап әйтеп биреүсе бик боронғо күрәҙәлек итеү системаһы).*

**ХОЛЕ́РИК** [гр. *chole* — үт] **холерик** *(төп дүрт темпераменттың береһенә эйә булған субъект. Юғары кимәлдәге психик әүҙемлек, көслө ихтыяр, киҫкен, ынтылышлы хәрәкәттәр, ҡыҙыу холоҡ менән ҡылыҡһырлана).*

**ХРЕСТОМА́ТИЯ** [гр. *chrestomatheia* < *chrestos* — яҡшы, файҙалы һәм *manthano* — өйрәнәм] **хрестоматия** *(ниндәйҙер белем тармағы буйынса тупланған әҙәби, фәнни, публицистик әҫәрҙәр йәки уларҙан өҙөктәр, шулай уҡ төрлө документтар йыйынтығын берләштергән уҡыу китабы).*

# Ц

**ЦЕЛЕОБРАЗОВА́НИЕ** маҡсат барлыҡҡа килеү *(фекерләүҙең бер күренеше буларак, кеше эшмәкәрлегендә яңы маҡсаттар барлыҡҡа килеү процесы).*

**ЦЕ́ЛОСТНОСТЬ ВОСПРИЯ́ТИЯ** тойоу бөтөнлөгө *(һиҙеү органдарына туранан-тура тәьҫир булғанда объекттарҙың, уларҙың бөтә сифаттарын бер бөтөн итеп тойоу үҙсәнлеге).*

**ЦЕЛЬ** маҡсат *(алдан билдәләнгән һөҙөмтәгә ирешеү өсөн кешенең эш-хәрәкәте йүнәлтелгән бурыс).*

**ЦЕ́ННОСТНО-ОРИЕНТАЦИО́ННОЕ ЕДИ́НСТВО** ҡиммәт-йүнәлеш берҙәмлеге *(төркөмдөң ойошҡанлығын күрһәтеүсе уның ағзаларының дөйөм төркөм өсөн мөһим булған эшмәкәрлек маҡсаттарына һәм ҡиммәттәргә ҡараш-баһаларының тап килеү кимәлен билдәләүсе төп күрһәткестәрҙең береһе).*

**ЦЕННОСТНЫЕ ОРИЕНТА́ЦИИ** *(социаль психологияла)* [фр. *orientation* — йүнәлеш] **киммәт йүнәлеше** *(1) субъекттың тирә-яҡтағы ысынбарлыҡты идеологик, сәйәси, әхлаҡи, эстетик һәм башҡа яҡтан баһалау нигеҙҙәре һәм ундағы йүнәлештәр; 2) индивидтың объекттарҙы мөһимлеге яғынан айырыу алымы).*

# Ч

**ЧЕЛОВЕ́К** **кеше** *(фекер йөрөтә, һөйләшә, эш ҡоралдары яһай һәм уны файҙалана белгән иң юғары аҡыл ҡеүәһенә эйә йән эйәһе, ижтимағи-тарихи эшмәкәрлек субъекты. Психология фәне кешенең психикаһын, уның үҫешен, индивидуаль-психологик үҙенсәлектәрен, социаль тормоштағы ролен, эшмәкәрлеген һәм аралашыу ролен өйрәнә).*

**ЧЕРТЫ́ ЛИ́ЧНОСТИ** **шәхес һыҙаттары** *(индивидтың ҡылыҡ-фиғелендәге тотороҡло, төрлө ситуацияларҙа ҡабатланған үҙенсәлектәр).*

**ЧЕСТОЛЮ́БИЕ** **данһөйәр** *(шәхестә эшмәкәрлектең ниндәйҙер өлкәһендә, ижтимағи тормошта дан-шөһрәт артынан ҡыуыу, награда, почетлы урын алырға ынтылыу, беренсе булырға тырышыу мотивтарының өҫтөнлөк итеүе).*

**ЧИТА́ЛЬНАЯ МАШИ́НА** **уҡыу машинаһы** *(һуҡырҙар һәм һуҡыр-һаңғырауҙарға типографик баҫмаларҙы (китап, журналдар) һәм яҙыу машинкаһында баҫылған текстарҙы уҡыу өсөн тәғәйенләнгән аппарат).*

**ЧИТА́ТЕЛЬСКАЯ КОНФЕРЕ́НЦИЯ***(мәктәптә)* **китап уҡыусылар конференцияһы** *(синыфтан тыш уҡыу менән етәкселек итеүҙең бер формаһы; китап уҡыусылар конференцияһында әҙәбиәт тураһында уҡыусылар тарафынан махсус әҙерләнгән докладтар тыңланыла һәм фекер алышыу ойошторола).*

**ЧЛЕН-КОРРЕСПОНДЕ́НТ** **ағза-корреспондент, мөхбир ағза** *(академик дәрәжә. Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы итеп ғилми хеҙмәттәре менән фәнгә ҙур өлөш индергән ғалимдар һайлана).*

**ЧТЕ́НИЕ РАЦИОНА́ЛЬНОЕ** **рациональ (дөрөҫ ойошторолған) уҡыу** *(текстағы мәғлүмәттәрҙе тиҙ аңлау, төшөнөү һәм үҙләштереү маҡсатында аңлы рәүештә уҡыу*

*ҡағиҙәләрен һаҡлау. Рациональ уҡыуға тиҙ уҡый белеү, тексты аңлау, хәтерҙә ҡалдырыу кимәленең юғары булыуы, шулай уҡ уҡыу тиҙлеген һайлау күнекмәләре инә).*

**ЧУ́ВСТВА** хистәр *(кешенең ысынбарлыҡ предметтарына, күренештәренә, хәл-ваҡиғаларына күңелдән килгән үҙ мөнәсәбәте нигеҙендә тыуған, сағыштырмаса тотороҡло булған кисерештәре).*

**ЧУВСТВИ́ТЕЛЬНОСТЬ 1.** тойоу һәләте, һиҙгерлек *(тойоуға дөйөм һәләтлек);* **2.** хиссәнлек, тиҙ әҫәрләнеүсәнлек, күңелсәк *(дифференциаль психологияла һәм характерологияла — көслө тойғоларға тиҙ бирелеүсәнлек).*

**ЧУ́ВСТВО Ю́МОРА** шаяртҡанды аңлау *(кешенең ғәҙәти һүҙ ҡулланылышында, күренештәрҙә көлкө яҡтарҙы һиҙеп ҡалыу һәм хис-тойғо менән яуап биреү һәләте, көлкө итеп күрһәтеү оҫталығы).*

# Ш

**ШКАЛА́** [лат. *scala* — баҫҡыс] шкала *(объекттың өҙлөкһөҙ үҫсәнлектәрен үлсәү ҡорамалы; объекттарҙың төрлө үҫсәнлектәрен сағылдырған дәүмәлдәрҙе билдәләү, баһалау өсөн ҡабул ителгән һандар системаһы).*

**ШКАЛА́ ОЦЕ́НОК** баһалар шкалаһы *(өйрәнелеүсе объекттарҙы уларҙың дөйөм үҙенсәлектәре сағылышы дәрәжәһе буйынса төркөмләргә мөмкинлек биргән методик алым).*

**ШКАЛА́ УСТАНО́ВОК** билдәләү шкалаһы *(тикшерелеүсе күренешкә мөнәсәбәттәренең ҙурлығы, көсөргәнешлелеге, тотороҡлолоғо буйынса индивидтарҙы сағыштырырға мөмкинлек биргән алым).*

**ШКО́ЛА** мәктәп *(йәш быуынға дөйөм белем һәм тәрбиә бирә торған уҡыу йорто).*

**ШКО́ЛА ВЗРО́СЛЫХ** ололар мәктәбе *(халыҡ „хужалығының төрлө өлкәләрендә эшләгән, ваҡытында ғәҙәти мәктәптә уҡымаған өлкәндәр һәм йәштәр белем алған төрлө типтағы уҡыу йорттарының дөйөм атамаһы).*

**ШКО́ЛЬНАЯ СЕТЬ** мәктәп селтәре *(билдәле территорияла төрлө типтағы мәктәптәрҙең урынлашыуы; мәктәп селтәрен төҙөү берҙәм дәүләт мәктәптәренең дөйөм мәжбүри*

*белем биреү принциптарына ыңғай шарттар тыуҙырыуҙы маҡсат итеп ҡуя).*

**ШКОЛОВЕ́ДЕНИЕ** **мәктәп эше тураһындағы фән, мәктәпте өйрәнеү фәне** *(педагогиканың халыҡ мәғарифы, уҡытыу-тәрбиә учреждениеларының селтәре һәм структураһы, уларҙың эшмәкәрлегенә етәкселек итеүгә бәйле бөтә ойоштороу, педагогик проблемаларҙы тикшереү, өйрәнеү менән шөғөлләнгән бүлеге).*

## Э

**ЭВРИ́СТИКА** **эвристика** *(һөҙөмтәле ижади фекерләүҙе өйрәнеүсе фән).*

**ЭГО** [лат. *ego* — мин] **эго** *(З. Фрейд теорияһындағы шәхес структураһының бер компоненты).*

**ЭГОИ́ЗМ** [лат. *ego* — мин] **үҙемселек, эгоизм** *(субъекттың йәшәү эшмәкәрлегендә үҙен, үҙ мәнфәғәтен бөтәһенән өҫтөн ҡуйыуы).*

**ЭГО-ПСИХОЛО́ГИЯ** **эго-психология** *(психоанализда ортодоксаль фрейдизмға ҡаршы хәрәкәт булараҡ барлыҡҡа килгән йүнәлештәрҙең береһе. Фрейдизмдан айырмалы булараҡ, эго-психология шәхестең үҫешендә аң мөһимерәк һәм үҙ аллы роль уйнай, тип иҫәпләй).*

**ЭГОЦЕНТРИ́ЗМ** [лат. *ego* — мин, *centrum* — түңәрәк үҙәге] **эгоцентризм** *(индивидтың үҙ мәнфәғәттәрен күҙәтеп, ниндәйҙер объектҡа, фекергә, күҙаллауҙарға ҡарата тәүҙә барлыҡҡа килгән фекерен, хатта үткән тәжрибәгә ҡапма-ҡаршы килгән мәғлүмәт булғанда ла, үҙгәртергә һәләтһеҙ булыуы).*

**ЭДИ́ПОВ КО́МПЛЕКС** [лат. *complexus* — бәйләнеш] **эдип комплексы** *(фрейдизмдың төп төшөнсәләренең береһе; сабый саҡта уҡ аңһыҙ рәүештә ҡыҙ баланың атаһын, ир баланың әсәһен яратыуы һәм, уға ҡарата енси теләк тыуыуы арҡаһында, үҙе менән бер енестәгеһен физик яҡтан юҡ итергә ынтылыуҙы барлыҡҡа килтергән хис-тойғолар комплексы; эдип комплексы атамаһы, боронғо грек мифологияһы буйынса, атаһы икәнде белмәйенсә, уны үлтереп, әсәһенә өйләнгән Эдип батша исеменән алынған).*

**ЭЙДЕТИ́ЗМ** [гр. *eidos* — күренеш, образ] **эйдетизм, күреп иҫтә ҡалдырыу** *(ҡайһы бер индивидтарҙың элек күреп иҫтә*

*ҡалдырған предмет һәм хәл-ваҡиғаларҙың ғәҙәттән тыш йәнле, ентекле образдарын һаҡлау һәм ҡабаттан хәтергә төшөрөп, күҙ алдына килтереү хәләте).*

**ЭЙФОРИ́Я** [гр. *euphoria < eu* — яҡшы, *phero* — кисереү] **эйфория** *(сәбәпһеҙ-ниһеҙ шат, күтәренке кәйеф, объектив шартҡа тура килмәгән ғәмһеҙ тыныс хәл).*

**ЭКЗА́МЕН** [лат. *examen* — һынау] **имтихан, һынау** *(белем кимәлен билдәләү маҡсатында үткәрелгән һынау).*

**ЭКЗА́МЕН ВСТУПИ́ТЕЛЬНЫЙ** **ҡабул итеү имтиханы.**

**ЭКЗА́МЕН ВЫПУСКНО́Й** **сығарылыш имтиханы.**

**ЭКЗА́МЕН ГОСУДА́РСТВЕННЫЙ** **дәүләт имтиханы.**

**ЭКЗА́МЕН ОСЕ́ННИЙ** **көҙгө һынау.**

**ЭКЗА́МЕН ПИ́СЬМЕННЫЙ** **яҙма имтихан.**

**ЭКЗА́МЕН У́СТНЫЙ** **телдән һынау.**

**ЭКЗИСТЕНЦИА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *ex(s)istentia* — йәшәү] **экзистенциаль психология** *(«гуманистик психология»ның бер йүнәлеше. Экзистенциаль психология 1) ваҡыт, йәшәү һәм үлем проблемаларын; 2) азатлыҡ, яуаплылыҡ һәм һайлау проблемаларын; 3) аралашыу, мөхәббәт һәм яңғыҙлыҡ проблемаларын; 4) йәшәү мәғәнәһен эҙләү проблемаларын өйрәнә).*

**ЭКОЛОГИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** **экологик психология, мөхит психологияһы** *(кеше менән уның эшмәкәрлегендә тәбиғи ҡатнашҡан, ҡылығын, социаль бәйләнештәрен яйлауҙа мөһим фактор булған тирә-яҡ мөхит араһындағы мөнәсәбәттәрҙең (географик, социаль, мәҙәни) психологик аспекттары тураһындағы һуңғы ваҡытта төрлө фәндәр киҫелешендә формалашҡан белем өлкәһе).*

**ЭКОНОМИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *oikonomike* — һүҙмә-һүҙ: йорт хужалығын алып барыу һәләте] **иҡтисади психология** *(психологияның кешеләрҙең эштәге мөнәсәбәттәренә бәйле психологик күренештәрҙе өйрәнеүсе бүлеге. Уның төп бурысы — психологик тикшеренеүҙәр нигеҙендә хужалыҡ эшмәкәрлегендә иҡтисади файҙаны артабан үҫтерергә ярҙам иткән концепциялар һәм ғәмәли тәҡдимдәр эшләү).*

**ЭКСКУ́РСИИ УЧЕ́БНЫЕ** **уҡыу (өйрәтеү) экскурсиялары** *(уҡытыу-тәрбиә эшендә төрлө предметтарҙы, тәбиғәт күренештәрен ғәҙәти шарттарҙа йәки музей, күргәҙмәләрҙә күҙәтеү, өйрәнеү мөмкинлеге булған алым һәм формалар).*

**ЭКСПЕКТАЦИИ** [ингл. *expectation* — көтөү] экспектация, көтөү, өмөт (*индивидтың социаль ролен үтәү нормаларына ҡарата өмөттәр, талаптар системаһы. Экспектация төркөмдәге мөнәсәбәттәр системаһын яйлаусы социаль санкцияларҙың бер төрө. Уның ике яғы бар: тирәләгеләрҙән үҙҙәрен йәмғиәттә биләгән урындарына ярашлы тотоуҙарын көтөү хоҡуғы һәм үҙеңдең башҡалар бағлаған ышанысты аҡлау бурысы).*

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ** (*психологияла*) [лат. *experimentum* — һынау, тәжрибә] эксперимент (*ғөмүмән, фәнни һынауҙа, айырып әйткәндә, психологик тикшеренеүҙәрҙә күҙәтеү менән бер рәттән ҡулланылған төп алымдарҙың береһе. Фәнни маҡсат менән ойошторола торған тәжрибә).*

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ АССОЦИАТИ́ВНЫЙ** ассоциатив эксперимент.

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ ЕСТЕ́СТВЕННЫЙ** тәбиғи эксперимент.

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ ЛАБОРАТО́РНЫЙ** лаборатор эксперимент.

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ У́МСТВЕННЫЙ** аҡыл эксперименты.

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ В ПЕДАГО́ГИКЕ** педагогикалағы эксперимент, педагогик эксперимент (*уҡытыу, тәрбиә, балалар үҫеше, мәктәп менән етәкселек итеү, гипотезаны тикшереү буйынса педагогик эшмәкәрлек; фәнни яҡтан нигеҙләнгән тәжрибә).*

**ЭКСПЕРИМЕ́НТ ФОРМИРУ́ЮЩИЙ** формалаштырыусы эксперимент (*йәшкә бәйле һәм педагогик психологияла ҡулланылған, тикшереүсе әүҙем йоғонто яһағанда бала психикаһының һәр үҙгәрешен күҙәтеү алымы).*

**ЭКСПЕРИМЕНТА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** эксперименталь психология (*психик күренештәрҙе төрлө эксперименталь алымдар ярҙамында тикшереүҙең дөйөм билдәләмәһе).*

**ЭКСПРЕССИ́ВНЫЙ** [лат. *expressio* — сағылыш] экспрессив, тәьҫирле (*хис-тойғоно, кисереште сағылдырған, тәьҫирле).*

**ЭКСПРЕ́ССИЯ** [лат. *expressio* — сағылыш] экспрессия (*эске хис-тойғо, кисерештәрҙе тышҡа сағылдырыу көсө (мимика, тауыш һәм ҡул хәрәкәттәрендә).*

**ЭКСТЕРИОРИЗА́ЦИЯ** [лат. *exterior* — тышҡы] экстериоризация (*кешенең ижтимағи эшмәкәрлек нигеҙендә ҡайһы бер эске структураларҙың үҙгәреүе арҡаһында барлыҡҡа килгән фекерҙәрен, уй-ҡараштарын тышҡа сығарыу, ғәмәлләштереү процесы).*

**ЭКСТЕРНА́ЛЬНОСТЬ — ИНТЕРНА́ЛЬНОСТЬ** [лат. *externus* — тышҡы, *internus* — эске] **экстерналлек — интерналлек** *(индивидтың нимәнеңдер сәбәбен эҙләгәндә, контролдең билдәле бер формаһына (тышҡы йәки эске) һәүәҫлеге. Эске (интерналь) сәбәп булғанда, кеше тормошондағы төрлө ваҡиғалар өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә ала, үҙенең тәртип, характер, һәләтенә ҡайтарып ҡалдыра, ә тышҡы (экстерналь) сәбәп булғанда, кеше бөтә яуаплылыҡты тышҡы факторҙарҙан (тирә-яҡ мөхиттән, яҙмыштан, осраҡтан) эҙләй).*

**ЭКСТЕРОЦЕПТИ́ВНЫЕ ОЩУЩЕ́НИЯ** **экстероцептив (тышҡы) тойғолар** *.(тышҡы донъяның үҙенсәлектәре тураһында төрлө сигнал биргән тойғолар).*

**ЭКСТРАВЕ́РСИЯ-ИНТРОВЕ́РСИЯ** [лат. *extra* — тыш, *intro* — эскә, *versio* — әйләндереү, бороу] **экстраверсия-интроверсия** *(кешенең индивидуаль-психологик айырмалыҡтарын ҡылыҡһырлау; шәхестең күберәк тышҡы объекттарға йәки үҙенең субъектив донъяһы күренештәренә йүнәлгәнлегенә бәйле рәүештә, кешеләр ҡапма-ҡаршы ике типҡа бүленә. Экстраверсия-интроверсия төшөнсәһе К. Юнг тарафынан шәхестең ҡапма-ҡаршы типтарын билдәләү өсөн индерелгән. Экстраверттар импульсив, инициативалы, аралашыусан, ә интроверт тибына яңғыҙлыҡты яратыу, йомоҡлоҡ, пассивлыҡ, үҙ мәнфәғәтен генә күҙәтеү хас).*

**ЭКСТРАВЕРТИ́РОВАННОСТЬ** **алсаҡлыҡ, илгәҙәклек** *(ҡайһы бер кешеләрҙең тиҙ аралашыусан, эске донъяһының асыҡ, башҡалар менән ҡыҙыҡһыныу үҙенсәлеге).*

**ЭКСТРЕМА́ЛЬНАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** **экстремаль психология** *(психологияның ғәҙәти булмаған шарттарҙа: һауалағы һәм космостағы осоштарҙа, һыу аҫты сәйәхәтендә, Ер шарының барып етеүе ҡыйын булған төбәктәрендә (Арктика, Антарктида, бейек тауҙар, сүллек), ер аҫтында һ.б. урындарҙа кеше тормошондағы һәм эшмәкәрлегендәге психологик ҡануындарҙы өйрәнгән тармағы. XX быуат аҙағында барлыҡҡа килә).*

**ЭМО́ЦИИ** [лат. *emoveo* — тетрәндереү, тулҡынландырыу] **эмоция, хис-тойғо** *(кешенең һәм хайуандарҙың эске һәм тышҡы тәьҫиргә асыҡ сағылған субъектив үҙенсәлекле яуабы: ҡыҫҡа ваҡытлы эске кисереше һәм шуның сағылышы).*

**ЭМОЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** **эмоционаллек, хисселек** *(кешенең нескә хистәргә, тойғоларға бирелеү сифаты).*

**ЭМПА́ТИЯ** [гр. *empatheia* — кисерешеү] эмпатия *(башҡаларҙың эмоциональ хәлен, кисерештәрен аңлау һәм уға теләктәшлек итеү процесы).*

**ЭСТЕТИ́ЧЕСКОЕ ВОСПИТА́НИЕ** эстетик тәрбиә *(шәхесте, йәмғиәтте идеалдарға һәм зауыҡҡа ярашлы тәрбиәләү, тәбиғәттәге, мәҙәниәттәге һәм ижтимағи мөхиттәге матурлыҡты аңларға, тойорға өйрәтеү һәм ижад итеү һәләтен үҫтереү).*

**Э́ТИКА ПСИХО́ЛОГА ПРОФЕССИОНА́ЛЬНАЯ** психологтың профессиональ этикаһы *(психологтың үҙ эшмәкәрлегендә үҙенә хас әхлаҡи талаптарҙы үтәүе, фәнни берекмә, хеҙмәттәштәр шулай уҡ психологка ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән кешеләр, һыналыусылар менән үҙ-ара мөнәсәбәттә тәртип нормаларын һаҡлауы).*

**ЭТИКЕ́Т** [фр. *etiguette*] этикет, әҙәп *(үҙ-үҙеңде тотоуға, әхлаҡҡа бәйле ҡағиҙәләр).*

**ЭТНИ́ЧЕСКАЯ КАРТИ́НА МИ́РА** донъяның милли кәүҙәләнеше, донъяның милли моделе *(билдәле бер милләт вәкилдәренең үҙ-үҙен тотошонда, ҡылыҡ-фиғелендә аңһыҙ рәүештә сағылған төп уй, фараздар йыйылмаһы. Ысынбарлыҡтағы нәмәләрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың билдәле бер милләт кешеләренең рухи донъяһындағы сағылышы).*

**ЭТНИ́ЧЕСКАЯ ПЕДАГО́ГИКА** милли педагогика *(үҫеп килгән йәш быуынды тәрбиәләүҙә халыҡ идеяларының, традиция һәм тәжрибәләренең тәрбиә мөмкинлектәрен өйрәнеүсе фән-ара белем тармағы).*

**ЭТНИ́ЧЕСКИЕ СТЕРЕОТИ́ПЫ** этник стереотиптар *(төрлө этник төркөмгә хас булған әхлаҡи, аҡылға бәйле, физик сифаттар тураһындағы тотороҡло күҙаллауҙар).*

**ЭТНИ́ЧЕСКИЕ УСТАНО́ВКИ** этник йүнәлеш *(шәхестең милли тормоштан, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙән теге йәки был күренеште үҙләштереүгә әҙер булыуы һәм конкрет шарттарҙа ошо йүнәлешкә ярашлы эш итеүе).*

**ЭТНИ́ЧЕСКИЙ КОНФЛИ́КТ** этник конфликт *(ҡапма-ҡаршы мәнфәғәтле төркөмдәрҙең милли билдәләр буйынса ҡаршылыҡҡа (конфликтҡа) килеүе).*

**ЭТНОПСИХОЛО́ГИЯ** [гр. *ethnos* — халыҡ] милли психология, этнопсихология *(белемдең кешеләр психикаһындағы этник үҙенсәлектәрҙе, милли характер формалашыу ҡанундарын, милли үҙаңдың, этник стереотиптарҙың функцияларын өйрәнеүсе фән-ара тармағы).*

**ЭХОЛА́ЛИЯ** [гр. *echo* — яңғыраҡ, *lalia* — телмәр] эхолалия *(ололарҙың һәм балаларҙың ҡайһы бер психик ауырыу ваҡытында башҡа кешеләрҙең һүҙҙәрен автоматик рәүештә ҡабатлау күренеше).*

**ЭХОПРА́КЦИЯ** [гр. *echo* — яңғыраҡ, *praxia* — эш итеү] эхопракция *(башҡа кешеләрҙең хәрәкәтен, эшен, уларға оҡшатырға тырышып, автоматик рәүештә ҡабатлау).*

# Ю

**Ю́МОР** [ингл. *humour* — холоҡ, кәйеф] *ҡара:* **ЧУВСТВО ЮМО́РА.**

**Ю́НОСТЬ** йәшлек, йәш саҡ *(кеше үҫешендәге үҫмер йәшенән үҙ аллы тормошҡа сығыу осорона тура килгән ваҡыт араһы. Хронологик сиктәре: 15-тән — 18-гә тиклемге өлкән синыф йәше һәм йәшлектең һуңғы осоро — 18-ҙән — 23 йәшкә тиклем).*

**Ю́НЫЕ СЛЕДОПЫ́ТЫ** йәш эҙәрмәндәр.

**ЮРИДИ́ЧЕСКАЯ ПСИХОЛО́ГИЯ** юридик (хоҡуҡи) психология *(психология фәненең хоҡуҡи мөнәсәбәттәр өлкәһендә кешеләрҙең психик эшмәкәрлегә механизмын һәм ҡанундарын өйрәнеүсе тармағы).*

# Я

**Я** *(психологияла)* **мин** *(кешенең үҙен-үҙе тирә-яҡ мөхиттән айырыу һәҙөмтәһе. Был уға үҙенең физик һәм психик хәленең, эшләгән эштәренең, процестың субъекты итеп тойорға, үҙенең бөтөнлөгөн, үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә ярашлы тап килеүен кисерергә мөмкинлек бирә).*

**ЯЗЫ́К** *(психологияла)* **тел** *(телмәр ярҙамында бойомға ашырылып, үҙ-ара аралашыу сараһы булып торған, психик (шулай уҡ интеллектуаль) эшмәкәрлекте сағылдырған һүҙ тамғалары системаһы).*

**ЯЗЫ́К ОБУЧЕ́НИЯ** уҡыу-уҡытыу теле.

**ЯЗЫКОВО́Е ЧУТЬЁ** телгә һиҙгерлек.

**Я́-ИДЕАЛ** Мин идеалы *(психоанализда «гәжәйеп-мин» терминына синоним итеп ҡулланылған термин).*

**Я́-КОНЦЕПЦИЯ** Мин концепцияһы *(индивидтың үҙе тураһында сағыштырмаса тотороҡло, ниндәйҙер дәрәжәлә аңлы рәүештә ҡабатланмаҫ тип кисерелгән күҙаллауҙар системаһы. Шул күҙаллау нигеҙендә ул үҙ эшен, башҡалар менән мөнәсәбәтен көйләй, эске ҡаршылыҡтары булһа ла, үҙендәге «Гәжәйеп-мин»дең бөтөн образын тыуҙырырға тырыша. «Мин» образы бер нисә компонентты үҙ эсенә ала: когнитив — үҙ сифаттарының, һәләттәренең, тышҡы ҡиәфәтенең образы (үҙаң); эмоциональ — үҙ-үҙен ихтирам итеү, яратыу йәки юҡҡа сығарыу; баһалы-ихтыярлы — үҙ баһаңды арттырырға, ихтирам яуларға тырышыу. Мин концепцияһы йәмғиәттең аңлы ағзаһын тәрбиәләүҙә мөһим шарт булып тора).*

**ЯСНОВИ́ДЕНИЕ** күрәҙәселек, алдан күреү *(киләсәк ваҡиғаларҙы бик күпкә алдан күрә алыу һәләте).*

Учебное издание

**СУФЬЯНОВА Насима Фатиховна**

**РУССКО-БАШКИРСКИЙ СЛОВАРЬ ПЕДАГОГИЧЕСКИХ И ПСИХОЛОГИЧЕСКИХ ТЕРМИНОВ**

Редакция мөдире *Мөхтәруллина С. F.*
Мөхәррирҙәре *Атнағолова С. В., Fималова Ф. Б.*
Биҙәлеш мөхәррире *Мөхтәруллин А. Р.*
Техник мөхәррире *Янғужина Г. А.*
Корректорҙары *Иҙелбәкова А. В., Йосопова И. М., Усманова В. С.*

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 15.05.2002. Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.11.02. Ҡағыҙ форматы 84x108 1/32. Офсет ҡағыҙы № 1. Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 5,88. Шартлы буяу отт. 6,3. Иҫәп-нәшер таб. 5,0. Тиражы 3000 дана. Заказ № 635.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

БР ЭЭМ «ТиД» ФПК дәүләт унитар предприятиеһы.
450071, Өфө, СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 39.



**Суфьянова Нәсимә Фәтих ҡыҙы**
1949 йылдың 10 июнендә Күгәрсен районы Юлдыбай ауылында тыуған. 1968 йылда Салауат педагогия училищеһын тамамлағандан һуң, Юлдыбай ауылы мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. 1973 йылда Башҡорт дәүләт университеты башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультетының ситтән тороп белем алыу бүлегенә уҡырға инә һәм Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында лаборант булып эшләй башлай.
Әлеге көндә ошо уҡ институтта – өлкән ғилми хеҙмәткәр, филология фәндәре кандидаты. Үҙенең ғилми эшмәкәрлеген башҡорт лексикографияһына бағышлай. “Башҡортса-русса һүҙлек” (1996), “Урыҫса-башҡортса һүҙлек” (2002) төҙөүҙә ҡатнаша. “Башҡорт телендә күп мәғәнәле һүҙҙәр проблемаһы һәм уларҙы һүҙлектә сағылдырыу” (1998) монографияһының авторы.